ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

16-22 март (буранай) 2019

№ 11 (845)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле


БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Көтөүҙәргә көтөүсе кәрәк!** 6



**Театрҙың һөйөклөһө** 7



**Башҡорт моңо - бөтөн,** уға кемдекендер ҡушыу кәрәкмәй 8-9



**Үҙебеҙ етештергәнде...** үҙебеҙ ҡулланып йәшәйек 12



**ТВ-программа** 14


***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! 50665 индекслы "Киске Өфө" гәзитенә март аҙағына тиклем 2019 йылдың икенсе яртыһы өсөн ваҡытынан алда яҙылыу бара. 615 һумға әле үк яҙылып ҡуйһағыҙ, отоҫһоғоҙ. Апрелдән хаҡтар бер аҙ юғарыраҡ буласаҡ. Ә 2019 йылдың тәүге яртыһы өсөн иһә 18 апрелгә тиклем яҙылһағыҙ (ике айға - 205 һум), гәзитебеҙҙе майҙан алдыра башлаясаҡһығыҙ.***

ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ БАР

# УРЫНДАҒЫ ШИФАХАНАЛА...

## ял итермен, тимә

**Һәр проблеманың да хәл итәһе юлдары була. Ниндәйҙер мәсьәләне тиҙ һәм үҙең генә йырып сыға алһаң, икенселәре иһә күп көс һәм ярҙам талап итә. Бигерәк тә бюрократик кәртәләрҙең ҙур булыуы ҡайһы бер проблеманың ныҡ итеп ҡабарыуына килтерә.**
**Республиканың яңы Башлығы бөтә өлкәләге етешһеҙлектәрҙе бөтөрөүгә лә ихлас тотондо һәм әлегә тиклем өмөтһөҙ булып тойолған проблемаларҙың да сиселеүенә ышаныс уятты.**

Мине борсоған проблеманың береһе - етемдәрҙе торлаҡ менән тәьмин итеүҙәге ҡытыршылыҡтар. Тик үҙҙәренә генә таянырға тура килгән, тормош тарафынан былай ҙа йәберләтелгәндәргә ҡарата урындағы чиновниктарҙың битарафлығы аптырата ла, асыуға ла тейә. Мәҫәлән, минең ошондай бер танышым үҙенә законға ярашлы бирелергә тейеш торлаҡты 18 йыл буйы ала алмай. Унының төрлө инстанцияларға ебәргән хаттарынан һәм уларға килгән яуаптарҙан әллә нисә томлыҡ китап яҙырға була. Опека ойошмаһы бөгөнгө көндә таныштарының мунсаһында көн итеүсе әсәнән ике балаһын да алып китте, сөнки йәшәү шарттары яраҡлы түгел. Үҙе лә әсәйһеҙ үҫеүе етмәгән, хәҙер уның балалары ла әсәйле көйө етемлеккә дусар. Хәҙер, баҡтиһәң, суд ҡарары ла көскә эйә түгел икән, сөнки уға торлаҡ бирергә тигән ҡарар әле булһа үтәлмәгән. Бер үҙе көрәшеп арып, тайғаҡ юлға баҫыуҙан саҡ-ҡа тороп ҡалған ҡатындың, әсәнең артабан көрәшерлек хәле күпмегә етер - билдәһеҙ.

Ә торлаҡ алып та, уның йәшәргә яраҡһыҙ булыуы тураһында күпме репортаждар төшөрәләр, гәзит биттәренә яҙалар. Ни өсөн был хәл һаман да шулай дауам итә һуң? Сөнки намыҫһыҙ чиновниктар тейешле яза алмай. Шау-шыу ҡуба, халыҡ, ваҡытлы матбуғат ҡуҙғырып ала ла тыма, ә ошондай етешһеҙлеккә юл ҡуйыусы үҙ ултырғысында ултыра бирә. Шуға күрә ошо өлкәгә иғтибарҙы арттырыу көнүҙәк мөһим мәсьәләләрҙең береһе.

Күтәрергә теләгән икенсе мәсьәлә - республикалағы ял йорттары, шифаханалар. Бюджет өлкәһендә эшләгән кеше уларға яҡын да бара алмай, сөнки хаҡтары үтә лә ҡыйбат. Үҙебеҙҙең шифаханала 3-4 көн булғансы, сит илдә шул уҡ аҡсаға 10 көн йөрөп киләм, тиҙәр күптәр. Ә шул уҡ сит илдә ҡалдырған әллә күпме сумма аҡсаны үҙебеҙҙә тотонһалар, урындағы бюджетҡа ла файҙа булыр ине, сөнки шифаханаға барыусылар барыбер урындағы тауарҙы һатып ала һәм эшҡыуарға килем килтерә. Ә ул, үҙ сиратында, республика бюджетына һалымдарын түләй.

Элегерәк һәр ойошманың тиерлек профсоюздары булды һәм теләгән берәү унын аша путевка алып, илдең төрлө шифаханаһында ял итте. Хәҙер иһә профсоюздар ҙа юҡҡа сығып бөтөп бара, булғандары ла йыйылған аҡсаһын ҙур байрамдарҙа кәнфит таратыуға тотона. Балаларҙы ла шифаханаларға ебәреү ауырлашты. Табипта әллә күпме сират көтөргә тура килә. Ул сират еткәнсе, баланың йәше үтә. Яңыраҡ һаулыҡ һаҡлау өлкәһендә булып алған үҙгәртеүҙәр үҙ һөҙөмтәһен бирер, тип уйлайым.

Әйтәһе һүҙҙәр ҙә, еткерәһе теләктәр ҙә күп. Гәзит аша ла, социаль селтәрҙәр ярҙамында ла халыҡ үҙенең теләктәрен еткереп тора. Бары тик уларҙың һүҙенә ҡолаҡ һалып, улар менән берҙәм булып эшләргә генә ҡала республика етәкселегенә.

**Фәрзәнә СӨЛӘЙМӘНОВА.**

ЙӘН ОРАНЫ

# САҢ ҠАҒЫР ВАҠЫТ:

## ағастар ҡырыла, илай

**Борон-борондан кеше тәбиғәт менән бәйләнешкә инеп, матди һәм рухи мәҙәниәт тыуҙырған. Үкенескә күрә, кешелек менән тәбиғәт араһындағы бәйләнеш борсоулы, киҫкен төҫ алды. Экология иң оло проблемаларҙың береһенә әйләнде. Халыҡты туйҙырып, йылытып, дауалап ҡына ҡалмаған, рухи аҙыҡ та биргән урман кәмей, ауылдан "каса" бара. Тау битендәге ағастар һирәгәйеп, бөтөү өҫтөндә. Бер нисә йыл элек ауылға терәлеп торған Ҡыйрат тауы башындағы яңғыҙ ҡарт ҡайын ҡолағас, "Ул беҙҙең ағас ине", тип иланы ауыл инәйҙәре.**



(Дауамы 2-3-сө биттәрҙә).

12+

✓ *"Ҡарағай - ирҙәр ағасы, уҫаҡ менән ҡайын - ҡатын-ҡыҙ ағасы. Ағасты күп ҡырҡырға ярамай, ҡоһоро төшә. Һәр ағастың эйәһе, йәне була. Улар бит Хоҙайға тәсбих әйтеп ултыралар", - тип һөйләй ине Ғазина Хөмәйрә инәй.*



УҠЫУСЫ ҺҮҘЕ

**Баҫма матбуғат ваҡыты үтте, ә мәғлүмәти сығанаҡ хәҙер интернет "ҡулына" күсте, тиҙәр. Ысынлап та, интернет киңлектәрендә секунд һайын яңыртылып торған хәбәрҙәр үҙ актуаллеген юғалтмай ғына килеп етә. Шулай уҡ, теләйһең икән - тарихҡа сәйәхәт ҡыл, күңелеңә оҡшаған музыка тыңла, хатта йәшәргә, һөйләргә, һөйөргә һәм байырға ла өйрәтә интернет. Ләкин ошоно уҡ гәзит биттәрендә лә табырға мөмкин. Бигерәк тә "Киске Өфө"нө мин мәғлүмәти сығанаҡ итеп түгел, ә тәрән йөкмәткеле гәзит итеп беләм.**

# ЫҢҒАЙҒА КӨЙЛӘҮСЕ ЛӘ

Интернеттағы һәр яҙма бәләкәй генә ҡулсатырҙарға төрөнөп ултырған һәм бер өрөп ебәреүҙән таралып юҡҡа сыҡҡан бәпембәгә оҡшаған, сөнки әле генә уҡып ултырған мәғлүмәтеңдә күҙ асып йомғансы юғалтырға мөмкинһең. Унан һуң, бар эҙлә, тик табырмын тимә. Ә гәзиткә аҡҡа ҡара менән баҫылған мәҡәләнең, мәғлүмәттең һәр ваҡыт ҡул аҫтында булыуы күпкә отошло. "Киске Өфө"нө был йәһәттән айырыуса билдәләгем килә, сөнки унда баҫылғандар бер ҡасан да үҙ актуаллеген юғалтмай.

Шулай уҡ баҫма матбуғаттың тағы бер яҡшы яғы - уның биттәрендә әллә ҡайҙа йәшәп ятҡан, тормоштары ла беҙҙекенә бөтөнләй оҡшамаған "йондоҙҙар" тураһында түгел, ә яныбыҙҙа көн иткән кешеләр тураһында уҡырға була. Яратҡан баҫмамда уңышлы эшмәкәрлек алып барыусы эшҡыуарҙар, ҡул оҫталары, төрлө һөнәр эйәләре тураһында уҡыйым да, была бит ул үҙебеҙҙең Башҡортостан халҡы, тип ҡыуанам. Һәр кеше йылы һүҙгә мохтаж һәм һәр кемден дә эшен күрә белеп уны аҙ ғенә күтәрһәң дә, ул ҡанатланып китә, үҙендә тау аҡтарырҙай көс таба. "Киске Өфө" геройҙары ошо яҡтан бәхетле, гәзит ярҙамы менән уларҙың эше баһаланып.

Баҫманы почта йәшнигенән алғас та тирә-йүнгә таралып киткән яңы гәзит еҫен яратам. Бер-береһенә йәбешеп тиерлек торған гәзит биттәрен асып уҡыу - үҙе бер ләззәт бит ул. Яратҡан рубрикаларыңа, мәҡәләләргә тиҙ генә күҙ йүгертеп сығаһың да, һуңынан эштәрҙе тамамлағас, яйлап ҡына уҡыйһың. Был тойғоно интернет бер нисек тә бирә алмай. Ә "Киске Өфө"нө ҡулға алыу үҙе бер байрам кеүек. Бушлыҡ юҡ был гәзиттә. Уның һәр бите, һәр мәҡәләһе уҡыусыға тәьҫир итә, уны уйландыра, шатландыра. Өфө йәки республика өсөн мөһим мәғлүмәттәр ҙә тулы, епкә теҙелгән мәрйен кеүек иплe һәм йөкмәткеле.

Ниндәйҙер айырым рубриканы ғына яратам, тип әйтә алмайым, сөнки уларҙың һәр ҡайһыһы уҡымлы. Шуға күрә аҙна буйы ҡулымдан төшөрмәй уҡыйым. Өйҙәгеләр ҙә сиратлап, ҡулдан-ҡулға йөрөтөп уҡып сығалар. 16 биттән гәзит сығарыу ниндәй ҙур көс талап иткәнен беҙ, гәзит уҡыусылар, аңлап та етмәйбеҙҙер, ләкин баҫма хеҙмәткәрҙәренә еңелдән түгел икәнен тойомлайбыҙ. Артабан да беҙҙе ҡыуандырып, "Киске Өфө"беҙҙән айырмай ижад итегеҙ. Ул беҙгә кәңәшсе лә, ыңғайға көйләүсе лә, киләсәккә ышаныс уятыусы сығанаҡ та.

**Сәжидә ЗАРИПОВА.**

ЙӘН ОРАНЫ

# САҢ ҠАҒЫР ВАҠЫТ:

## ағастар ҡырыла, илай



**(Башы 1-се биттә).**

- Ҡарағай - ирҙәр ағасы, уҫаҡ менән ҡайын - ҡатын-ҡыҙ ағасы. Ағасты күп ҡырҡырға ярамай, ҡоһоро төшә. Һәр ағастың эйәһе, йәне була. Улар бит Хоҙайға тәсбих әйтеп ултыралар, - тип һөйләй ине 1913 йылда тыуған Ғазина Хөмәйрә инәй. - Шул арҡала донъяға ауырлыҡ килә. Аңһыҙ үлем күбәйҙе. Яман сирҙән, йөрәктән, эскелектән ирҙәр күп үлә. Беҙ тәбиғәт менән бәйле, кеше аңламай бит шуны...

- 1941 йылға ҡаршы ҡыш ҡар күп итеп яуып, ҡарағай ботаҡтары һынды. Ирҙәргә ауырлыҡ килә, һуғыш башланыр инде, тип хәүефләнеп һөйләнделәр, - тип хәтерләй ине әсәйем Асия Зекриә ҡыҙы.

Тәбиғәткә ҡарата ата-бабаларыбыҙҙа булған, кешене тирә-яҡ мөхиткә бәйләгән фәлсәфәүи аң-аҡыл юғалыу менән һаҡсыл ҡараш та юҡҡа сыға.

Республикала ғына түгел, бөтә донъяла дан тотҡан Бөрйән тәбиғәтенең бөгөнгө торошо күптәрҙе битараф ҡалдырмайҙыр, моғайын. Бынан 50 йылдар элекке тәбиғәт менән бөгөнгө тәбиғәт араһында ниндәй үҙгәрештәр бар? Ошо һорау менән Иҫке Монасип ауылының оло быуын кешеләренә мөрәжәғәт иттем.

- Айырма ер менән күк араһы кеүек, - тине әңгәмәсем Булат Әмирханов. - Йыраҡҡа бармай, Иҙел буйына ғына төшәйек. Беҙ бала саҡта, һыу ингәндә, сабаҡ, ҡыҙылғанат, алабуға балыҡтары беҙҙең тирәлә өйрөлөп уйнап йөрөй инеләр. Йылға шул тиклем таҙа ине, кеше йәйен-ҡышын һыуыҙ Иҙелдән ташып эсте. Яҙғыһын, Иҙел ташҡанда, һыуҙы тау йылғаһынан алдыҡ. Йылға буйында ҡырсында ҡара бөрлөгән күп булды. Томбойоҡтар сәскә атып ултырҙы. Таллыҡ, ерек әрәмәлектәре күп булды. Кеше шул талдан нурҙа үрер ине. Хәҙер бер нәмә юҡ. Һыуҙа ҡабырсаҡ, ҡыҫалалар тулып ятты. Юҡ булдылар. Бәрҙе күп булды, ул да юҡ хәлгә ҡалып бара. Ә бәрҙе бит таҙа һыуҙы ғына ярата. Йылға буйында сүп-сар булманы. Мин хәҙер урманға сыҡмаҫҡа тырышам. Сыҡһам, эс боша, йөрәк һыҙлай. Ауыл ситендә әрәмәлектәр ҡороп бөтөп бара. Аяҡ аҫты ҡый. Был күренеш күп ауылдарға хас. Хәҙер йәштәргә һөйләһәң, ышанмаҫтар. Элекке тәбиғәтте улар күҙ алдына ла килтерә алмай. Ауыл эргәһендәге Тәпәнәк башында, арҡала, илан ситендәге ағас баштарында ҡорҙар өйөрҙәре менән ултырыр ине. Тау башындағы элек бәрҙе балыҡтары йөҙгән бәләкәй урман йылғалары ҡороп бөтөп бара. Хәҙер бит кеше лә үҙгәрҙе. Кеше элек ябай, асыҡ, ҡунаҡсыл булды. Ҡырға сыҡһа, өйөнә йоҙаҡ элмәне. Хәҙер магазинға барһа ла ҡапҡаһына йоҙаҡ элеп сыға.

-Тәбиғәтте хәҙер бер кем йәлләмәй. Тәбиғәтте мыҫҡыл итәләр. Бергәләп күтәрелеп һаҡлағанда ғына, бәлки, тәбиғәт элекке хәленә ҡайтыр, - тип, һүҙҙе 83 йәшлек Нәҙир Мөхәмәтов дауам итә: - Элекке тәбиғәт юҡ инде хәҙер. Емеш-еләк емерелеп үҫте. Әҙәм урман ризығы менән көн итте, ҡыш сыҡты. Сейәне ирителгән һары майға ҡушып һаҡлап ашанылар. Урман ҡарағатын Бохмаштан биҙрәләп алып ҡайттылар. Еләк менән ҡарағатты киптереп, ҡаҡ эшләнеләр. Яҙ йыуа, ҡуҙғалаҡ, бәпкә, ҡаҡы, ҡымыҙлыҡ, ҡуян тубығы, һарына йыйып ашаныҡ. Хәҙер улар ҙа кәмене. Әллә ҡайҙа булды. Ҡыр кәзәләре - илектәр тау биттәрендә көтөүе менән йөрөнөләр. Болан күп булды. Бабайҙар сығыр менән йүкә арҡан ишеп, шуның менән боланға тоҙаҡ ҡороп тотоп, кешегә итен бүлеп бирерҙәр ине. Борон бит тимер сыбыҡ булманы. Сел менән ҡор тик ауылға ғына килеп инмәне. Балыҡ өйөрө менән йөҙөп йөрөнө. Ау менән тотоп, районға тапшыра торған инеләр. Урманды самаһыҙ күп ҡыралар бөгөн. Исмаһам, ағасты йәлләнендәр ине. Урман бөтһә, кеше лә ҡырылып бөтә бит...

- Элек боландарҙың миграция маршруты ауыл эргәһенән үтте. Көтөүе менән күренеп йөрөнөләр, - тип һүҙен башланы Зәки Вәлиев. - Боландар үтһә, көн боҙолор ине, кеше шуны белеп бөттө. Әллә ҡайҙан килтереп, элек булмаған ҡабан сускаларын үрсеттеләр. Улар һарына кеүек тамырҙарҙы үҫемлектәрҙе бөтөрҙөләр. Сабынлыҡтарҙы һөрөп тәләфләйҙәр. Бер яҡтан, файҙа булһа, икенсе яҡтан, ҡаҙа. Үҙән йылғаһы буйлап һыу баштарындағы ҡуйы урмандарҙы бер нәмәһен ҡалдырмай, тотош ҡырҡып, ҡырып бөтөрөп баралар. Делянкаларҙа мәхшәр. Ағас ултыртҡан кеше юҡ. Ағас ташыған ҡеүәтле машиналар урман юлдарын боҙоп бөттө, хәҙер трактор менән йөрөүе лә хәүефле. Үҙебеҙ ҙә урманды рациональ файҙалана белмәйбеҙ. Ҡайһы ваҡыт утынға турарлыҡ таҡта, ағастарын да ҡый түгеү урынына алып барып түгәләр. Нефть бит ерҙең елек майы. Уны һурып бөтөрһәләр, климатҡа, тәбиғәткә зыяны теймәй ҡалмайҙыр бит инде. Тәбиғәткә ҡараш юғарынан, власть тарафтарынан үҙгәртелергә тейеш.

- Шул тиклем һағынам бала саҡтағы тәбиғәтте, - ти Рәхимә Муллағолова. - Айырма иҫ киткес. Яр ҡарлуғастары күп булды. Беҙ барып ҡарап, балалары сыҡҡанын көтөп йөрөй торғайныҡ. Хәҙер юҡ булдылар. Иҙел элек мул һыулы ине, хәҙер ныҡ һайыҡты. Ул балыҡтың күплеге! Бала саҡта хатта итәк менән һөҙөп уйнай инек, аҙаҡ кире ебәрәбеҙ. Нәйгәште йылғаһында кеше элек балыҡ тотто, хәҙер эҫе көндәр башланһа, ҡорой ҙа ҡуя. Үлек арҡаһында беҙҙең сабынлыҡта матур шишмә бар ине, ул да ҡороно. Кепес тауы башындағы ағастар бөттө. Бөтәһе лә бөтөүгә бара...

### ӘЙ, УРМАН, УРМАН...

*Табут сығамы ни урмандарҙан,*
*Камаз-камаз ағас теейәгәндәр.*
*Иң-иң затлы, иң һиммәтен генә!*
*Ҡоро-һарыһына теймәгәндәр.*

*Белә улар, ҡайһыларын һайлап,*
*Ҡайһыларын киҫеп ауҙарырға.*
*Ағастарға илдән айырылып,*
*Алыҫ тарафтарға, ау, барырға.*

*Урмандарға инһәң, һыҙғырып ин,*
*Тип йырларлыҡ йырҙар ҡала микән?*
*Юғалтыуҙар Урал тауҙарына*
*Юлаҡ-юлаҡ һырҙар һала микән?*

*Зар илайҙыр киткән ҡарағайҙар,*
*Зар илайҙыр ҡайын-имәндәре.*
*Ҡара шомдо шунда һиҙә микән,*
*Бөрйән урманына ингәндәре?*

*Тәбиғәттең үсе яман булыр:*
*Таштар һөйләр, йылғалары ташыр,*
*(Әҙәмдәре тапмаҫ урын ҡасыр),*
*Ағастары терелеп атлап китер...*
*... Ҡарт ҡарағай эйелеп шыбырланы:*
*Эй, кешелек, шул көн етер... етер.*

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓ Федерация Советында Башҡортостан автономияһының 100 йыллығына бағышланған сара - Башҡортостан көндәре уҙғарылды. Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров, беҙҙең депутаттар ҡатнашлығында Федерация Советының алты комитетының киңәйтелгән ултырыштары булды. "Профилле комитеттарҙың ҡарарҙары Федерация Советының "Башҡортостандың социаль-иҡтисади үҫешенә дәүләт ярҙамы тураһында"ғы ҡарарына нигеҙ булырға тейеш", - тине Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы рәйесе Константин Толкачев.

✓ Мәскәүҙә Федерация Советында Башҡортостан көндәрен уҙғарыу барышында Беренсе совет автономияһының ойошторолоуын сағылдырыусы, республиканың социаль-иҡтисади ҡеүәте менән таныштырыусы күргәҙмәне Рәсәй Федераль Йыйылышының Федерация Советы рәйесе Валентина Матвиенко һәм Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров ҡарап сыҡты.

✓ "Медиалогия" мәғлүмәттәре буйынса, Башҡортостан етәксеһе Радий Хәбиров, уҙған айҙың күрһәткесен бер позицияға яҡшыртып, губернаторҙарҙың февраль рейтингында 4-се урынды алды. Беренсе урында Мәскәү мэры - Сергей Собянин, икенсеһе - Санкт-Петербург губернаторы Александр Беглов, өсөнсөһө - Мәскәү өлкәһе губернаторы Андрей Воробьев.

✓ Радий Хәбиров Рәсәйҙә бөтә социаль селтәрҙәре рәсми раҫланған берҙән-бер губернатор булды. Барлыҡ ҙур социаль селтәрҙәр: "Фейсбук", "Бәйләнештә", "Инстаграм", "Класташтар" Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбировтың аккаунттарын рәсми раҫланы. Уның исеме янында сәйәсмәндең ысын сәхифәһе икәнен раҫлаған махсус билдә ҡуйылды.

✓ Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров Чехия делегацияһы менән осрашты. Делегацияны илдең Рәсәйҙәге Ғәҙәттән тыш һәм Тулы хоҡуҡлы илсеһе Витезслав Пивонька етәкләй. Яҡтар иҡтисадта һәм социаль өлкәлә артабан хеҙмәттәшлек итеү йүнәлештәрен тикшерҙе. Һүҙ Башҡортостандың Чехияға оҙатҡан сәнәғәт тауарҙары исемлеген киңәйтеү хаҡында барҙы. Үҙ сиратында, Чехия Республикаһы Башҡортостанда ауыл хужалығы технологияларын һәм аҙыҡ-түлек сәнәғәтен үҫтерергә әҙер.

✓ *Был минең беренсе һәм һуңғы һунарым булды. Шунан, ҡоштар ҡайҙа булып бөттө, тип күмәкләп аптырайбыҙ... Ҡайһы берәүҙәр баҫып ултырған инә һуйырҙы ла атып алалар бит. Тамаҡтары туймы шуның менән?*



Ривал Баймырҙин һөйләгәндәрҙән:

- Тәбиғәт - йөрәктә әрнетерлек проблема. Хәҙер бит капитализм. Беренсе урында аҡса. Урманды аҡса табыу сараһы итеп алдылар. Элек кеше нәфсе, аҡса өсөн урманды тәләфләмәне. Бер ағас ҡырҡһа, унды ултыртты. Беҙ бала саҡта урман кеше өсөн йәшәү мәғәнәһе булды. Атай лесник ине. Рафаэль ҡусты менән икебеҙҙе арбаһына тейәп, ағас ултыртырға алып йөрөнө. Ағасты бала кеүек тәрбиәләнек. Йәй булһа, тәпке тотоп, үҫенте төпһәләрен утаныҡ. Атай урманды яратырға, уға һаҡсыл, тере йәнгә ҡараған кеүек ҡарарға өйрәтте. Утын әҙерләгәндә арҡыры бысҡы менән ағас йығабыҙ. "Дружба" булманы. Ике ярыш ағас ултырһа, береһен ҡалдырта ине. Хәҙер урман буйынса дәүләт сәйәсәте дөрөҫ түгел. Урманды ҡырҡыуҙы туҡтатырға кәрәк. Үлән бер йыл үҫә, ағас йөҙ йыл үҫә. Киләсәк быуынға нимә ҡала? Тәбиғәт бит кеше организмы кеүек. Бер ерен ҡырҡһаң, икенсе ерендә ауырыу башлана. Беҙ катастрофа алдында торабыҙ.

Арыҫлан Хәлфетдинов һөйләгәндәрҙән:

- Урман ер аҫты һыуҙарын һаҡлай. Урманды ҡырҡыу арҡаһында күп йылғалар ҡороно. Үҙебеҙгә лә шишмәләргә һаҡсыл ҡараштa булырға кәрәк. Уйламай, теләһә ҡайҙа кеше күрмәгән урынға үлгән мал емтектәрен ташлайҙар. Дүрт йыл элек Мәсәт янындағы бер шишмә һыуына химик анализ яһағас, мәйет таяҡсалары табылды. Ул һыуҙы эсерго ярамай. Һөйләй башлаһаң, һүҙ күп инде.

Бынан 15 йылдар элек бер иптәштең һөйләгәндәре йыш иҫкә төшә: "Ауылда йәшәп тә ғүмерҙә һунарға сыҡҡаным булманы. Бер яҙ көнө, алағар мәлендә, исмаһам, ғүмеремдә бер ҡош булһа ла атып ҡарайым, тип, таныш һунарсынан бер көнгә мылтыҡ һорап алып, һуйырға сыктым. Үҙемден сабынлыҡта һуйырҙар күренә торғайны, таныш урын, тип төндә шунда юл тоттом. Бара торғас, таң атыр-атмаҫтан, урманда канонада башланды. Таңда атыу тауыштары шаҙаулы таузан тауға әллә ҡайҙа китә. Әйтерһең дә, һуғыш бара. Бара торғас, эс боша башланы. "Асмы һуң улар шул тиклем ҡошто ҡырырға? Әллә минең кеүек ҡыҙыҡ - азарт өсөн сыҡҡандармы?" - тип уйлайым. Сабынлыҡҡа барып етеп, ялансыҡ уртаһындағы ҡарағайға терәлеп ултырҙым. Атыу тауыштары тынмай. Ҡапыл яҡында ғына, әрәмә артында, берәү атып ебәргәнгә һиҫкәнеп киттем. Һуйырға эләктәре алманы, яҙа атты. Һуйыры әрәмәлек аша осоп, минең баш осонан үтеп китте. "Быныһы, исмаһам, үлемдән ҡалды", тип мылтығымды тотоп ҡыуанып ҡарап ҡалдым. Был минең беренсе һәм һуңғы һунарым булды. Шунан, ҡоштар ҡайҙа булып бөттө, тип күмәклэп аптырайбыҙ... Ҡайһы берәүҙәр баҫып ултырған инә һуйырҙы ла атып алалар бит. Тамаҡтары туймы шуның менән? Нисек гонаһтан ҡурҡмайҙар?.."

Эйе, беҙҙең быуынға ла элекке саф, тейелмәгән тәбиғәт мөйөштәрен күреп ҡалыу бәхете тәтене. 1974 йылда, малай саҡта, звено менән Үҙән буйында ҡыуыштар ҡороп колхозға бесән эшләнек. Һөйләп килештерә алмаҫлыҡ хозур тәбиғәт унда, күрергә кәрәк. Иртә таң менән ҡоштар һайрауына уянаһың. Үҙе бер сихри симфония. Йылғаның ике ягында текә тауҙар. Тау битендә эре шартый еләктәре бешә, саҡ ҡына өҫтәрәк сейә ҡыуаҡтары. Төньяҡ тау битләүендә ҡарағас, ҡарағай араһында мүктә көртмәлә түшәлеп ята. Әрәмәлектә муйыл, ҡарағат, үрҙәрәк ҡурай еләктәре бешә. Үҙән буйында, һаҡ ҡына барып ҡарағанда, ярға яҡын ҡамыш араһында ҡорбанын һағалап торған эре суртандар күренгеләй. Яҡындараҡ балыҡ күренһә, уҡ кеүек атылып сығып китәләр. Бәләкәйерәк суртан-сөрәгәйҙәр нишләптер өҫкә ҡарап, вертикаль торалар, ҡамыштан ҡапыл ғына айырып та булмай. Күҙгә күренеп һуҙылып, шөшкө йөҙөп үтеп китә. Ҡайһы ваҡыт шөшкө ауыҙын тура итеп өҫкә күтәреп, ҡамыш тешләп йөҙә. Туҙбаш йыландар ваҡ балыҡҡа һунар итә. Һирәкләп, һыуҙы сыйып, "беҙгә теймәгеҙ" тигән кеүек, ауыр һуна өйрәктәре эргәнән шәп итеп осоп үтәләр. Һағынып иҫкә алырға ғына ҡалды...

Юҡҡа ғына боронғо гәрәп сәйәхәтселәре һыуһыҙ сүллек, далалар аша үтеп, Көньяҡ Уралға ошо беҙҙең ата-бабаларыбыҙ йәшәгән төбәккә еткәс: "Беҙ ожмахҡа килеп еттек микән?" - тип аптырауға ҡалмағандарҙыр.

Беҙ һаҡламаһаҡ, тәбиғәтебеҙҙе кем һаҡлар?..

**Зәһир ДӘҮЛӘТБИРҘИН.**
**Бөрйән районы.**

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*

# БАЛА ЛӨҒӘТЕНДӘ НИ САҒЫЛА?

**Мунсаға таҙарынырға йөрөһә лә ҡатын-ҡыҙ, ҡайһы берәүҙәр эстәгеһен таҙарта алмай барыбер. Ғәҙәттә, улар мунсаға гәйбәт токсаһын үҙе менән алып бара. Ғәйбәт уғына, әлбиттә, таныш түгелдәр араһында барыһына ла таныш булған етәкселәр дусар була...**

Мунсала врачҡа әүерелә күптәр. Кем ниндәй сирҙән ниндәй дауа эрҙамында һауыҡҡан - был тағы бер яраткан темаһы ҡатын-ҡыҙҙарҙың. Ул көнәштәрҙең файҙалыһы ла, файҙалы булмағаны ла була.

Үҙ ғаиләһендәге күңелһеҙлектәр менән дә ихлас уртаҡлаша ҡайһы берәүҙәр. Ире эсә, улы эсә, балалары аҡсаһын тартып ала, балалары уны хатта дауаханаға ла алып бармай, балалары фатир бүлешә...

Өлкән ҡатын-ҡыҙҙар шулай гәпләшә мунсала. Ә һуңғы барғанда ҡыҙыныу бүлмәһендә ике ҡыҙсыҡтың һөйләшеуенә ҡолаҡ һалып, уларҙың ололарҙы ҡабатлауына аптыраным. Тәүҙә йәштәрен асыҡланылар: береһенә 10, икенсеһенә 11 йәш булып сыҡты.

- Һин ҡалай ябыҡҡыһың... - тине тулыраҡ көүҙәлеһе.

- Ә һин ҡалай һимеҙһең, - булды яуап.

- Ә мин ауырыйым. Дарыуҙар эсәм, - тине тулы көүҙәлеһе.

- Мин дә ауырыйым. Миндә - аллергия. Шәкәрле ризыҡтарҙы бөтөнләй ашай алмайым, - тине ябығы.

- Мин дә ашай алмайым. Шәкәр диабеты тигән сир миндә...

- Яҙ етһә, мин урамға ла сыға алмайым, йә тирәк мамығынан, йә башка сәскәләрҙән йүткерә башлайым. Хәҙер өйрәндем инде...

- Киләсәктә мине инсулинға ултырталар, тине врач, әлегә таблеткалар ғына ашайым...

Бары тик ауырыу тураһында бик оҙаҡ һөйләште ҡыҙсыҡтар. "О, замана!" тип ҡысҡырғы килде шунда. Хәйер, заман ғына ғәйеплеме икән былдай хәлдәргә? Беҙ ҙә бала саҡта ауырымай торманыҡ бит. Ләкин ғаиләлә ауырыу тураһында һөйләшмәнек, балалар лөғәтендә лә ауырыу тураһындағы хәбәрҙәр бөтөнләй булмай торғайны, тип иҫләйем. Нисек кенә тимә, барыһы ла ғаиләләге тәрбиәгә барып тоташа шул. Балалар лөғәте ололар телендәген, ололар ҡылығындағын сағылдыра...

**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

*БЫНАҒАЙЫШ!*

**Башстат, демографик күрһәткестәргә йомғаҡ яһап, Башҡортостанда 2018 йыл тыуым буйынса "малайҙар уңышы" йылы булды тип һөйөнсөләне: барлығы 22 мең 807 ҡыҙ бала һәм 24 мең 264 ир бала донъяға килгән. Хәйер, был бер былтырғы йыл өсөн генә хас түгел: ҡағиҙә буларaҡ, ир балалар күберәк тыуа-тыуыуын да, ләкин республикабыҙҙа гүзәл зат вәкилдәре көслө заттарға ҡарағанда күберәк килә лә сыға...**

# БЕР БАБАЙҒА - ИКЕ ӘБЕЙ,

## ике әбейгә - бер бабай...

Бөгөн Рәсәйҙә 146 миллиондан ашыу кеше йәшәһә, шуларҙың 78 миллиондан ашыуы - ҡатын-ҡыҙ һәм 68 миллиондан ашыуы - ир-егет: айырма 10 миллионға барып баҫа! Өлкәнерәк быуын хәтерләйҙер: 1960-1970 йылдарҙа тансаға төшә алмай ҡарап торған ишһеҙ ҡыҙҙар хаҡында "ун ҡыҙға - туғыҙ егет" тип йырлап та йөрөгәйнеләр хатта. Нисбәт һис үҙгәрмәй, киреһенсә, ул ҡатын-ҡыҙ файҙаһына арта ғына бара. Был айырыуса йәш төркөмдәренә бүлеп ҡарағанда асыҡ күренә. Мәҫәлән, 4 йәшкә тиклемгеләр араһында 1 мең малайға - 947 ҡыҙ бала, 5 - 9 йәшлектәрҙә 1 меңгә - 953. Был нисбәт шулай 19 йәшкә тиклем һаҡлана, ләкин 35 йәшкә етә килә гүзәл заттар көслөләрҙе ҡыуып етә һәм үтеп китә башлай. Ахыр сиктә, тағы бер 35 йылдан, йәғни 70 йәштәгеләр араһында инде, ҡатындар һаны ирҙәргә ҡарағанда 2,3 тапҡырғаса артып китә. Тимәк, шаяртыу ҡатыш әйтһән, бер бабайға - ике ярым әбей, тигән һүҙ. Бындай тигеҙһеҙ демографик күренештең сәбәптәре, әлбиттә, илдәге социаль-иҡтисади проблемаларға барып тоташа. Сағыштырыу өсөн донъя кимәлен йә булмаһа Евросоюз илдәрен айырым алып ҡараһаң, ирҙәр - ҡатындар нисбәте күп йылдар тигеҙ кимәлдә һаҡланып килеүен күрергә була. Рәсәйҙәге тигеҙһеҙлектең төп сәбәптәренең береһе тип ғалимдар ир-егеттәр араһында ваҡытһыҙ үлем кимәленең юғары булыуын атай: үлтереш, үҙ-үҙҙәренә ҡул һалыу, юл-транспорт фажиғәләре, һыуға батыу, сифатһыҙ алкоголле эсемлектәр менән ағыуланыу һ.б. Унан тағы ауыр, хәүефле өлкәләрҙә күпселек ир-егеттәрҙең эшләүе лә уларҙың һаулығын ала һәм төрлө ауырыуҙарға дусар ителәп, донъянан иртәрәк китеүҙәренә сәбәп була. Рәсәй Демография институты директоры А.Вишневский ҙа шуны уҡ раҫлай. Беҙҙә көслө иҫерткес эсемлектәр етештереү өлөшө бик ҙур һәм уны ҡулланыу даирәһе лә киң таралған. Ә ир-егеттәрҙең күпселегә 100 грамм эсеп кенә туҡтамай, был бары старт алыуға сәбәп кенә. Ошо йәһәттән ҡайһы бер "виртуоздарҙың" нисек итеп "тамаҡҡа ҡойоуҙарын" бер тапҡыр булһа ла күҙәткәнегеҙ барҙыр: баш көүҙәгә перпендикуляр рәүештә артҡа соңҡайтыла (нисек муйыны кимәлйемәй!) һәм ыңғайы бер ҡулдағы стакан ауыҙға түңкәрелә (нисек тамсы ла түгелмәй!) Араҡыны күп миҡдарҙа ҡулланыусыларҙың йөрәк мускулатураһы быңдай көсөргәнеште күтәрә алмай, теткеләнеп бөтә икән. Ҡасандыр Финляндия ла ана шулай эскеселәре менән яфаланған, ләкин улар был проблеманан нисектер ҡотола алған, тиҙәр. Шулай уҡ Польша ла. Улар хәҙер һыра менән шарапҡа күскәндәр, күптәре бөтөнләй эсмәй ҙә икән. Беҙҙә хәл башҡараҡ шул: ҡаҙна тоғо һәлмәклеге алкоголь һатыуға бәйле, быңдай еңел табышты ҡулдан ысҡындырырмы дәүләт машинаһы? Ир баштары китә икән (әрәмме, хәрәмме) - һәр замандың үҙ яуы, үҙ ҡорбандары. Тик үткән быуаттарҙа шәһит киткәндәрҙең рухтары рәнйейҙер: ил улдары, ир аҫылдары улар ине бит... Ә бөгөнгө быуын нимә хаҡына ғүмерен ҡорбан итә?

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Ағымдағы йылда Башҡортостанда 241,9 саҡрым төбәк һәм муниципаль-ара юлдарҙы ремонтлау күҙаллана. Төбәк трассалары һәм ҡала урамдарынан тыш, республиканың Юл фондынан аҡса бүленгән участкалар ҙа тәҙәкләндереләсәк. "Бюджет ҡануниәтенә ярашлы, һәр муниципалитеттың муниципаль юл фонды бар, уның иҫәбенә шулай уҡ урындағы әһәмиәттәге автомобиль юлдарын ремонтлау эштәре башҡарыла", - тип аңлаттылар республиканың Транспорт һәм юл хужалығы буйынса дәүләт комитетында.

✓ Мәскәүҙә Башҡортостан "Интурмаркет" халыҡ-ара күргәҙмәһендә төбәктең туризм мөмкинлектәре менән таныштырҙылар. Халыҡ-ара күргәҙмәнең тәүге көнөндә Милли туристик брендтар рейтингы-2018 еңеүселәрен бүләкләнеләр. Башҡорт балы, Шүлгәнташ ҡурсаулығы һәм "Терра Башҡортостан" брендьı дипломдар алды.

✓ Сибай хакимиәте башлығы Рөстәм Афзалов Сибай карьерына һыу ағыҙыу эштәренең 82 процентҡа тамамланыуы тураһында хәбәр итте. "Һыу тултырыу 549 метрҙан башланды - был беҙҙә ноль нөктәһе тип һанала. Бөгөн 483 метрға еткән, йәғни 64 метр тултырылған. Был беҙҙең контроль нөктәнән 82 процент тәшкил итә. Контроль нөктә - 469-сы горизонт", - тип билдәләне Сибай башлығы.

✓ 2018 йылда Башҡортостандың медицина ойошмаларына 10 мең 113 кеше талпан ҡаҙалыуға зарланып мөрәжәғәт иткән. Башҡортостандың Һаулыҡ һаҡлау министрлығы талпан энцефалитына ҡаршы 37 мең 410 вакцина һатып ала. Тендерҙың документтары дәүләт һатып алыуҙары сайтында баҫылған. Подрядсыны 1 апрелдә аукционда һайлап алалар. Тәьмин итеү ваҡыты - килешеүгә ҡул ҡуйылғандан алып 30 көн.

✓ Башҡортостанда быйыл яҙғы баҫыу эштәрен үткәреүгә 11,2 миллиард һум аҡса кәрәк, һәм улар уҙған йылға ҡарағанда 28 процентҡа ҡимәтҡә төшә. Был ягыулыҡ-майлау материалдарына, запас частарға, минераль ашламаларға хаҡтарҙың артыуына бәйле. Яҙғы сәсеү быЛтырғы кимәлдә планлаштырыла - 2,037 мең гектар. Сәсеүҙе 20 апрелдән башларға һәм яҙғы баҫыу эштәрен 12 июнгә тамамларға ниәтләйҙәр.

✓ *"Беҙ Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбировтың 2020 йылды Халыҡ ижады йылы тип иғлан итеү тураһында тәҡдимен хупланыҡ", - тип билдәләне Валентина Матвиенко.*



ТӨРЛӨҺӨНӘН



# ХАЛЫҠ ИЖАДЫ ЙЫЛЫ

**Ошо көндәрҙә Федерация Советында Башҡортостан Республикаһы көндәре булып үтте. Фән, мәғариф һәм мәҙәниәт комитетының киңәйтелгән ултырышына килһә йылда республикала VI Бөтә донъя фольклориадаһын үткәреүгә әҙерлек мәсьәләһе сығарылды.**

Башҡортостанда фольклориада уҙғарыу тураһында ҡарар өс йыл элек ҡабул ителде. 2016 йылдың йәйендә Мексикала V Бөтә донъя фольклориадаһында республикабыҙа Бөтә донъя фольклориадаһы флагы тапшырылды. "Башҡортостан Республикаһы - профессиональ һәм яуаплы төбәк. Быйыл ғинуарҙа беҙ CIOFF президенты Филипп Боссан менән бергә республика Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров менән осраштыҡ һәм Башҡортостанда Фольклориаданың юғары кимәлдә үтерене шикләнмәйбеҙ", - тип ышана Рәсәй дәүләт халыҡ ижады йорто директоры Тамара Пуртова. "Фольклориада 2020 йылдың 18 июленән 1 августына тиклем ойошторола, - тип хәбәр итте БР Дәүләт Йыйылышы -Ҡоролтай рәйесе Константин Толкачев. - Республикабыҙҙа үтәсәк Бөтә донъя фольклориадаһы тарихта иң күләмлеһе булыр тип әйтергә мөмкин. Биш ҡитғанан вәкилдәр һәм 100-гә яҡын коллектив көтөлә. Бөгөнгә 73 илдән ғаризалар алдыҡ. Уларҙың 53-ө беҙгә килергә теләше ижади коллективтарҙы билдәләгән дә инде".

Әйткәндәй, Рәсәй Федераль Йыйылышының Федерация Советы рәйесе Валентина Матвиенко "Рәсәй субъекты сәғәте" ултырышында Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбировтың тәҡдиме менән 2020 йыл Рәсәйҙә Халыҡ ижады йылы тип иғлан ителде, тип белдерҙе. "Беҙ Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров 2020 йылды Халыҡ ижады йылы тип иғлан итеү тураһында тәҡдимен хупланыҡ. Был 2020 йылда Башҡортостанда үтәсәк Бөтә донъя фольклориадаһы кеүек халыҡ-ара кимәлдәге ҙур сара менән тап килә", - тип билдәләне Валентина Матвиенко.

# ҠАЙҘА СОҠОРҘАР?

**Республика Хөкүмәтендәге сираттағы оператив кәңәшмәлә Радий Хәбиров автомобиль юлдарын ремонтлау сифатын контролдә тотоу өсөн тәғәйенләнгән мобиль ҡушымтаны ғәмәлгә индереү ваҡыты менән ризалашманы. Республика етәксеһе соҡорҙарҙы ямауҙың интерактив картаһы 1 июнгә эшләй башлай тип белдергән Транспорт һәм юл хужалығы буйынса дәүләт комитеты рәйесе Тимур Мөхәмәтйәновты шелтәләне.**

"Беҙҙең төбәктә һауа шарттары бик ҡатмарлы, юлдарыбыҙ сыҙамай, соҡорҙар барлыҡҡа килә, кешеләр имгәнә, машиналарын боҙа. Тап шуның өсөн дә мин картаны көҙ көнө үк индереүегеҙҙе һораным, - тип мөрәжәғәт итте Радий Хәбиров Транспорт һәм юл хужалығы буйынса дәүләт комитеты рәйесенә. - Ошо ваҡыт эсендә яңы айфон уйлап табырға мөмкин ине, ә һеҙ минә мобиль ҡушымта 1 июнгә генә әҙер була тип әйтәһегеҙ. Мин был ваҡытты ҡабул итмәйем. Ҡушымта 1 апрелгә әҙер булырға тейеш, 20 көн ҡалды".

Тимур Мөхәмәтйәнов әйтеүенсә, юлдарҙағы соҡорҙарҙы ремонтлауҙың интерактив картаһы юл хеҙмәттәре оператив эш итһен өсөн төҙөлә. Сайтта теркәлеп, картала насар тороштағы юл участкаһын билдәләргә, фото һәм видео һалырға мөмкин. Юлдарҙы йүнәтеү картаһы республиканың Транспорт һәм юл хужалығы буйынса дәүләт комитеты, Юл хужалығы идарағы һәм "Башкиравтодор" компанияһы сайттарына ҡуйыла. Радий Хәбиров яуаплы ведомстволарға идарасы ойошмаларҙы ла ихаталарҙа юлдарҙы ремонтлау эшенә йәлеп итергә ҡушты.

# КӨТӨП АЛЫНҒАН САРА

**10-12 апрелдә Өфөлә I Бөтә Рәсәй башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары съезы уҙа.**

Республиканың 100 йыллығына бағышланған сара "Торатау" конгресс-холы майҙансығында ойошторола. Съезда Башҡортостан Республикаһындағы һәм Рәсәй Федерацияһы субъекттарындағы дөйөм белем биреү ойошмаларының башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары; туған телдә уҡытылған дәүләт һәм муниципаль дөйөм белем биреү ойошмалары директорҙары; муниципаль районлар һәм ҡала округтары хакимиәттәренең мәғариф идаралығы (бүлектәре) белгестәре һәм методистары; юғары уҡыу йорттары, йәмәғәтселек вәкилдәре ҡатнаша. Съезда ҡатнашыусылар Башҡортостанда, Рәсәй төбәктәрендә башҡорт телен һаҡлау, өйрәнеү һәм үҫтереү мәсьәләләрен тикшерергә; Башҡортостанда Туған телдәрҙе уҡытыу концепцияһына тәҡдимдәр индерергә тейеш. Ойоштороу комитетын вице-премьер Ленара Иванова етәкләй.

# БАШҠОРТТАР ЙЫЙЫЛА

**Өфөлә V Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайына әҙерләнеү һәм уны уҙғарыу буйынса ойоштороу комитеты ултырышы уҙҙы. 28-29 июндә Ҡоролтай Өфөлә һәм Ишембай районында Рәсәйҙең төрлө төбәктәренән һәм сит илдәрҙән башҡорттарҙы йыя. Унда бөтәһе 750 делегат һәм ҡунаҡ ҡатнаша.**

"Был юлы ҡатнашыусылар составы күпкә йәшәрәк. Был үҙенә күрә йәш, заманса, эшлекле ҡоролтай буласаҡ, - тип билдәләне Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе Данир Ғәйнуллин. - Йәштәрҙе әүҙемләштереү маҡсатында май айында Өфөлә халыҡ-ара йәштәр форумы үткәрәбеҙ. Унда 100-ләп кеше ҡатнашырға тейеш. Төрлө илдәрҙә - Швейцарияла, АҠШ-та, Англияла онлайн-майҙансыҡтар ойошторола. Заманса технологиялар ярҙамында тура трансляция алып барырға, ҡоролтай секциялары ултырышын интернеттан күрһәтергә йыйынабыҙ". Әлеге көндә Башҡортостандың 69 ҡала-районында, Рәсәйҙең 36 төбәгендә, 16 сит илдә Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы вәкиллеге һәм филиалы бар. Февраль-апрель айҙарында республика районларында, ҡалаларында, төбәктәрҙә башҡорт ҡоролтайҙарын уҙғарыу ҡаралған. 2010 йылда - 1995 йылда ҡабул ителгән "Башҡорт халҡын тергеҙеү һәм үҫтереү" дәүләт программаһын, ә ике йыл элек "Рәсәй Федерацияһы башҡорттары" (2008-2017 йылдар) дәүләт программаһын тормошҡа ашырыу ваҡыты тамамланды, тип билдәләне Данир Ғәйнуллин. Шуға бәйле, Башҡарма комитет V Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайына 2019-2050 йылдарға иҫәпләнгән "Халыҡ көсөн - халыҡ өсөн!" башҡорт халҡын үҫтереү стратегияһын әҙерләү тәҡдимен индерҙе.

- III Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайында Торатау итәгендә "Ырыуҙар ташы" мемориаль комплексын төҙөү өсөн символик нигеҙ ташы һалынғайны. Ләкин бөгөнгә тиклем проект тормошҡа ашырылмаған, - тип тә хәбәр итте Данир Ғәйнуллин. - Ҡоролтай Радий Хәбировҡа "Торатау" геопаркын булдырыу тураһында Указды ғәмәлгә ашырыу буйынса эштәр планына "Ырыуҙар ташы" мемориаль комплексын төҙөүҙе индереү үтенесе менән хат ебәрҙе. Ойоштороу комитетының "Ырыуҙар ташы" һәйкәлен ҡуйыуҙы тиҙләтеүҙә ярҙам итеүен һорайбыҙ...

# АТТАР ЯРЫША

**24 мартта "Аҡбуҙат" ипподромында Башҡортостандың 100 йыллығын байрам итеү барышында республика муниципаль районларының "Терра Башҡортостан" тип аталған беренсе ат турниры ойошторола.**

Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров халыҡты унда тамашасы булараҡ әүҙем ҡатнашырға саҡырып, былай тине: "Башҡорт өсөн ат -эшсе лә, яугир ҙә, байлыҡ та... Республикала аттарҙы әүәлгесә ныҡ яраталар. Ун меңләгән кеше беҙҙең үҙенсәлекле, сыҙамлы башҡорт тоҡомон үрсетеү менән шөғөлләнә. Был эште мотлаҡ хупларбыҙ һәм үҫтерербеҙ. Беҙҙең турнир рәсми түгел, әлбиттә, аттарыбыҙ ҙа донъя рекордын ҡуймаҫ, ләкин был күренеш һәр ваҡыт мауыҡтырғыс". "Терра Башҡортостан" ат турнирында ҡатнашыу өсөн танылған спортсылар, спорт ветерандары, ижади йәштәр, республиканың йәштәр йәмәғәт ойошмалары йәлеп ителә. Спорт ярыштарының беренсе этабында Дыуан, Әлшәй, Әбйәлил һәм Баймаҡ райондарынан командалар ҡатнаша, бөтәһе 40 жокей. Төп үҙенсәлек шунда: һуңғы урауҙа жокейҙар аттары менән алмашырға тейеш.

# АУЫЛҒА - ЯРҘАМ

**Федерация Советының Аграр, аҙыҡ-түлек сәйәсәте һәм тәбиғәттән файҙаланыу буйынса комитеты ултырышында Башҡортостан делегацияһы яңы эш башлаған фермерға гранттарҙы ит һәм һөт йүнәлешендә - 3-тән 50 миллион һумға, эшмәкәрлектең башҡа төрҙәрендә 1,5-тән 3 миллион һумға тиклем арттырырға тәҡдим итте.**

Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы депутаты Әлфәрис Байсурин һүҙҙәренсә, хәҙер кредит алыу күп ваҡыт һәм залог йәки поручителтәр талап итә. Кооперативтарҙың матди базаһын һәм ғаилә малсылыҡ фермаларын үҫтереүгә грант ярҙамы менән бюджет финанслауы кимәлен 80 процентҡа тиклем арттырырға, шуға ярашлы, фермерҙарҙың үҙ аҡсаһын һалыу талабын 40 проценттан алып 20 процентҡа тиклем кәметергә тәҡдим ителә. Ауылға ярҙам күрһәтеүҙең тағы бер юлы - халыҡҡа торлаҡ шарттарын яҡшыртыуҙа булышлыҡ итеү. Әле дүрт меңдән ашыу ғаилә сиратта тора, уларҙы тәьмин итеү өсөн 5 миллиард һумдан ашыу кәрәк.

# Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓ 2019 йылдың яҙында Өфөлә дөйөм ҡала өмәләре башлана. Тәүгеһе 6 апрелгә билдәләнгән. "Биләмәне санитар таҙартыу, төҙөкләндереү һәм йәшелләндереү айлыҡтары яҙғыһын - 25 марттан 30 апрелгәсә, көҙгөһөн 10 сентябрҙән 14 октябргә тиклем дауам итә", - тиелә баш ҡала хакимиәте ҡарарында. Өфөлә өмәләр 13 апрелдә, 20 апрелдә, 21 сентябрҙә һәм 5 октябрҙә ойошторола.

✓ 2019 йылдың 26 февралендә 30 кешенән Өфө ҡала Йәмәғәт палатаһы формалаштырылғайны. 1-се саҡырылыш Йәмәғәт палатаһының беренсе ултырышы уҙҙы. Унын эшендә Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте башлығы Өлфәт Мостафин ҡатнашты. Ултырышта күпселек тауыш менән Өфө дәүләт нефть техник университеты президенты Айрат Шаммазов Йәмәғәт палатаһының рәйесе итеп һайланды. Бынан тыш Йәмәғәт палатаһының дүрт комиссияһы формалаштырылды.

✓ Башҡортостан Республикаһы биләмәһендә 11 марттан 22-нә тиклем "Кайҙа үлем һаталар - хәбәр ит" тигән Дөйөм Рәсәй акцияһының төүге этабы үтә. Башҡортостан буйынса Эске эштәр министрлығы граждандарҙы наркотиктар һатылған урындар тураһында 8(347) 279-32-92 телефонына шылтыратып хәбәр итергә саҡыра.

✓ Башҡортостандың Иҡтисади үҫеш министрлығынан хәбәр итеүҙәренсә, проектлау, төҙөү, реконструкциялау һәм файҙаланыу маҡсатында Ишембай, Белорет, Бөрйән һәм Әбйәлил райондары биләмәһендәге урынлашҡан төбәк әһәмиәтендәге Стәрлетамаҡ - Ҡағы - Магнитогорск юлын концессияға тапшырыу күҙаллана. Юлдың оҙонлоғо - 183 саҡрым самаһы. Стәрлетамаҡтан Ҡағы ауылына тиклем трасса бушлай файҙаланыласаҡ. Ә бына Аҫҡар ауылына ҡәҙәр барыу өсөн водителдәргә 10-25 һум түләргә кәрәк буласаҡ.

✓ 19 мартта Өфөнөң Ҡала мәҙәниәт-ял үҙәгендә "Шаяниум - 2019" шаяндар һәм тапҡырҙар асыҡ ҡала конкурсының финал уйындары үтә. Был сара баш ҡала балаларын милли мәҙәниәткә, йәмғиәт эштәренә йәлеп итеү, улар араһында башҡорт телен популярлаштырыу маҡсатында 17-се тапҡыр үткәрелә.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

*✓ Йәмәғәт транспортына хәрәкәт өҫтөнлөгөн биреүсе юл хәрәкәте менән идара итеүҙең автоматлаштырылған системаһын индереү мәсьәләне хәл итеүҙә ярҙам буласаҡ.*



*ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ*



**Үткән аҙнала хәбәр итеүебеҙсә, хәҙер оператив кәңәшмәләр яңы форматта үтә: иң тәүҙә мөһим тармаҡтар буйынса яуаплы хеҙмәттәрҙең бер аҙнала күҙәтелгән хәл-ваҡиғалар буйынса отчеты тыңлана. Уның һөҙөмтәлелеге әлегә анығ ҡына билдәле түгел, шулай ҙа яуаплы вазифа биләүселәрҙе һәр саҡ тонуста тоторға ярҙам итә. Был аҙнала ла тәүҙә шундай ҡыҫҡа отчеттар тыңланды.**

# КӨН ҠАҘАҒЫНДА...

## хәүеф-хәтәрҙәрҙе иҫкәртеү

Граждандар һағы системаһы эше буйынса МБУ начальнигы Рафаэль Әхмәтов белдереүенсә, ошо арауыҡта ғәҙәттән тыш хәлдәр күҙәтелмәгән, халыҡтың тормош-көнкүрешен тәьмин иткән учреждениеларҙа авария өҙөклөгө 22 осраҡта күҙәтелгән. Ошо осорҙа 28 янғын сыҡҡан. Сүп-сар яныуы 13 тапҡыр теркәлһә, автомобилдәр яныуы ике осраҡта күҙәтелгән. Янғында бер кеше зыян күргән, һәләк булыусылар юҡ. Әммә 21 юл-транспорт ваҡиғаһында 25 кеше йәрәхәт алған, уларҙың өсөһө дауаханаға оҙатылған. Башҡа ваҡиғаларҙа һигеҙ кеше зыян күргән, шул иҫәптән алты бала, уларҙың барыһы ла госпитализацияланған. Ураған һайын төрлө ысулдар менән халыҡты ҡыйыҡтарҙан боҙ һәм ҡар төшөү ихтималлығы хаҡында иҫкәртеп тороуға ҡарамаҫтан, хәүеф көтмәгәндә һағалай, уның ҡасан килеп сығырын күҙаллап та булмай: ҡыйыҡтарҙан ҡар төшөүҙең 38 осрағы теркәлһә, һөҙөмтәлә 5 кеше зыян күргән, уларҙың дүртеһе - балалар. Шулай уҡ 18 осраҡта ҡарлы-боҙло ҡатлам автотранспорт өҫтөнә төшкән. Граждандар һағы идаралығының мәғлүмәт-диспетчер үҙәге бер аҙнала 20241 шылтыратыу ҡабул иткән, эҙләү-ҡотҡарыу отряды 52 тапҡыр саҡырыу буйынса сығып, 31 кешегә, шул иҫәптән бер балаға, ярҙам күрһәткән. Бынан тыш, 4 осраҡта шикле әйбер табылыуы тураһында хәбәр алынған.

Ҡала хужалығы системаһындағы хәл-торошҡа идаралыҡ начальнигы Никита Дмитриев байҡау яһаны. Аҙна дауамында ҡалала 22 техник инцидент теркәлгән, шул иҫәптән 2 тапҡыр - йылы, 6 тапҡыр һыуыҡ һыу биреү туҡтатылып торған. Өс осраҡта - йылылыҡ, 11 тапҡыр электр энергияһы биреү ябылған. Шул уҡ ваҡытта ғәҙәттән тыш хәлдәр категорияһына ингән техник инцидент күҙәтелмәгән. Муниципаль торлаҡ контроле органдары тарафынан ҡыйыҡтарҙан ҡар һәм боҙ төшөү ихтималлығы буйынса тикшереүҙәр үткәрелгән һәм ете осраҡта административ эш асылған, Йәмәғәт хәүефһеҙлеге үҙәге МБУ-һы төҙәкләндереү ҡағыҙҙәләренең үтәлешен тикшереп, 316 протокол төҙөгән. Әлеге ваҡытҡа торлаҡ йорттарҙың 75 процентында ҡыйыҡтар таҙартылған, был маҡсатта 440 кешене берләштергән 140 бригада ойошторолған. Урамдарҙы таҙартыуға 230 берәмек техника йәлеп ителгән, юл хеҙмәттәре соҡорҙарҙы ремонтлауҙы башлаған. 12 мартҡа 17 тонна асфальт-бетон ҡатнашмаһы һалынған.

Әйткәндәй, ҡала хакимиәте башлығы Өлфәт Мостафин белдереүенсә, Республика Хөкүмәтендә үткән кәңәшмәлә Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров та был темаға етди иғтибар биргән һәм был проблеманы интерактив карта ярҙамында хәл итеү бурысын йөкмәткән. Хәйер, был йүнәлештә эшмәкәрлек ҡала хакимиәтендә быға тиклем башланып, граждандар карта буйынса эшләргә, ә яуаплы хеҙмәттәр мөрәжәғәттәр буйынса проблеманы оператив хәл итергә өйрәнә башланы, тиергә мөмкин. Ә әлеге ваҡытта был сервис яңыртылып, штат режимында эшләй. Шулай уҡ Өлфәт Мансур улы район хакимиәттәре башлыҡтарына карта буйынса яуаплы кешеләрҙе билдәләп, эш барышын даими контролдә тоторға ҡушты.

Транспорт һәм бәйләнештәр идаралығы начальнигы Владимир Петров белдереүенсә, бөгөн пассажирҙар ташыу өс йүнәлештә алып барыла һәм байрам көндәрендә лә өҙөклөктәр булмаған, транспорт график буйынса эшләгән. Артабан йәмәғәт транспорты эше буйынса ентекле отчет менән ҡала хакимиәте башлығы урынбаҫары Андрей Федосов сығыш яһаны. Билдәләнеүенсә, әлеге ваҡытта Өфөлә пассажирҙарҙы 103 маршрут буйынса 12 предприятие хеҙмәтләндерә. Бынан тыш, тимер юлы, йылға хеҙмәте лә үҙ өлөшөн индерә. Бөгөн тармаҡ етди үҙгәрештәр кисерә, аныҡлап әйткәндә, бер-береһен ҡабатлаған маршруттарға ҙур автобустар ебәреү, яңы төҙөлгән биҫтәләргә маршруттар асыу, ҙур автобустар ебәреү иҫәбенә транспорттың дөйөм һанын кәметеү, шулай уҡ урта һыйҙырышлы автобустар алыу, юл хаҡын ҡулаҡсаһыҙ түләүҙе индереү, ҡайһы бер көйләнмәгән тариф буйынса йөрөгән маршруттарҙы көйләнгән тарифҡа күсереүҙе күҙаллай. Граждандарға мәғлүмәт биреү маҡсатында хакимиәттең рәсми сайтында "Маршруттарҙың электрон реестры" бирелгән. Унда маршруттар буйынса тулы мәғлүмәт алырға мөмкин. Шулай уҡ был мәғлүмәттәр "Яндекс. Карталар", 2ГИС электрон порталдарында һәм башҡа сервистарҙа ла сағылыш таба. Баш ҡалала транспорт мониторингының берҙәм үҙәге эшләй.

Әммә проблемалар ҙа юҡ түгел. Шуларҙың береһе - автомобиль юлдарының ныҡ көсөргәнешле булыуы. Йылдан-йыл автомобиль ағымы тығыҙыраҡ була бара, һөҙөмтәлә тығындар барлыҡҡа килә. Был инде үҙ сиратында йәмәғәт транспортының тығыҙ сәғәттәрҙә хәрәкәт графигынан сығыуына килтерә. Был йәһәттән йәмәғәт транспортына хәрәкәт өҫтөнлөгөн биреүсе юл хәрәкәте менән идара итеүҙең автоматлаштырылған системаһын индереү мәсьәләне хәл итеүҙә ярҙам буласаҡ, сөнки ул маршрут буйынса үтеү ваҡытын 15-20 процентҡа кәметеү мөмкинлеге бирәсәк. Был системаны 2020 йылда индереү күҙаллана.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

*БАШ ҠАЛАМ*

# ТЫУҒАН-ТОРҒАН ЕРЕБЕҘҘЕ...

## тәртиптә тотайыҡ

**Бөтә республика, шул иҫәптән баш ҡалабыҙ ҙа, быйылғы ҡыштың бөтә зәһәрен үҙендә татый. Ул бураны ла, урамдарҙы бөтөнләйе менән күмеп ҡуйған ҡары ла, ҡаты һыуығы ла - барыһы ла элекке, беҙ өйрәнгән ҡыштарҙағы һымаҡ быйыл. Республиканың башҡа төбәктәрендә хәлдәр нисектер, үҙем Өфөлә торғас, уға ҡағылышлы тәьҫорттарым менән бүлешкем килә.**

Ҡар яуып тора, баш ҡаланың коммуналь хеҙмәттәре уны таҙалауҙы бер минутҡа ла туҡтатмаҫҡа тырыша. Интернет селтәрендә уларҙың эше менән ҡәнәғәтһеҙлек белдереүселәр ҙә етәрлек, әлбиттә. Тик миңә ҡалһа, хәл ул тиклем үк мөшкөл түгел. Коммуналь хеҙмәт ойошмаларының үҙҙәренә ҡуйылған бурысты теүәл һәм ваҡытында үтәргә тырышҡанын үҙемдең улымдың эшләүенән генә лә сығып әйтә алам. Ул Өфө - Булгаково трассаһын таҙа тотоусылар рәтендә. Ә йорттар араһында тыңҡыслап тултырылған еңел машиналар араһындағы ҡарҙы таҙартырға теләп, иҫ киткес манёврҙар яһаусы тракторсыларға ниндәй ғәйеп ташларға мөмкин? Еңел машина хужалары бит, алдан иғлан эленеүгә ҡарамаҫтан, үҙ машиналарын урынынан ҡуҙғалтырға ашыҡмай. Ошондай моңһоҙҙар арҡаһында ла күп фатирлы йорттарҙың ихаталарында йырып сыҡҡыһыҙ көртлө ҡар тауҙары барлыҡҡа килә. Үҙең ҡыл да ҡыбырлатмайынса, кемделер эшһеҙлектә ғәйепләп ултырыу еңел инде ул.

Өфө тураһында һөйләгәндә һуңғы ваҡытта ҡала урамдарында барлыҡҡа килгән алтаҡталар тураһында лә әйтеп үткем килә. "Өфө, алға!", "Беҙ булдырабыҙ!" һәм башҡа ошондай һүҙҙәр ҡыуандырмай ҡалмай. Башҡорт телендә яҙылған бындай плакаттарҙы тағы ла күбәйтергә кәрәк, әтеү Башҡортостанда дәүләт теле икәү икәнен онотоп китәләр. 23 февраль байрамына ҡарата ҡуйылған плакаттар ҙа күңелгә хуш килде. Был байрам Тыуған илде һаҡлаусылар хаҡына билдәләнгәнлеген бөтөнләй иҫтән юйып барған саҡта, ҡала урамдарында һәм ҙур трассаларҙа ил геройҙарының, хәрби хеҙмәттә үҙҙәрен лайыҡлы күрһәтеүселәрҙең фотоһүрәтен ҡуйыу һәм уларҙың батырлығы тураһында бәйән итеү бик урынлы булды.

Быға тиклем дә гәзит биттәрендә ҡала йөҙөн боҙоусы реклама плакаттары тураһында һүҙ булғайны. Мине иң аптыратҡаны - әллә ҡасан уҙған саралар тураһындағы ҙур-ҙур плакаттарҙың, йыртылып, елдә елберләп тороуы. Ҡала райондары хакимиәттәре хеҙмәткәрҙәренең күҙенә эләкмәйме икән ни ошо? Уны алып ҡуйыу ҙур сығымдар ҙа талап итмәй кеүек. Шулай уҡ йорт, магазин һәм башҡа тәғәйенләнмәгән урындарға реклама ҡағыҙҙары йәбештереүселәр менән дә көрәшергә кәрәклеген күптән билдәләйҙәр. Һуңғы ваҡытта был йәһәттән хәлдәр яҡшырҙы, әлбиттә, ләкин уны бөтөнләй юҡ итеү өсөн эшләйһе эштәр бар әле. Ошондай тәртипһеҙҙәр бер нисә тапҡыр ҙур ғына суммала штраф түләһә, был эштәрен ҡуйыр ине, моғайын.

Бына хәҙер яҙ етте, оҙаҡламай ҡалабыҙҙа йәшелләндереү эштәре башланасаҡ. Йыл һайын төрлө парк һәм башҡа урындарҙа бер йыллыҡ сәскәләр ултыртып йөрөүселәрҙе күрәбеҙ. Ә шул урындарға күп йыллыҡ үҫемлек һәм сәскәләр ултыртып сығыу отошлораҡ булмаҫ инеме икән, тигән һорау тыуа. Әҙер сәскәлекте тәрбиәләү ҙә яңынан ултыртып сығыуға ҡарағанда күпкә осһоҙға төшмәйме ни?

Үҙебеҙ йәшәгән ҡаланы таҙалыҡта һәм тәртиптә тотоу үҙебеҙҙең ҡулда һәм намыҫта. Һәр өфөлө ҡалаға үҙенең йорто кеүек үк ҡараһа ине, сөнки ул беҙҙең тыуған-торған еребеҙ.

**Рәсих МОРАТОВ.**

# ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Астма

❖ Ике аҙна 3 йәки 5 йыллыҡ алоэға һыу ҡоймайынса, ҡыяҡтарын ҡырҡып алырға. Йыумаҫҡа, саңын һөртөргә лә, ваҡ итеп турап, быяла һауытҡа һалырға. Ошо күләмдә үк бал, 2 өлөш кагор өҫтәргә, болғарға ла, 9 көнгә һалҡын урынға ҡуйырға. Һуңынан һөҙөргә лә, көнөнә 3 тапҡыр 1-әр ҡалаҡ эсергә. Һыуытҡыста һаҡларға.

### Кунжут орлоғо

❖ Был үҫемлек биологик әүҙем матдәләргә, минералдарға, айырыуса цинкка, кальцийға, В төркөмө, А, Е витаминдарына, майлы кислоталарға, аҡһымға, антиоксиданттарға бай. Колит, ашҡаҙан сей яраһы, диарея мәлендә 2 балғалаҡ орлоҡҡа 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, бер сәғәт төнәтергә, һөҙөргә һәм көн дауамында 3-4 тапҡыр эсергә. Көн һайын яңыһын әҙерләп эсергә кәрәк.

❖ Ҡурылдай астмаһын тынысландырыу өсөн көнөнә 3-4 тапҡыр 1-әр ҡалаҡ кунжут майын эсергә.

❖ Аҙ ҡанлылыҡ, геморрагик диатездан көнөнә 3 тапҡыр 1-әр балғалаҡ май эсегеҙ.

❖ Кунжут майын һөртһәң, яралған тире тиҙерәк бөтәшә.

❖ Конъюнктивитты дауалау өсөн әҙерәк йылытылған майҙы төнгөләккә күҙгә тамыҙалар.

❖ 10 көн дауамында 1-әр балғалаҡ кунжут майын 80 грамм эремсеккә болғап ашаһаң, остеопороз үҫешен туҡтатырға була. 1 аҙна ял иткәндән һуң, дауаланыу курсын ҡабатларға.

### Стенокардия

❖ Тигеҙ өлөштә киптерелгән гөлйемеш менән энәлек емештәре алырға. 7 ҡалаҡ емешкә 2 л ҡайнар һыу ҡойоп, урап, 1 тәүлек төнәтергә. Һөҙөргә һәм яҡшы итеп ябып, һыуытҡыста һаҡларға. Көнөнә 3 тапҡыр сәй урынына 1-әр стакан эсергә. Дауаланыу курсы - 2-3 аҙна.

### Ҡурылдай астмаһы

❖ 2 ай дауамында көнөнә 3 тапҡыр прополистың 20 процентлы төнәтмәһен 10-ар тамсы эсергә.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!

**Ҡара күк рамкалы түшәктең урталағы киртләсле (тешле) биҙәге сейә төҫөндә, уға алһыу һәм ҡыҙыл ромбтар һалынған. Тар һары таҫма менән тура мөйөштөң эске һәм тышҡы һыҙаты билдәләнгән. Тәүге өлгөләге кеүек, таҫма ваҡ ҡына (ҡара һәм алһыу) ромб менән тултырылған. Эске тура мөйөштөң уртаһы буйлап икешәр төркөмләнгән күк ромбтар һалып сығылған.**

# БАШҠОРТ КЕЙЕҘЕ

Ошондай уҡ биҙәкле түшәктәр Бөрйән-дең төньяҡ өлөшөндә (Аҫҡар, Брәтәк ауылдарында) осраған. 1960 йылда Аҫҡарҙа С. Миржанова тарафынан төшөрөп алынған түшәктең ситтәре ҡара күк төҫтә. Ҡара ҡайманан һуң ҡыҙыл киртләсле буй килә. Урталағы тура мөйөш һары таҫмаға йәшел, ҡара, көрән ромбтар теҙеп биҙәлгән буйҙарҙан тора. Урта линия буйлап ҡыҙыл ромбтар теҙеп тегеп сығылған.



Тышланған кейеҙ түшәктәр. Бөрйән районының Иҫке Монасип менән Аҫҡар ауылдары. 1976 йыл.

Бөрйән районының көньяғында һәм Әбйәлил районында йәшәгән ҡыпсаҡтарҙа башҡараҡ биҙәкле түшәктәр осрай. Иҫке Монасип, Хәлил ауылдарында табылған түшәктәрҙә орнамент биш буйҙан тора: 2-сеһе менән 4-сеһе эре киртләстәрҙән (киртләс аҫтына өҫтәмә фон һалынған); уртаһы һәм ситтәре буйлап ваҡ төҫлө ромбтарҙан торған таҫмалар тартылған.

Шулай итеп, Ағиҙел йылғаһы бөгөлөнөң таулы ерҙәрҙән Урал арьяғына сыҡҡан өлөшөнә тиклем туй кейеҙен биҙәүҙең үҙенә генә хас билдәләре бар. Был төбәктә йәшәүселәргә ике йәки өс ҡатлы аппликация, геометрик орнаменттың ябай ғына фигураларын бер рәткә йәки рамкаға теҙеп ҡулланыу хас. Уртала эрерәк ромбтар, периметр буйынса тешле линиялар (көртә - ситтәре) ҡулланыу күҙәтелә. Бер-береһенә ҡапма-ҡаршы төҫтәр ҡулланыла.

Был төбәктән ситкә сыҡһаҡ, түшәкте биҙәүҙең башҡа ысулдарын осратабыҙ. Һүрән йылғаһы үҙәнендә, Һаҙалы ауылында (Ейәнсура районының төньяғы) йәшәгән үҫәргән башҡорттарында 1958 йылда рәссам Г. Мөхәмәтшин аппликациялы биҙәк менән тотошлай ҡапланған түшәктең һүрәтен төшөрөп алған.



Туй түшәге. Бөрйән районы Аҫҡар ауылы, Ейәнсура районы Һаҙалы ауылы. Экспедиция материалдары буйынса.

Киртләсле биҙәк менән түшәктең һәм уртала урынлашҡан тура мөйөштөң ситтәре биҙәкләнгән, улар араһында дуға рәүешендәге аппликация, уртала - төҫлө, ситтәрендә эрерәк түңәрәктәр. Эске тура мөйөштөң уртаһындағы түңәрәктәр тар ғына буй менән уратып алынған. Төҫлө түңәрәктәр Башҡортостандың көньяғында ҡатын-ҡыҙҙарҙың туй кейемендә осраған соляр биҙәк - мөһөргә оҡшаған.

**Светлана ШИТОВА.**
**"Халыҡ сәнғәте: көньяҡ башҡорттарында кейеҙ, балаҫ һәм туҡымалар. Этнографик очерктар" китабынан.**

ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ БАР!



# КӨТӨҮҘӘРГӘ КӨТӨҮСЕ КӘРӘК!

**Ауылдарҙа шәхси хужалыҡтарҙағы малға көтөүсе табыу мәсьәләһе йылдан-йыл ауырлаша бара. Малдар көтөүсеһеҙ йөрөгәнлектән, ауыл хужалығы культуралары сәселгән баҫыуҙар, бесәнлектәр, ултыртылған урман үҫентеләре тапалып һәм ҡышҡылыҡҡа әҙерләнгән бесән эскерттәре тәләфләнеп, ҙур зыян килә. Көтөүһеҙ йөрөгән һыйыр-аттар арҡаһында юл-транспорт фажиғәләре лә булып тора. Малдың юғалған саҡтары ла булғылай.**

Көтөүсе эше еңел түгел. Уның эш ваҡыты иртә таңдан кискә тиклем яҡынса 14 сәғәткә һуҙыла. Етмәһә, һауа торошонон да төрлө сағы була. Ямғыр, рашҡы, ел-дауыл, үҙәккә үтерлек һалҡынға ҡарамай, күҙ яҙлыҡтырмай, малдарҙы көнө буйы көтөргә кәрәк. Был эш һәр кемдең дә ҡулынан килмәй. Шуға күрә көтөүсе эшенә тотонон та, уны аҙағына тиклем еткермәйенсә ташлап ҡуйыусылар ҙа бар. Күп кенә ауылдарҙа, көтөүсе таба алмағас, малдарҙы сиратлап көтөргә мәжбүрҙәр. Ҡайһы берәүҙәр малын бөтөнләй ирекҡә сығарып ебәрә. Әлбиттә, сиратлап көтөү тәғәйен көтөүсене алыштыра алмай. "Осраҡлы" көтөүселәр, көтөү урындарын белеп етмәгәнлектән, ҡайҙа етте, шунда йөрөтә малдарҙы. Тәжрибәләре булмағанлыҡтан, эшкә яуаплы ҡарамағанлыҡтан, малдарҙың һыуға, батҡыл урындарҙа батып, зыян күреү осраҡтары ла булып тора. Көтөүлектәр ҙә рациональ файҙаланылмай, был үҙ сиратында малдың көндәлек артымы, һөтө кәмеүгә килтерә. Етмәһә, күптәр сиратлап көткәндә "корос ат"тарға атлана. Еңел машиналар үткән урындарҙа үлән үҫмәй, юлдар барлыҡҡа килә. Шуныһы көн кеүек асыҡ: көтөүҙе сиратлап, йәйәү йәки машина ярҙамында көткәндә малдарҙы сәсеүлектәргә, бесәнлектәргә зыян килтермәй көтөү мөмкин түгел. Күптәр нисек булһа ла сиратты үткәреп ебәреү яғын ғына ҡарай. Иртә менән көтөүгә сығарған малды кискә тиклем көтөп, ауылдарға имен-аман алып ҡайтыу эйәрле ат менгән махсус көтөүселәрҙең генә хәленән килерлек эш.

Эйе, таң һарыһынан алып ҡараңғыға тиклем алһыҙ-ялһыҙ эшләүсе көтөүсе эшен беҙҙә етди һөнәр тип түгел, ваҡытлы, миҙгелле кәсеп тип кенә һынайҙар. Шуға ла, көтөүсе эшен йыл әйләнәһенә алып барылған хеҙмәт төрө тип, хеҙмәт кенәгәһенә теркәү урынлы булыр ине. Ғөмүмән, көтөүсе һөнәренең абруйын күтәреү тураһында уйларға кәрәк беҙгә. Әлбиттә, бер үк ваҡытта был һөнәр кешеләре өсөн тейешле шарттар ҙа тыуҙырыу фарыз. Мәҫәлән, малды һыбай йөрөп көтөү өсөн эйәр кәрәк, ә ул хәҙер ауылдарҙа юҡ кимәлендә. Хәрбиҙәр өсөн яһалған эйәр бик унайлы буласаҡ. Ул аттың арҡаһын баҫмай, оҙаҡ йөрөгәндә лә йәрәхәтләмәй. Ундай эйәрҙәр ауылдарҙа һаҡланып ҡалған, күсермәләрен алып, шуларҙы республикала етештереүҙе яйға һалырға мөмкин булыр ине. Егеттәр тотонһон ине шул эшкә лә. Тағы шуны ла иҫәпкә алырға кәрәк: көтөүсегә атын ҡышлатып сығарыр өсөн гене 4 тонна самаһы бесән әҙерләргә һәм фураж һатып алырға кәрәк. Етмәһә, йәйге осорҙа ла аҙыҡ талап ителә, сөнки көтөүҙе иртәнге сәғәт алтынан да ҡалмай сығарырға кәрәк, шуға күрә, атты төнгөләккә аҙбарҙа әҙер тотоу зарур.

Һуңғы йылдарҙа шәхси хужалыҡтарҙа малдарҙы кәметеү, бөтөнләйгә бөтөрөү күренештәре йышайҙы. Сөнки малдарҙы көтөү өсөн кеше таба алмау, ягыулыҡҡа бер туҡтауһыҙ хаҡтар артыуы, етештергән ит-һөттө, нигеҙҙә, алыпһатарҙарға осһоҙ ғына хаҡҡа һатырға мәжбүр булыуҙары халыҡты ошо аҙымға этәрә лә инде. Фермер һәм башҡа төрлө ауыл хужалығы аҙыҡ-түлеге етештергән хужалыҡтарға хөкүмәттән субсидия, ягыулыҡҡа хаҡ кәметеү, башҡа төрлө ярҙамдар булып тора. Ә шәхси хужалыҡтар булған проблемалары менән япа-яңғыҙ тороп ҡала. Күрше Татарстанда шәхси хужалыҡтарға ла хөкүмәттән ярҙам күрһәтелә. Былтыр һәр хужалыҡтағы һауын һыйыр һанынан сығып, бер башҡа - ике мендән дүрт меңгә тиклем, бер һауын кәзәгә бер мең субсидия бирелде. Уның дөйөм күләме 360 миллион һум тәшкил итте. Мин был өлгөнө беҙҙең республикала ла ҡулланайыҡ, тип әйтергә теләмәйем. Ә шулай ҙа шәхси хужалыҡтарҙағы малды көтөү миҙгелен намыҫлы үткәргән көтөүселәргә ҡышҡы айҙарға эшһеҙлек буйынса пособие тәғәйенләп, минималь эш хаҡына еткереп, өҫтәп субсидия түләү ҙур сара булыр, шул уҡ ваҡытта көтөүсе эшенә ҡарата ниндәйҙер кимәлдә дәғүәселек тыуыр ине. Бындай пособие, субсидия түләүгә киткән сығымдар сәселгән баҫыуҙарҙы, бесәнлектәрҙе көтөүһеҙ йөрөгән малдарҙан тапаттырыуға сик ҡуйып, ундырышлылыҡты күтәреү иҫәбенә генә унлата, хатта унан да күберәккә кире ҡайтыр ине.

Көтөүсегә эш хаҡын өй һайын йыйып түгел, ауыл хакимиәттәрендә йәки икенсе юл менән үҙәкләштереп, билдәле бер өлөшөн Пенсия фондына күсереп түләү маҡсатҡа ярашлы буласаҡ. Ул ваҡытта көтөүсенең дөйөм хеҙмәт стажы йыйылып барасаҡ. Икенсе яҡтан ҡарағанда, Пенсия фондының тупланма өлөшө лә отасаҡ. Өсөнсөнән, эш хаҡы урынына көтөүсегә спиртлы эсемлек тотторол ебәреү күренештәренә юл ябыласаҡ.

Шәхси хужалыҡтарҙағы малды көтөүҙе махсус көтөүселәр ҡарамағына тапшырыу ауылдарҙа киҫкен торған эшһеҙлек һәм эскелек проблемаһын да ниндәйҙер кимәлдә хәл итеүгә булышлыҡ итәсәк.

Сираттағы көтөү миҙгеле лә килеп етер. Был проблеманы тик ауыл хакимиәттәре иңенә генә һалыу һынылыш бирмәйәсәк. Был юҫыҡта төрлө кимәлдәге депутаттар, республика хөкүмәте менән бер төптән эш итеү генә уҙ һөҙөмтәһен бирәсәк.

**Азамат КҮСӘЙЕВ.**
**Учалы районы.**

АҠЫЛЛЫҒА - ИШАРА

# ҠАТЫН-ҠЫҘ НИМӘ ТЕЛӘЙ?

**Билдәле Австралия актеры Мел Гибсон уйнаған "Чего хотят женщины?" фильмын ҡарағанығыҙ бармы? Был һорауҙы, әлбиттә, иң беренсе ир-егеттәргә бирергә теләйем. Булмаһа, ҡарағыҙ әле. Был - бик мауыҡтырғыс, шул уҡ ваҡытта фәһемле ғаилә комедияһы.**

Төп герой - тормошта ҙур уңышҡа өлгәшкән, үҙ-үҙен ныҡ яратҡан һәм, әйтергә кәрәк, ҡатын-ҡыҙҙарҙы бик ихтирам итмәгән урта йәштәрҙәге буйҙаҡ. Ул үҙен бер ҡасан да әйләнгән тип күҙ алдына килтермәй һәм унайы тура килгән һайын гүзәл заттан көлөргә маташа. Көндәрҙән бер көндө ул бәхетһеҙлеккә осрай, дөрөҫөрәге, электр тогы һуға. Һауыҡҡас, ир ҡатын-ҡыҙҙарҙың уйында нимә булғанын күрҙәләй башлай. Был яңы һәләтен ул тәүҙә карьера баҫҡысы буйлап үрләү өсөн ҡулланырға уйлай. Әммә эргә-тирәһендәге гүзәл заттар һәр ваҡыт йылмайып-көлөп йөрөнә лә, һәр береһенең күңелен борсоған, хәүефләндергән, бәхетһеҙ иткән уй барлығын төшөнә. Был тормошта уларға шул тиклем ауыр икәнен аңлай һәм хөрмәт итә башлай.

Йыш ҡына урамда, магазинда, йәмәғәт транспортында ир-егеттең ҡатын-ҡыҙға ҡарата тупаҫ мөғәмәләһен, урынһыҙ шаяртыуын, хатта кәмһетергә тырышыуын күрергә була. Күптән түгел светофор янында дөрөҫ туҡтамаған руль артындағы ҡыҙға бер ирҙең уң ҡулының урта бармағын күрһәтеүен күреп, шул баланы үҙемдең ҡыҙым кеүек йәлләгәйнем. Фильмдағы герой кеүек, көсһеҙ заттың уйын уҡый белһә, был ир йораты шулай тупаҫ ҡыланмаҫ ине, тип уйлайым. Бәлки, ҡыҙҙың яҡын кешеһе дауаханала ятып йәки ете менән берәй хәл булғандыр, сөнки күңеле тыныс булһа, ул икенсе машина өҫтөнә менеп бармаҫ ине, тип уйлайым.

Үрҙә атап киткән комедияға ҙур кинәйә һалынған. Әммә һәр ситләтеп әйтелгән һүҙҙә һәр ваҡыт ысынбарлыҡ ята. Шуға күрә, хөрмәтле ир-егеттәр, электр тогы һуҡҡанын көтмәгеҙ. Байрамдарҙа ғына түгел, ә көн һайын икенсе яртығыҙға хөрмәт күрһәтегеҙ, матур һүҙҙәр әйтегеҙ, рәхмәт белдерегеҙ. Һөҙөмтәһе оҙаҡ көттөрмәҫ. Ышанмаһағыҙ, үрҙә атап кителгән фильмды ҡарағыҙ!

**Лена БАРЫЕВА.**

✓ *Театр техникумын тамамлағас, йәш актер Башҡорт драма театры сәхнәһендә сығыш яһай башлай. Осҡонланып торған күҙҙәр, сибәр йөҙ, мөһабәт буй-һын спектаклдәрҙә төп ролдәрҙә уйнарға мөмкинлек бирә.*



*ХӘТЕРКИТАП*

**Эске күңеле, тышҡы ҡиәфәте менән дә берҙәй матур, һәләтле, йомарт булған был кешегә Башҡорт драма, опера һәм балет театрҙары үҫешендә мөһим роль уйнарға тура килә. Яҙмыш уға ялҡынлы ижад тормошо менән йәшәүгә аҙ ваҡыт бүлә - бары тик 18 йыл. Әммә ошо мәл эсендә лә ул күп ролдәр ижад итә, бер нисә драма һәм музыкаль спектаклдәр ҡуя, Арыҫлан Мөбәрәков кеүек бар халыҡтың яратҡандарына әүерелерҙәй матур актерҙар тәрбиәләй.**

# ТЕАТРҘЫҢ ҺӨЙӨКЛӨҺӨ



*Булат Имашев.*

**Булат (Тимербулат) Гөбәйҙулла улы ИМАШЕВ** (Данил Ғофранов уйнай) - актер, режиссер. Яҡташтары хәтерләүенсә, уның атаһы Гөбәйҙулла Имашев, ҡасандыр улыс старшинаһы вазифаһын алып барған кеше, башҡалар араһында һәләте менән айырылып торған абруйлы шәхес була. Илдә барған ваҡиғалар менән ҡыҙыҡһына, халыҡ йырҙарын ярата, бейей ҙә. Атаһына оҡшап, Булат та аҡыллы, һәләтле була, тура һүҙлелек, ғәҙеллек яратыуы ла атаһынан күсә. Ошо ҡыйыулығы 13 йәшендә үк Ырымбурға барып, педагогия техникумына уҡырға инергә ярҙам итә. Бер юлы сәнғәт һөйөүселәр түңәрәгендә шөғөлләнә, Ырымбур драма театрында актерлыҡ осталығы буйынса тәүге дәрестәр ала. Ырымбурҙа техникум ябылыу сәбәпле, Өфөгә килә, типографияға эшкә урынлаша, үҙешмәкәр артистар менән берләшә. Тәбиғи һәләтен күреп, Ш. Хоҙайбирҙин, Ю. Юлтый, Ғ. Дәүләтшин, М. Мортазин уға артислыҡҡа уҡырға кәңәш итә. Театр техникумын тамамлағас, йәш актер Башҡорт драма театры сәхнәһендә сығыш яһай башлай һәм тиҙ арала тамашасы күңелен яулай. Осҡонланып торған күҙҙәр, сибәр йөҙ, ҡайнар темперамент, мөһабәт буй-һын спектаклдәрҙә төп ролдәрҙә уйнарға мөмкинлек бирә. Ул режиссер эшмәкәрлегенә лә тотона. Остаздары булып театрҙың художество етәксеһе Мәкәрим Мәһәҙиев менән директор һәм режиссер Вәлиулла Мортазин тора. 1928 йылда башҡорт театры "Салауат Юлаев" музыкаль драмаһын ҡуя, милли геройҙы Булат Имашев уйнай. С. Мифтаховтың "Һаҡмар" спектаклендә Юлай, Д. Юлтыйҙың "Ҡарағол"ында Һөйөндөк, А. Островскийҙың "Гәйепһеҙ гәйеплеләр"ендә Незнамов - Имаштың иң сағыу ролдәрен иҫәпләп бөтөрлөк түгел. Өфө театр техникумында уҡытып, Луначарский исемендәге Дәүләт театр сәнғәте институтының ситтән тороп уҡыу бүлегендә уҡып та өлгөрә.



"Беренсе Республика" фильмы, "Борис Годунов" спектакленән сәхнә. Костюм һәм декорациялар Башҡорт опера һәм балет театрынан алынды.

**Гөлнара ЯРУЛЛИНА,**
**тарих фәндәре кандидаты, проект авторы.**

*УЛАР АВТОНОМИЯ ЯУЛАНЫ*

# ВӘЛИДИ МЕНӘН ЛЕНИНДЫҢ...

## һөйләшкәнен дә ишеткән ул

**Быйыл Башҡорт АССР-ына нигеҙ һалыныуҙың 100 йыллығы билдәләнә. Ошо айҡанлы Башҡортостан автономияһын яулаған шәхестәр хаҡында белгәндәребеҙҙе башҡалар менән дә уртаҡлашһаҡсы. Мин бөгөн һеҙгә ошо шәхестәрҙең береһе тураһында бәйән итәм.**

Атайым Хәлилов Ғарифулла Әһлиулла улы Ишембай (элекке Маҡар) районы Һайран ауылында 1903 йылда тыуған. 1941 йылда Бөйөк Ватан һуғышына алына. Әлкәлә хәрби әҙерлек үткәндән һуң, фронтҡа оҙатыла. 1943 йылда хәбәрһеҙ юғала. Һуғыш тамамланды, һалдаттар ҡайта башланы. Беҙ ҙә атайыбыҙҙы ҡайтып төшөр тип өмөтләнеп, оҙаҡ көттөк. Атай ҡайтманы. 1947 йылда әсәйебеҙ Ураҙбай ауылына Хажғәли Бәһауетдинов исемле бабайға тормошҡа сыҡты. Апайым менән беҙ уны "бабай" тип йөрөттөк.

Шуныһы аптырата ине: уны йәше лә, олоһо ла көләп-мыҫҡыллап йөрөттө. Бының шауҡымы беҙгә, балаларына ла эләкте. Бабайыбыҙ ҡайһы бер көндәрҙә үҙ-үҙенә бикләнеп, ауыҙынан бер һүҙ сығармаҫ ине. Уның ҡарауы, бер аҙ "төшөрөп" алһа, Әхмәтзәки Вәлиди, Муса Мортазин, Василий Чапаевтар тураһында сәғәттәр буйына һөйләргә яратты. Тәүге икәүһен ул заманда "халыҡ дошманы" тип йөрөттөләр. Бабайҙың өлкән улы Муллағәли, Бөйөк Ватан һуғышы ветераны, атаһының биографияһынан ҡурҡып, фамилияһын Ғәйнетдиновҡа алыштырып алған. "Атай, етәр инде шул Зәкиҙәрең менән, минең башты ашатырға итәһеңме ни?" тип ялбарыуы әле лә иҫтә.

Минең бала саҡ бабай менән бергә урман ҡыҙырып, бесән сабып, һалабаш әҙерләп үтте. Кистәрен эштән буш саҡта, "Һин Зәки ҙә Зәки тиһең, бына ул ниндәй булған" тип, китаптарҙан өҙөктәр уҡыйым. Элекке китаптарҙа шундай юлдар була торғайны. Имеш, Әхмәтзәки Вәлиди шаҙра, йәмһеҙ ҡиәфәтле, иҫерткес эсемлектәр ҡулланған, тәмәке тартҡан, мәрйә һөйәркәһе булған. Мин бабайға шуларҙы уҡыйым. "Юҡ, дөрөҫ яҙмағандар, Зәки улай түгел ине, бик ябай, талапсан булды, һалдаттар менән ихлас һөйләште", - тиеп ҡабатланы. Петроградта Вәлидиҙең Ленин менән һөйләшкәнендә яндарында булыуын, уларҙың ҡыҙып китеп үҙ-ара талашыуҙарын йыш иҫкә ала ине. Мин ул саҡта быға, әлбиттә, ышанманым, алдап һөйләй, ти торғайным. Әхмәтзәки Вәлидиҙең "Хәтирәләр" китабын уҡығас, аптырауға ҡалдым. Тимәк, минең бабай унда булған, тик ниндәй вазифала? Әллә шәхси һаҡсыһымы, бәлки, башҡа вазифаламы?

Асыҡланыуынса, минең үгәй атай 1914 йылғы Беренсе бөтә донъя һуғышынан ҡайтҡас, бөтә булмышын Башҡортостаныбыҙҙың азатлығы, яҡты киләсәге өсөн көрәшкә бағышлай. Республиканың тәүге баш ҡалаһы Темәстә, Ырымбурҙа булғандарҙы йыш иҫкә алды. Әхмәтзәки Вәлиди киткәс, Муса Мортазин бригадаһы составында һуғыша, һуңынан Василий Чапаев етәкселегендә 25-се кавалерия дивизияһында Колчакка ҡаршы яуҙарҙа ҡатнаша.

Бабайыбыҙҙың атаһы Кинйәғәли исемле булһа кәрәк. Хәлле ауыл байҙарынан иҫәпләнә, күпләп мал тота, игенселек, ҡортсолоҡ менән шөғөлләнә. Магазиндары, таш келәттәре әле булһа һаҡлана. Ике туған ағаһы Фәхретдин Бәһауетдиновты кулак тип, Себер тарафтарына оҙаталар.

Ошо яҙмаларға өҫтәп тағы шуны әйтер инем: Хажғәли Бәһауетдинов республикабыҙ азатлығы өсөн үҙ өлөшөн индергән, үҙ халҡының, үҙ еренең илһөйәр улы булды. Ул тыуып үҫкән, ғүмер иткән Ишембай районы Ураҙбай ауылында йәшәгән урамына Хажғәли Бәһауетдинов исемен биреү тарихи дөрөҫлөккә тағы бер аҙым булыр ине.

**Ғәлиулла ХӘЛИЛОВ,**
**хеҙмәт ветераны.**

*ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ*



*Әкрәм БЕЙЕШ*

# БАШҠОРТ АВТОНОМИЯҺЫ ӨСӨН КӨРӘШ БАШЫНДА

Башҡорт ғәскәрен ойоштороуға Башҡорт хөкүмәте ғәмәлдә эш башлаған тәүге көндәренән үк тотонған. Себер хөкүмәте менән һөйләшкәнгә тиклем уның 2 йәйәүле полкы һәм 12 ҡурғаныу төркөмө булған, был ғәскәри берәмектәрҙә бөтәһе 3500 кеше иҫәпләнгән. Ләкин ғәскәри көстө тейешенсә тәьмин итеү һәм күбәйтеү өсөн башҡорттарҙың матди сараһы булмаған. Шуға күрә улар ярҙам һорап, ирекһеҙҙән, Комуч менән Себер хөкүмәтенә мөрәжәғәт иткән. Комуч ҙур вәғәҙәләр биргән, ләкин киләсәк көнгә, Себер хөкүмәте килешеү яһағанда уҡ Башҡорт ғәскәрен ҡорал-яраҡ менән тәьмин итергә йөкләмә алған һәм үҙ йөкләмәһен күпмеләр кимәлдә үтәгән. Алған ярҙамы өсөн башҡорттар үҙ ғәскәрен оператив йәһәттән Себер хөкүмәтенең хәрби етәкселегенә буйһондорорға риза булған, ләкин оператив эшкә ҡағылмаған башҡа яҡтан Башҡорт ғәскәре Башҡорт хөкүмәтенең хәрби бүлегенә һәм үҙенең Баш штабына буйһонған айырым ғәскәри берәмек булып ҡалырға тейеш булған. Башҡорттар Себер хөкүмәте менән булған мөнәсәбәтте политик бойондороҡлоҡҡа юл ҡалдырмай торған килешеү нигеҙенә ҡорорға тырышҡан. Башҡорт хөкүмәте тағы бер тапҡыр тик үҙ позицияһында ғына торғаны һәм партияһыҙ, ләкин демократик орган булғаны хаҡында рәсми белдереү яһаған.

1918 йылдың 10 июлендә Башҡорт хөкүмәте "изге Башҡортостан ерен залимдарҙан һаҡлау өсөн" башҡорттарҙы ғәскәргә мобилизациялау тураһында фарман сығарған. Ғәскәр төҙөү ниәтен башҡорт халҡы бик ныҡ хуплаған һәм үҙ ғәскәренә ҙур теләк менән барған. Шуның өсөн Башҡорт хөкүмәте бик тиҙ генә ваҡыт эсендә 2 атлы һәм 6 йәйәүле полк төҙөүгә өлгәшкән. Шунан тыш, халыҡты рус һәм башҡа килмешәк крәҫтиәндәр террорынан һаҡлау, урындағы башҡорт власын көсәйтеү өсөн ирекле һыбай төркөмдәр ойошторолған.

Башҡорт хөкүмәте менән бер үк ваҡытта Һамар һәм Себер хөкүмәттәре лә мобилизация иғлан иткән. Башҡорт хөкүмәте, уларҙың мобилизацияны башҡорт кешеләренә ҡағылмай, тип фарман сығарған. Ләкин был фарманды аҡ гвардия хөкүмәттәре иҫәпкә алмаған, шулай итеп автономиялы Башҡортостан хоҡуғын тупаҫ рәүештә инҡар иткән. Был хәл башҡорттарҙы рус хөкүмәттәре менән тәүге ҙур ҡаршылыҡҡа килтергән. Башҡорт хөкүмәтенә Көнбайыш Башҡортостанда үҙ власын урынлаштырыр мөмкинлек булмаған: тәүҙә ул фронт һыҙығы аръяғында булған, ә Ҡыҙыл ғәскәр сигенгәс, аҡ гвардия хөкүмәттәре автономияны кинәйтергә ирек бирмәгән. Шуға күрә автономия көнсығыш һәм көньяҡ-көнсығыштағы "Бәләкәй Башҡортостан"да ғына ғәмәлләштерелгән. Башҡорт хөкүмәте Бәләкәй Башҡортостанды административ йәһәттән 13 кантонға, ә кантондарҙы улыс һәм йорттарға бүлгән. Ул административ берәмектәрҙә милли власть органдары ойошторолған. Ләкин Башҡорт хөкүмәте элекке өйәҙ идаралығын бөтөрә алмаған. Өйәҙ идаралығы аҡтар бойондороғона күсеп, һаман эшләп ятҡан. Рус административ органдары башҡорттоҡо менән йәнәш эш иткән, улар аша аҡ гвардия хөкүмәттәре автономияны Башҡортостан ерендә үҙ власын атҡарған һәм шуның менән автономияның эске эшенә ҡыҫылмаҫҡа тигән йөкләмәһен боҙған. Башҡортостан эшенә ҡыҫылыу менән бергә улар башҡорттарҙы кәмһеткән, рәнйеткән һәм идара итеүгә булдыҡһыҙ итеп күрһәтергә тырышҡан. Былар бөтәһе лә тағы башҡорт менән рус властары араһын ныҡ боҙоуға сәбәп булған.

**(Дауамы бар).**

*✓ Башҡорт музыкаһын уйнарға көслө ынтылыш барлыҡҡа килде һәм үҙемә фекерҙәштәр эҙләй башланым. Төркөмдә рухлы, башҡорт моңон яратҡан кешеләр тупланырға тейеш ине минең ҡарамаҡҡа.*

# БАШҠОРТ МОҢО - уға кемдекендер

**Рәсәй генә түгел, ә сит ил тамашасыларын да Башҡортостан, башҡорт йырҙары менән таныштырып йөрөүсе "Заман" төркөмө республика халҡын да үҙ сығыштары менән йыш ҡыуандыра. Уларҙың сағыу, үҙенсәлекле сығышы мәҙәни сараға мәртәбә өҫтәй, уны байыта һәм һәр саҡ көтөп алына. Төркөм етәксеһе Радмир Муфтахин шулай уҡ башҡорт халыҡ көйҙәрен һәм йырҙарын гитарала уйнау өсөн эшкәртеүсе музыкант булараҡ та танылыу яулаған ижадсы. Уның гитараһында сиртелгән башҡорт моңо бер кемде лә битараф ҡалдырмай. Радмирҙың Өфөлә ҙур уңыш менән уҙған концертынан һуң осрашып әңгәмә ҡорҙоҡ.**

## Күңел тарткан юл

Нижневартовск ҡалаһында тыуып, Ауырғазы районында үҫтем. Бала саҡтан әүҙем булдым һәм мине төрлө өлкә ҡыҙыҡһындырҙы. Мәктәптә теүәл фәндәрҙән республика, ил кимәлендә үткәрелгән олимпиадаларҙа ла ҡатнаштым, музыка мәктәбенә йөрөнөм, спорт менән дә дуҫ булдым. Уҡытыусыларым мине нефть йәки газ өлкәһендә белгес булыр тип юраны, ләкин 9-сы кластан һуң мин музыка колледжына уҡырға индем. Шулай ҙа был юлдан китеүем уйламаҫтан булды, тип әйтмәҫ инем. Атайым һәм олатайым һәүәҫкәр гармунсы булды, ғөмүмән, ғаиләмдә барыһы ла музыкаға ғашиҡ кешеләр. Музыка мәктәбендә уҡығанда гитара менән төрлө кимәлдәге конкурстарҙа ҡатнашып, моң донъяһына тағы ла яҡынайып, сәнғәткә ылығып үҫтем. Буласаҡ һөнәремде һайлауҙа мәктәптә профориентация буйынса уҡытылған китаптар ҙа булышлыҡ итте. Шуларҙың береһендә "Күңелегеҙ нимәгә ынтыла - шул юлдан атлағыҙ", тип яҙылғайны. Миңә был һүҙҙәр ныҡ тәьҫир итте. Шулай уҡ әсәйемдең дә теләгемде хуплап тороуы ышаныс өҫтәне.

Өфө музыка колледжына килгәс, кафедра мөдире әсәйемә: "Әгәр ҙә улығыҙҙың гитарала профессиональ башҡарыусы белгес булыуын теләһәгеҙ, Салауат музыка колледжына алып барығыҙ", - тине. Унда мин Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Неринберг Сергей Александрович класында белем алдым. Ул миңә гитара буйынса ныҡлы нигеҙ бирҙе, күп нәмәгә өйрәтте, минең гитараға булған һөйөүемде нығытты. Беҙ уның менән төрлө конкурстарға күп йөрөнөк, нәҡ ошо йылдарҙа Рәсәй һәм халыҡ-ара конкурстар лауреаты исемдәрен яуланым. Башҡортостан Республикаһы Президенты стипендиаты булдым.

Колледждан һуң Мәскәүҙе яуларға киттем. Салауатта һәр саҡ минең шәп музыкант булыуымды һыҙыҡ өҫтөнә алдылар. Мин, тәбиғи, быға ышандым һәм Мәскәүҙәге бер генә бюджет урынының тик минеке генә буласағына ныҡ ышанып, имтихандарға ла рәтләп әҙерләнмәнем. Бөтә Рәсәйҙән йыйылған йөҙәрләгән йәш музыканттар араһында ысынлап та музыка генийҙары булғанлығын да күрер хәлдә булмағанмын. Ләкин һауанан ергә тиҙ төштөм - уҡырға инергә бер нисә балл етмәне. Хәлдең ошолай тамамланыуында тағы ла бер мөһим фактор үҙ ролен уйнаны. Юғары уҡыу йортонда имтихан алыусылар үҙҙәре музыка колледжында уҡытҡан уҡыусыларын уҡырға алырға тырыша. Был, бәлки, дөрөҫтөр, сөнки ул уны бәләкәйҙән музыкаль йәһәттән үҫтергән һәм артабан уның менән нисек эшләү кәрәклеген алдан тоҫмөрләй. Ә яңы уҡыусыны белеп-аңлап алғансы, әллә күпме ғүмер үтә.

Мәскәүҙәге балдарым менән Магнитогорск ҡалаһындағы консерваторияға уҡырға индем һәм унда бер йыл белем алдым. Консерваторияла уҡыу барышы яҡшы ҡоролған, йәшәү шарттары ла һәйбәт ине. Яҡшы белгестәр әҙерләп сығарыла унан, ләкин йәш белгестәргә унда үҫеү мөмкинлеге юҡ. Магнитогорск - эшселәр ҡалаһы һәм юғары музыка менән ҡыҙыҡһыныусылар һаны ла бик сикле. Мәскәү менән Магнитогорск ҡалаларында сәнғәт донъяһындағы айырма - күк менән ер араһы. Шуға күрә бында ҡалыуым мине профессиональ музыкант булараҡ юғалтыуға килтерәсәген аңлап, Мәскәүгә барыу өсөн әҙерләнә башланым. Икенсе йылына мин Маймонид исемендәге дәүләт классик академияның композитор, классик гитара виртуозы Никита Кошкин класына уҡырға индем. Бөтә музыкаль юғары белем биреү учреждениеларында гитара халыҡ инструменттары иҫәбендә уҡытыла, тик ошо академияла ғына айырым классик гитара кафедраһы бар. Унда тик гитара өсөн махсуслаштырылған белем алырға мөмкин. Академияла уҡығанда ла конкурстарҙа ҡатнашыуымды дауам иттем. Шунда уҡ башҡорт халыҡ көйҙәрен гитара өсөн эшкәртә башланым. Тәжрибәм уңышлы булды һәм мин халыҡ-ара композиторҙар конкурсы лауреаты исемен яуланым. Аспирантурала "Башҡорт көйөнөң заманса сәнғәттә трансформацияланыуы" темаһын өйрәнеп, бер нисә мәҡәлә яҙҙым. Шулай уҡ кандидатлыҡ минимумын яҡланым.

## Башҡортлоҡ минең ҡанымда

Мин уруҫ телле башҡорт. Атайым иртә баҡыйлыҡҡа күсеү сәбәпле, апайым менән икебеҙҙе аяҡҡа баҫтырыу өсөн әсәйем әллә нисә урында эшләргә мәжбүр булды. Беҙ балалар баҡсаһында, мәктәптә уруҫ телендә аралашып үҫтек, урамда ла ошо телдә һөйләштек. Шуға күрә башҡортса аңлаһам да, һөйләшә белмәйем, әммә ул минең ҡанымда, йөрәгемдә. Аралашырға, әңгәмә ҡорорға, бәйләнештә булырға яратам. Ләкин башҡорттар араһында башҡортса һөйләшә белмәүем, тиҙ һөйләһәләр, ҡапыл ғына аңламауым миндә комплекс тыуҙыра. Башҡортса һөйләшергә өйрәнеүҙе үҙемә маҡсат итеп ҡуйғанмын һәм уға өлгәшеремә ышанам.

Туған телемдә аралашмаһам да, әсәйем беҙҙә башҡортлоҡто тәрбиәләй алған. Апайым да, мин дә башҡорт милли ижадын яратабыҙ. Мин, башҡорт булараҡ, милли музыкабыҙҙы аңлайым һәм тамашасыға еткерә алам. Башҡорт халыҡ көйө, йырҙары миңә үҙемде музыка аренаһында башҡалар менән бер рәттән тойорға һәм торорға ярҙам итә. Ә башҡа милләт музыкаһын, нисек кенә тырышһам да, урын-еренә еткереп уйнай алмаҫ инем, сөнки ул минең ҡанымда юҡ, булмышыма һалынмаған, атайәсәйем аша һөйөү күсмәгән.

## Гитара - бәләкәй фортепиано

Музыка ҡоралдары ифрат күп төрлө. Беҙҙең илдә баян, фортепиано, скрипка һәм башҡа музыка ҡоралдары һанлана, ә гитараға ябай ғына инструмент итеп ҡарау киң таралған. Гитара тулы мәғәнәһендәге музыка ҡоралы һәм унда башҡа уйын ҡоралдарындағы кеүек үк төрлө фактура уйнарға, классик әҫәрҙәр башҡарырға мөмкин. Гитараны мин бәләкәй генә фортепиано, тип әйтер инем. Профессиональ гитара оҫтаһы булыу өсөн төплө белем алырға кәрәк. Мин, мәҫәлән, гитара уйнау серҙәрен 19 йыл буйына өйрәндем һәм әле лә уйнау оҫталығын шымартыу буйынса эшләйем. Тәү ҡарашҡа күрекһеҙ, ябай ғына күренгән гитара ярҙамында музыка донъяһында ҡайнап йәшәргә мөмкин. Гитарала ике аккорд һуғып, өс көй уйнаусыға ҡарап ҡына уның мөмкинлектәре тураһында һүҙ йөрөтөү хата.

Гитара - бик боронғо музыка ҡоралы. Уның хаҡындағы мәғлүмәт беҙҙең эраға тиклемге дәүергә барып тоташа. Әлеге ваҡытта гитараны испан халҡының милли уйын ҡоралы итеп беләләр һәм фламенко бейеүенең бер өлөшө тип ҡабул итәләр. Ләкин фламенко - Испанияла йәшәүсе сиғандарҙың гитара көйөнә бейеүе. Был әҙ генә һанлы халыҡ үҙҙәренең ижадын, сәнғәтен быуаттар буйына бер-береһенә тапшырып килеп, әлеге көнгә тиклем һаҡлап ҡалған. Ә билдәле фламенко уйнаусы гитарасы Пако де Лусия халҡының милли сәнғәтен донъя кимәленә күтәреп, унан айырым бер жанр яһауға өлгәште. Шулай итеп, фламенко - гитарала башҡарылған халыҡ көйө.

## "Заман" төркөмө тураһында

Мәскәүгә тәүгә барғанда уҡ унда йәшәгән халыҡтың күплегенә, һәр милләттең ошо ҙур ҡалаға үҙенең миллилеген индереүен күреп аптырағайным. Уҡырға инеп, бер аҙ йәшәгәс, әлеге күптөрлөлөк араһында миңә үҙебеҙҙең башҡорт моңо, мәҙәниәте, сәнғәте етмәй башланы. Башҡаларҙың йыр-көйҙәре минең моңға булған "һыуһыныуымды" ҡандырманы. Үҙемдә сит кеше, ят мәҙәниәт араһында юғала барған кеүек итеп тойҙом. Башҡорт музыкаһын уйнарға көслө ынтылыш барлыҡҡа килде һәм үҙемә фекерҙәштәр эҙләй башланым. Төркөмдә рухлы, башҡорт моңон яратҡан кешеләр тупланырға тейеш ине минең ҡарамаҡҡа, шуға күрә сығышы менән Башҡортостандан булған музыканттар эҙләнем. Тәүге составта 11 кеше инек, хәҙер "Заман"да 6 музыкант. Ошо йылдар эсендә төркөм менән Рәсәй, Германия, Латвия, Нидерланды һәм башҡа Европа илдәрендә үткәрелгән халыҡ-ара конкурстарҙа ҡатнаштыҡ. Уларҙың һәр береһе иҫтәлекле, ләкин Ҡаҙандағы Turkvizyon-2014 (3-сө урын), Италияның Удин ҡалаһындағы конкурс (2-се урын) беҙҙең өсөн бигерәк тә иҫтәлекле. Шулай уҡ Норвегияның Кеутукейно ҡалаһында уҙғарылған "Liet international - 2017" конкурс-фестивален, Германияның Галле ҡалаһындағы, Астанала "Nomad way" и "Astana Expo 2017" фестивалесиктәрендә уҙған концерттарыбыҙҙы һәм Нидерландыла



**✓ Беҙгә бер кемгә лә эйәрергә йәки оҡшарға тырышыу кәрәкмәй. Башҡортостан, башҡорт халҡы, уның моңо - бөтөн. Шулай уҡ башҡа музыка менән беҙҙең моң араһында аралашсы ла кәрәкмәй.**



"Liet International" конкурсын онотоу мөмкин түгел. Ошондай һәр саранан үҙебеҙгә ғәйәт ҙур тәжрибә алып ҡайтабыҙ, башҡа илдәрҙән килгән музыканттар менән бәйләнеш булдырабыҙ.

Элек мин Францияла - французлар, Германияла - немецтар, Италияла итальяндар һәм башҡа Европа илдәрендә лә тик илгә исем биргән халыҡ ҡына йәшәй тип уйлай инем. Бахтиһән, уларҙың һәр береһендә әллә күпме төрлө милләт йәшәй икән. Мәҫәлән, Италияла ғына фриул, арбереш, ладин, романш һәм башҡа милләттәр көн итә. Францияла 300 кешенән генә торған корнеш халҡы йәшәй. Һәм уларҙың һәр береһенең үҙ теле, милли музыкаһы бар. Бында ошондай күп төрлө мәҙәниәт араһында башҡорт халҡының моңо ла үҙенең тамашасыһын тапты. Беҙҙең музыка сит илдә - экзо-

# БӨТӨН,

## ҡушыу кәрәкмәй

тика. Бөтә ерҙә лә "Заман"дың сығыштарын бик яҡшы ҡабул иттеләр, овацияға күмделәр. Сифатлы музыканы белгән, уны һанлаған Европа тамашасаһы алдында сығыш яһауы иңгә ҙур яуаплылыҡ һала. Уларҙы арлы-бирле, сифатһыҙ уйын менән алдырып булмай. Ундағы тамашасы сифатлы музыканы аңлай, һанлай һәм тыңларға теләй. Улар музыканы тыңлап ҡына ҡалмай, ә ишетә белә.

Италияла бер конкурстан һуң формаль булмаған кисәлә ҡурайсы егетебеҙ Ислам Илембәтов сәхнәгә сығып, "Буранбай"ҙы уйнап ебәрҙе. Күҙ алдығыҙға килтерегеҙ - сәхнә, ҡулына тик ҡурайын тотҡан башҡорт егете һәм 3Д форматтағы шоу күреп өйрәнгән, ныҡ талапсан Европа тамашасыһы. Ҡурай моңо яңғырай башлағас та, шаулашҡан, бер-береһен бүлә-бүлә хәбәр һөйләгән, бейегән кешеләр тынып ҡалды. Ислам "Буранбай"ҙы аҙағына тиклем, бөтә ҡабатлауҙары менән оҙаҡ уйнаны. Ләкин бер кем ҡыбырламаны, бүлдермәне. Икенсе менталитетлы, беҙҙекенә бөтөнләй оҡшамаған музыкаға өйрәнгән кешеләрҙең күңелен ҡурай, унан сыҡҡан башҡорт моңо арбаны, һуҙһеҙ итте, күңелдәрен яулап алды. Башҡорт халҡы йырының бөтә тәрәнлеген, аһәңлеген, моңон асып һала алған ҡурайсы егеткә оҙаҡ ҡул сапты-лар.

Беҙ башҡорт халыҡ фольклорын нигеҙ итеп алып эшләйбеҙ. Коллективтың бурысы - фольклор һәм заманса музыка синтезы ярҙамында башҡорт милли традицияларын һаҡлап ҡалыу. Күп һанлы конкурстарҙа Башҡортостан исеменән сығыш яһайбыҙ һәм республикабыҙҙы сит илдәрҙә таныта алыуыбыҙ менән бәхетлебеҙ.

### Милли моң - гитара ҡылдарында

Бөгөнгө көндә һәр милләттең дә тиерлек үҙенең милли музыкаһын гитара ҡылдарына һалып башҡарған музыканттары бар. Бөтә донъя сәхнәләрендә лә виртуоз гитарасылар башҡарыуындағы милли моң үҙ тамашасыһын таба. Уларҙың милли эшкәртеүҙәге әҫәрҙәрен башҡа музыканттар, студенттар үҙ репертуарына ала. Шулар рәтендә бөгөнгө көндә башҡорт халыҡ көйҙәренең дә үҙ урынын таба барыуы ҡыуандыра һәм үҙемдең ошоға тос өлөш индереүем менән бәхетләмен.

Гитарала уйнау өсөн эшкәртелгән көй-йырҙы маҡсатлы рәүештә һайлап алмайым. Ниндәйҙер көй күңелемә ятты икән, мейелә шунда уҡ уны нисегерәк эшләү тураһында уйҙар ҡайнай башлай. Ҡайһы бер варианттар өҫтөндә оҙайлы уйларға, эшләргә тура килә, сөнки, тәү сиратта, уның камил булып, күңелемдә тыуыуы мөһим. Унан һуң ғына гитара телдәренә күсереп, нотаға яҙып ҡуям. Ә ниндәйҙер йырҙар тиҙ уҡ эшләнә, ләкин был уның сифатына кәмселек килтермәй. Мин һәр бер эшемә етди ҡарайым һәм үҙемдең ижадым өсөн халҡым алдында яуаплы икәнлегемде бер ҡасан да онотмайым. Башҡорт халыҡ көйҙәрен гитарала уйнау өсөн эшкәртеү минә күңел тыныслығы бирә, шуға һәр саҡ ихлас эшләйем. Заказ буйынса башҡарылған эштәремә лә ҙур яуаплылыҡ менән ҡарайым. Минең өсөн үҙем һайлап алған көйҙө гитара өсөн эшкәртеү ҙә, заказ буйынса эшләнелгәне лә берҙәй мөһим, уларҙы айырып ҡарамайым. "Илһам булмаһа, кемдеңдер теләге буйынса ғына ижад итеп булмай", тиҙәр ҡайһы берәүҙәр. Минең өсөн - киреһенсә. Кемгәләр эшемдең кәрәклеген белеү, уның нәҡ ошо көйҙө көтөүе минә илһам бирә.

Башҡорт халыҡ көйҙәрен гитараға һалып, уны сит илдәрҙә уйнауымды кемдер үҙһенеп етмәй. Ошо рәүешле башҡа милли мәҙәниәт, сәнғәт менән ҡушылып, башҡорт моңо юғалмаҫмы, тип хәүефләнеүселәр ҙә бар. Ышаныслы рәүештә был хәлдең мөмкин булмауын билдәләйем. Халҡымдың көй-йырҙарын, милли музыкаһын ниндәй генә илдә кем тарафынан уйналһа ла, уның нигеҙендә ятҡан башҡорт моңо барыбер ишетелә. Уны юйып ташлап булмай. Беҙҙең көйҙәр, башҡа халыҡтарҙыҡы кеүек уҡ, уникаль һәм бер ҡайҙа ла бер нисек тә ҡабатланмай. Әгәр ҙә әлегә тиклем гитара бөгөнгө кеүек билдәле булмаһа һәм ул башҡорт көйҙәре менән күтәрелһә, бәлки, ваҡыт үтеү менән беҙҙең милли музыкабыҙ дөйөмләшеп китер ине. Ләкин гитара күптән фламенко менән танылыу яулаған һәм ниндәй генә халыҡ гитарала милли көйөн уйнамаһын, гитара - испандыҡы, ә көй һәр халыҡтың үҙенеке булып ҡаласаҡ. Шуға күрә башҡорт халыҡ йырҙары өсөн дә ҡурҡырға ярамай.

Беҙгә бер кемгә лә эйәрергә йәки оҡшарға тырышыу кәрәкмәй. Башҡортостан, башҡорт халҡы, уның моңо - бөтөн, уға ҡайҙандыр нимәләр алып ҡушыу мөһим түгел. Шулай уҡ башҡа музыка менән беҙҙең моң араһында аралашсы ла кәрәкмәй, беҙ туранан-тура үҙебеҙ хаҡында, үҙебеҙҙең музыкабыҙ тураһында бөтә донъяға еткерә алабыҙ. Бының өсөн мотлаҡ Мәскәүҙә йәки сит илдә йәшәргә кәрәкмәй. Башҡортостанда ғүмер итеп тә ҙур уңышҡа өлгәшергә була, бары тик тырышлыҡ кәрәк һәм тұҡтамайынса үҫергә ынтылыш булырға тейеш.

### Сараның уңышы - яҡшы ойошторолоуҙа

Күп илдәрҙә булып, ундағы конкурс-фестивалдәрҙең ойошторолоу кимәлен күреп йөрөйөм. Уларҙағы һәм беҙҙәге кимәл - ер менән күк араһы. Сағыштырыу беҙҙең файҙаға түгел. Сит илдәге мәҙәни сараларға әҙерлек эштәре ярты йыл алдан тамамлана. Конкурстар ваҡытында бер ниндәй ҙә ығы-зығы булмай, бөтә нәмә алдан уйланылған, һәр урынға һәм һәр конкурсантҡа яуаплы кеше беркетелгән, нимәләр кәрәк булһа, уларға бер мөрәжәғәтең етә - бөтә нәмә эшләнә. Бер кем дә ҡысҡырынмай, сәбәләнмәй, бошонып, йөҙө болоҡһоп йөрөмәй. Эргә-тирәлә тыныс кешеләр, көләс йөҙлө ойоштороусылар. Аэропортта ҡаршы алыу, ҡунаҡханаға урынлашыу, репетиция - барыһы ла юғары кимәлдә ойоштолола. Концерт алдынан музыкаль инструменттарҙы тикшереү, уларҙы көйләү, беҙҙәге кеүек, сәғәттәр буйы бармай, ә иң күбе 15 минут ваҡытты ала. Ә беҙҙә нисек? Концерт башланырға тора, ә әҙерлек эштәре әле һаман бөтмәгән. Музыканттарға ҡайһы саҡта кәрәкле әйбер эҙләп, магазиндар ҡыҙырырға тура килә. Репетициялар көндәр дауамында барырға мөмкин, сөнки йә тауыш аппараттары көйләнмәгән була, йә яҡтылыҡ менән проблема килеп тыуа, йәки концерт номерҙарын алыштыра башлайҙар. Ә ойоштороусыларҙың тегеләй-былай туҡтамай йүгереүе конкурсанттарға ла тыныс булырға ҡамасаулай. Башҡортостанда ла, Мәскәүҙә лә сара башланыр алдынан конкурсанттарҙың һәм ойоштороусыларҙың тыныс ҡына сәй эсеүен, һөйләшеп ултырыуын күҙ алдына ла килтереп булмай. Аяғөҫтө тороп ҡына бер сынаяҡ сәй эсеп сыға алһаң да бик шәп әле.

Күптән түгел республикала уҙғарылған бер сарала ҡатнашырға тура килде. Концерт булаһы ергә килгәс, беҙгә сәхнә кейемдәрен автобус эсендә кейергә тәҡдим иттеләр. Беҙ алыҫтан килдек, костюмдар таушалған, үтекләп алырға ине, тиеүебеҙгә, нисек бар, шулай кейеп сығығыҙ, тиген яуап алдыҡ. Был нимә? Мин үҙем быны музыканттарға ла, тамашасыға ҡарата ла ихтирамһыҙлыҡ тип ҡабул итәм. Таушалған кейемдә сығып, артист үҙенең бәсен төшөрәсәген дә, уны ошондай ҡиәфәттә күрергә мәжбүр булған тамашасыға ла ойоштороусылар төкөрөп ҡарай. Бындай мөнәсәбәттән һуң ниндәй сифат, яҡшы концерт тураһында һөйләргә була. Минең был һүҙҙәремде "Эреләнгән, ниндәй юғары талаптар ҡуя", тип баһалар. Юҡ, улай түгел. Мин бары тик үҙемдең тамашасым алдында оло яуаплылыҡ тоям. Ул сифатлы музыка тыңлаһын, ә күҙҙәре эстетик рәхәтлек алып ҡыуанһын, тип тырышам, сөнки улар береһен тулыландырып килә. Тамашасыһын яратмаған музыкант, артист ҡына үҙен әрпеш, әрһеҙ күрһәтергә мөмкин.

Беҙҙәге ойоштороу кимәлен күтәреү кәрәклеген һыҙыҡ өҫтөнә алыуым кемгәләр ғәйеп ташларға, яманларға тырышыу түгел. Мин бары тик үҙебеҙҙә лә, сит илдәрҙәге кеүек үк, юғары кимәлдәге мәҙәни саралар үтеүен, республика халыҡ-ара кимәлдәге фестиваль-конкурстарҙы йышыраҡ ҡабул итһен, тигән теләктәмен. Сифатлы тамаша эшләргә, юғары кимәлдә ойоштороу эштәре алып барырға мөмкинлеге булған кешеләр бар беҙҙә. Уларға тик система ҡоршауынан ысҡынырға, ҡалыплашҡан форманан сығырға һәм эшләй башларға ғына кәрәк.

### "Дуҫтарса" йәшәү нимәгә килтерә?

Мин Башҡортостанға ҡайтып йәшәргә, эшләргә теләр инем. Тик... Берҙән, республикала ижад кешеләренә игтибар күберәк булһаһен ине, тигән теләктәмен. Үҙен сәнғәткә бағышлаған ижадсыһының һәләтен файҙаланыу ғына аҙ, уға төрлө яҡлап яҡлау кәрәк, уны аңлау мөһим. Уға үҫергә, һәләтен һәр яҡлап асырға шарттар булырға тейеш. Икенсенән, беҙҙә, яҡшы мәғәнәлә әйткәндә, тәртип юҡ. Был, минеңсә, беҙҙә барыһын да "дуҫтарса", "таныштарса" хәл итеп булыу мөмкинлегендә. Ә юғарыраҡ урында ултырған туғаны булған кешегә, ғөмүмән, бөтә ишектәр ҙә асыҡ. Уның өсөн сират, тәртип тигән төшөнсә юҡ кимәлендә. Киңәйтеп ҡарағанда, кемдендер ошо рәүешле йәшәүе, ошондай ҡыланышы сылбыр кеүек берберенә ялғанып, үҙ сиратында, тәртипһеҙлек тыуҙыра ла инде. Бында айырым бер кеше файҙа ала, ә тотош йәмғиәт зыян күрә.

Беҙҙә власть органдарында эшләүселәр үҙҙәрен батша кеүек итеп тота, тибеҙ. Ҡайһы берәүҙәрҙең, ысынлап та, ҙур урын биләгәс, эске асылының аламалығы, эрелеге тышҡа бәреп сыға. Ләкин күптәр, минең уйлауымса, ябай һәм кешелекле булһалар ҙа, беҙҙең йәмғиәттәге әшнәлектән ҡасып, һауалылыҡ битлеге артына йәшенергә мәжбүр. Субординация төшөнсәһе күптәр өсөн ят. Шуға күрә кемделер һауалыҡта ғәйепләр алдынан йәмғиәттең үҙенә лә әҙерәк тәртип тигәнгә өйрәнергә кәрәк. Һуңғы ваҡытта был системаның үҙгәрә башлауын күрәм. Власть халыҡҡа йөҙ менән боролдо. Халыҡ, үҙ сиратында, был ыңғайлыҡты баһалар һәм күтәргеһеҙ самаһыҙ талаптар ҡуймаҫ, тип ышанам.

### Йәштәребеҙгә һоҡланам

Бөгөнгө йәштәргә "Афарин!", тип әйтер инем. Уларҙа ниндәйҙер эске көс-ҡеүәт бар. Аҡыллы, үҙҙәренә ҡарата талапсан, эшһөйәр булыуҙары менән айырылып тора. Миҫал килтерәм. Мәскәүҙә IT өлкәһендә эшләүсе дуҫым бар. Ул ҙур, мөһим проекттарын тик башҡорт егеттәре менән эшләргә тырыша, сөнки уларға ышанып була, ти. Хатта профессионалдар ниндәйҙер ситуацияла ҡойолоп төшһә йәки артабан эшләүҙән баш тартһа, башҡорт үҙенең ныҡышмалығына барып, эште тамамлап ҡуйыуы менән уны һоҡландыра.

Сәләмәт тормош алып барыусы йәштәребеҙ күбәйҙе, спиртлы эсемлектәргә битарафтар һаны артты. Ошондай башҡорт йәштәре менән ғорурланам һәм уларҙың һаны артыуын теләйем.

Илһөйәрлек көслө башҡортта. Тарихыбыҙҙы белергә, уны тартып алырға йәки уға яңылыш өҫтәмәләр индереүселәргә ҡаршы сығырға ҡурҡмай замана башҡорто. Һәр кем хәленән килгәнсә тыуған республикаһының үҫеше өсөн тырыша, сөнки айырым кешенең бәхетле булыуы тотош илдәге хәлторошҡа бәйле икәнен яҡшы аңлай.

Үҙемдән ошондай теләктәремде еткергем килә. Йөрәгегеҙҙә тыңлағыҙ. Яҡшы мәғәнәлә сәмле булығыҙ. Мейе эшмәкәрлеген һәр ваҡыт тонуста тотоғоҙ, уға ойорға мөмкинлек бирмәгеҙ. Уҡығыҙ, төрлө өлкәлә белемегеҙҙе киңәйтегеҙ. Телдәр өйрәнегеҙ. Әгәр үҙ-үҙебеҙҙе ихтирам итһәк, ситтәр ҙә ихтирамлы булыр. Бер-беребеҙ өсөн ышанысты терәк булһаҡ, кәрәк саҡта таяныр ҡул һуҙа алһаҡ, матур республикала бәхетле йәшәрбеҙ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Бөйөк музыканттар күп. Гитараны ҙур бейеклеккә күтәреп, бөтә донъяға танылған оҫталар ҙа бихисап. Ләкин улар араһында Радмир Муфтахин беҙгә, башҡорттарға, барыбер иң яҡыны һәм яҡшыһы, сөнки уның гитараһы беҙҙең хаҡта "йырлай". Уның тилбер ҡулдары аҫтынан сыҡҡан моң беҙгә сәңгелдәктән таныш һәм күпкә еңелерәк ҡабул ителә. Милли моңдо яңыса яңғыратыусы был һәләтле егеткә артабан да уңыштар юлдаш булһын, ижад ҡомары һүнмәһен, тип теләйбеҙ.**

**Гөлназ МАНАПОВА**
**әңгәмәләште.**

***✓ Ҡыҙыҡ та, рәхәт тә кеүек. Их, кәләшле булһа, нисек йәшәргә белер ине. Эсеүен ташлап, өсәүләшеп - Шома, Федя дуҫтары менән бер эш асырҙар ине әле. Себергә китеп булһа ла ғаиләһен туйындырыр. Бер ул да табып бирһә. И-их!"***



Кесәһенә ике меңде һалып, ихатанан килеп сыҡҡас, үҙен бысраҡ, һаҫыҡ донъянан ҡотолған кеүек тойҙо Рәүеф. Ҡыштырлап торған байлыҡ та күңелен йылытманы. Мәсхәрә, оло мәсхәрә. Ирлегенде Хаммат мунсаһындағы һабынлы һыуға һалып сыҡсы. Ҡаш күҙҙе һаҡлай. Күҙһеҙ әҙәм - нурһыҙ бәндә. Шул нурҙан яҙҙырыуы ләғнәттеҢ. Үҙебеҙ ҙә инде, ике ҡул, ике аяҡ була тороп, эсеп нурһыҙ булып йөрөйбөҙ. Маңлайҙағы тире ағып төшөп, ҡаш урынын, күҙен әсеттерҙе.

"Ҡағыға төшөп булһа ла йыуынып алайым. Былай аларын барып инеп булмай бит инде Фәнилдәргә". Ҡағыға төшкәйне, күңеле тынысланғандай булды. Бит-ҡулдарын йыуып алғас, күҙҙәре асылды, күңеле күтәрелде. Ҡояшта йымйым килеп уйнаған йылғала кемдер һыу ала. Тәүҙә һыуға эйелеп бит-ҡулдарын йыуып алды ул да, шунан яулығын ысҡындырып яңынан иплән бәйләне. Итәген күтәреп эскәрәк үтте лә, биҙрәләрен батырып, ҡара әле, ысынлап та һыу алды. Биҙрәләре менән бергә асыҡ ап-аҡ бот-балтырҙары ла ҡояшта ялтырап китте. Кер-фәлән сайҡарға килгәнме, тиһәң. Ана көйәнтәһен елкәһенә һалды. Бала саҡтағы күркәм бер күренеш ине. Элек бар ауыл ошо йылға һыуын эсте. Хәҙер генә һәр ихатала ҡоҙоҡ. Ҡыҙҙар ҙа, төшкән килендәр ҙә көйәнтә лә күтәрә белмәй. Йылғаға индәренә көйәнтә һалып төшөүселәр һирәгәйҙе шул.

Кем булды икән? Рәүеф ҡалҡынып, шул яҡҡа табан атланы, көйәнтәле ҡатынды танырға тырышты. Еңел бара, һыуҙа йөҙгән аҡҡошмо ни. Һыу ташып өйрәнгән был. Йә, Хоҙай, кем тиһәм, эйе, шул класташы Әлфиә бит был. Йәшлектә аҙашып ҡалған мөхәббәте, әрменән көтөп алмаған хыянатсы. "Юҡ, нишләп хыянатсы булһын, һәр кемдең үҙ яҙмышы", - тип уйлап алды Рәүеф. Яр башынан:

- Исәнме, класташ, - тигән булды. Ҡатын һирпеп кенә ҡарап алды ла:

- Исән әле. Рәүеф һинме? - тип һораны.

- Мин. Таныйһың әле.

- Атлап килеүеңдән үк сырамыттым. Бик үҙгәрмәгәнһең дә, ах, тик мине ғашиҡ иттергән ҡап-ҡара ҡаштарың ҡайҙа?

- Ғашиҡ иттерер ҡыҙҙар булмағас, ҡырҙырҙым. Һинең ҡайтырыңды белһәм, бәлки, крем йә ҡаҙ майы һөртөп сығыр инем дә. - Асыуы килде. Үҙенә лә, ҡашына ла, Хамматҡа ла. Шул ваҡытта Әлфиәнең тап булыуын әйт. Ҡағы буйында хозурланып ултырып бер аҙға ҡаш юҡлығын онотоп та киткәйне шул. Көйәнтәле һомғол ҡатынды күргәс, бөтөнләй баштан сыҡҡан.

- Клоун һымаҡ һин, аҫта - тырпайып торған мыйыҡ, өҫтә - ҡашһыҙ күҙ, - ихлас йылмайҙы үҙе.

- Һыу ташыуҙы онотмағанһың әле. Урамығыҙҙа һыу юҡмы ни?

- Ҡағы һыуын һағындым. Һыу ныҡ тәмле, һауаны һулап туймыш булмай. Рәхәт ауылда.

- Ауылға һеҙ ял итергә генә ҡайтаһығыҙ шул.

- Йә үлгәс, тыуған ерҙе ҡосоп ятырға, тип тә өҫтә. Нимә шул тиклем асыулыһың әле?

Рәүеф Әлфиәнең күҙҙәренә ҡараны ла, ҡапыл өнһөҙ ҡалды. Эйе, бала саҡтағы керһеҙ ҡарашын шәйләне. Эйе, уға яратып баҡҡан, тартай тауышына тертләп китер болан балаһы күҙҙәре. Үсеккән сағында ла күҙенең бер саткыһында барыбер бер йылы нурын һаҡлай алған ҡатын-ҡыҙ ҡарашы. Шул нурҙы ул лә һаҡлай алған, һүндермәгән. Ҡапыл үҙен ҡосаҡлап күҙенән генә үпкеһе килде. Үптерер һинә.

- Асыулы тип, күңелһеҙ.

- Ә минә күнелле. Ташлыйылғала минә һәр саҡ рәхәт. Әйҙә бөгөн класташтар йыйылабыҙ. Һөйләшеп ултырырбыҙ.

- Йыйылыр кеше юҡ. Фәнил - төрмәлә, Шамил - Өфөлә. Ә башҡалар... дуҫтарһыҙ минә ҡайҙа ла күңелһеҙ, - Фәнилде төрмәлә тип белмәй, фаразлап әйтте. Аҙнаға яҡын ҡайтмағас, ҡайҙа булһын, шул полиция ҡулында, тип уйланы. 15 тәүлеккә ултырыуын ул белмәй ҙә ине. Белһә лә, нишләһен.

- Ишеттем. Икебеҙ ҙә бына тигән компания.

- Ирең менән баланды ла эйәртеп сыҡһаң, бөтөнләй һабантуй буласаҡ.

"Әҙәм булып торған була. Кешесә һөйләшәһең, ә ул сағып маташа, - тип уйланы ҡатын. - Мыйыҡ аҫтынан серле йылмайыуы һаман юғалмаған".

Рәүеф, кирећенсә, нимә тип ауыҙ ҡоротоп, мине әҙәмгә һанап һөйләшеп торған була икән, тип фекерләне. Барыбер һыр бирмәйәсәк ул.




Әлфиәгә йөрәге барыбер ҙә наҙлыраҡ телдә һөйләшергә бойора ине.

- Ирем юҡ минең, тиһәм, ни әйтерһең?

Рәүеф ҡапыл телһеҙ ҡалды. Шулай ҙа тиҙ үк яуабын тапты:

- Улайһа, һин ғашиҡ булһын өсөн яңынан ҡаш үҫтерәм.

Әлфиә сылтыратып көлөп ебәрҙе:

- Ҡашһыҙ егеттәргә ҡарамайым да мин. Ултырайыҡмы?

Рәүефтең класташы менән ихлас ултырғыһы килә ине. Тик уның янына буш ҡул менән килеп булмай, аҡса юҡ. Кесәләгеһе Фәнилгә тәғәйен, аҫам тиһәләр ҙә, уға тейәсәге юҡ. Хатта мөхәббәте хаҡына ла. Йыраҡта йылыткан мөхәббәт ҡояшына ҡарағанда янындағы ирҙәрсә дуҫлыҡ уға ҡәҙерлерәк. Шуға тураһын әйтеп яҙҙы:

- Ултырырбыҙ ҙа, тик бер тин дә аҡсам юҡ, кеҫәм тишек. Һинең янына сәскә лә, ҡаплы шоколад тотоп килергә лә рәтем юҡ. Егетлегем самалы.

Әлфиә ни тип әйтергә лә белмәне. Сөнки уның килеүен дә теләй ине, шул уҡ ваҡытта үҙенең ҡәҙерле икәнен дә белгертергә тейеш кеүек.

- Күнелең тишек түгелдер әле. Теләгең булһа, ҡояш байығас һыҙғырырһын.

- Атайың пистолеттан атмаҫмы һуң? - Полицай Нурисламдың оло ҡыҙы ине Әлфиә, шуға төртөрөүе.

- Енәйәтсе булып килмәһәң, атмаҫ, - тип ҡуҙғалды ҡатын. Уның ҡалҡыу күкрәктәренә, йоморо осаларына ҡарап, ауыҙынан һыу аҡты Рафаның.

Был хәл бик уйға һалды егетте. "Иренән айырылып ҡайтҡан, тимәк. Бер ҡыҙы бар ине. Күңелгә өмөт уты тоҡандырҙы был оҙон сәс. Юҡҡа түгелдер әле. Нишләргә? Барырғамы, юҡмы? Бындай мөмкинлек тағы ҡасан була әле. Ә бәлки? Теләге булһа, балаһы менән алырға риза уны Рафа. Кем генә йөш саҡта хаталанмаҫ. Ҡуйы ҡашына ғашиҡ инем, тей ҙәһә. Ҡыҙыҡ та, рәхәт тә кеүек. Их, кәләшле булһа, нисек йәшәргә белер ине. Эсеүен ташлап, өсәүләшеп - Шома, Федя дуҫтары менән бер эш асырҙар ине әле. Себергә китеп булһа ла ғаиләһен туйындырыр. Бер ул да табып бирһә. И-их!"

Барырға кәрәк, барырға. Тик буш ҡул менән тағы... Ни ғүмер ҡалала йәшәп сәмәй эсмәйҙер Әлфиә, уға шарап кәрәк, уныһы бик ҡыйбат, үҙе өс шешә сәмәй хаҡы. Эргәһенә емеше, шоколады. Юҡ, тағы Хамматҡа барып баш эйеп булмай, бирмәйәсәк тә. Әлфиәһеҙ ҙә ҡалғы килмәй, кейәүгә үк сыҡмаһа ла, бер тапҡыр ғына үпһә лә, исмаһам. Ғүмерлек хыялы ла инде. Әрмегә тиклем тотҡолап, ҡосаҡлап маташҡыланы инде. Тик эште һис ҡасан ҙурға ебәрмәне.

Ымындыра, әлбиттә. Аҡса барлыҡҡа бар ҙа. Кесәһенә ҡулын тығып ҡараны, ята ике йөшел ҡағыҙ кисәге шытырлап. Яңынан ҡулын тартып алды. " Һун булмаҫ борон тиҙерәк аҡсаны Фәрит ағайға алып барып бирәйем. Аҙаҡ күҙ күрер. Бөгөнгә үҙемдекенән бигерәк Фәнилдең яҙмышы ҡәҙерлерәк".

Ихатаһында салғыларын рәтләп маташҡан Фәрит ағай аҡсаны алманы, ана, Сәлимә апайына индереп бир, тине.

Хужабикә тартынып ҡына алды.

- Мәшәҡәтләнмәһәң дә... Үҙеңдә лә юҡ бит инде, эй, был эшһеҙлек.

- Ҡалаға сығып йөрөп килһәмме, тип һалып ҡуйған бар ине, - тип алданы. - Табылыр әле. Көҙ булһа, күберәк тә килтерергә булыр ине лә, - үҙенсә хәлдәренә ингеһе килде. - Ҡышлаған өс быҙау ҙа бар, әле йәй башында уны һатыуҙан фәтеүә юҡ.

Ысынында һатһа һатыр ҙа ине, оҙон ҡышты сығып йәшел үләнгә морон төрткән малҡайҙарын йәлләне. Атаәсәһенең күҙ терәп торған байлығы ла, йыуаныһы ла, татлы мәшәҡәте лә шул.

- Юҡ, юҡ, ауыл халҡы ана былай ҙа ярҙамынан ташламай. Был ваҡытта мал тотоноп ни...

- Тейешле сумманы йыя алырбыҙмы икән, Сәлимә апай? - Рәүеф мөлдөрәп ҡараны.

Шул һорауҙы ғына көткән тиерһең, әсә кеше ҡулын альяпҡысына һөртөп, өҫтәл артына барып ултырҙы. Йөҙө бермә-бер асылып китте.

- Һөйләһәң һуҙ инде, хәсрәттән дә илайым, шатлыҡтан да түгеләм, тигәндәй, - тип һөйләп алып итте әсә кеше. Рәүеф уны ихлас тыңланы. Бүлдермәне. Ҡайғыға сумып йөрөгән ҡатындың кемгәләр эсен дә бушатҡыһы килгәндер. Шамил менән Рәүефте үҙ улы кеүек һәр саҡ (иҫерек саҡтарында ла) яҡын күрҙе ул. - Фәнилде алып киткәндән бирле өйҙән кеше өҙөлгәне юҡ. Һәр беренә хәлебеҙҙе белергә килә, ниндәй ярҙам кәрәк, тип һорай. Ул тиклем аҡсаны ҡайҙан табырбыҙ тип уйылыр сиккә еткәйнек тәһә. Тәүҙә Мостафа ағай ете мең ҡалдырып киткән, Нурислам да мул ғына өлөш сығарҙы, уҡытыусылар эш хаҡтарының ун процентын йыйып тапшырҙы. Үҙем, кәрәкмәй, ҡайтарырбыҙ, тигән булам да, нужа һинең теләккә ҡарап торамы һуң. Зарураттан инде барыһы ла. Хатта мәрәкәсе Гәрәй ҙә, Гитлерҙең артына шап итеп типкән тишек быймамды баҙарға алып барып һатып, Фәнил ҡустының быҒауын сисергә, тип аҫҡыс алып килдем әле, тип бер мең ҡалдырып киткән булды, бахырҡай. Эй, бигерәк арыу икән үҙ ауылым кешеләре, шул Гәрәйҙең өҫтөнә кейгән кейемен ҡара һуң. Урамға сыҡҡыһыҙ бит. Кәрәкмәй, тип ҡарайым, һин нимә, мин дә Ташлыйылғаның бер кешеһе, мин дә шул зыяратҡа барып ятам, тип тәҡи өҫтәлгә һалып сығып китте. Күрше-тирә лә, артып бармаһа ла, бар әле, бар тип, бүлеште. Бейәһе хаҡы менән бергә ҡырҡ-ҡырҡ биш меңгә яҡын иғәнә йыйылды. Тағы ла егерме меңде тапһаҡ... Йән биргәнгә йүн бирер әле, тим.

- Сауҙагәр Хамматтан һорап ҡараманыҒыҙмы, уныҡы барҙыр, бай ҙаһа, - юрамал бирҙе был һорауҙы Рәүеф. Үҙенең күҙ алдына сауҙагәрҙең меҫкен йөҙө килде. "Алтмыш мең бирергә риза ине лә".

- Бөтөнләй сара ҡалмаһа, үҙем генә барып һорамаһам. Фәрит, йөрөмә, сәмәй һатып, кешеләрҙең аңын томалап харамдан йыйылған аҡсаһы кәрәкмәй, ти. Был саҡта харам тип ҡарап тормайһың инде.

- Әл дә генә Хамматтан алып торҙом, тип әйтмәгәнмен тип уйлап алды Рафа. Башҡа сәбәп тә бар икәнен ул башына ла килтермәне, белмәй ҙә ине. Бынан утыҙ - утыҙ биш йыл элек ғүмерҙә леспромхозда бер көн дә эшләп ҡарамаған һатыусы нәҫеләнеп булған Хамматтың йәш саҡта Сәлимәгә бик тә ғашиҡ булып урларға йөрөүе лә, Ситдиҡ ҡарттың браконьерҙар нәҫеле тип уға ҡыҙын бирмәүе лә, Сәлимәнең егәрле Фәритте һайлауы ла ҡуптәргә бөгөн оло сер ине. Фәриттең, йөрөмә, тип тыйыуында бына ошо тарҡылашыу ятмай инеме икән?

Сәлимә апай ҡапыл һикерел торҙо.

- Әстәғәфирулла, ҡарап-ҡарап ултырам да, һинең дә ҡашың ҡырылған түгелме һуң?

- Аҡты ҡаранан айырыр өсөн ҡашты ҡырып ҡараным. Күҙ һәйбәтерәк күрһен өсөн.

- Ысынлап, нимә тип ҡыраһығыҙ шуны, әйт әле дөрөҫөн.

- Мода шулай, - тигән булды. Шунан өҫтәне. - Кем эшһеҙ - шул ашһыҙ ҙа, ҡашһыҙ ҙа.

- Бына һинә, мә. Шәп мода. Былай булғас, ауылыбыҙ бөтөнләй ҡашһыҙ ҡаласаҡ икән.

- Ҡашһыҙ итмәҫкә кәрәк ине лә.

Фәрит ағай янына сыҡты Рәүеф. Уныһы Шамилдың хәлен һораны. Ни әйтергә белмәгәс:

- Хәле һәйбәтләнгән. Нәзирә апай , оҙаҡламай ҡайтыр ҙа әле, тип тора, - тигән булды. Ҡайҙан хәлен белһен, ни аралашыр сараһы юҡ, ни барып ҡына ҡайтыр ер түгел. Баш ҡала йыраҡ бит. Ҡайтканын ғына көтәһе ҡала.

- Фәнил умарталарҙы айыу ғына туҙҙырып ҡуймаһын, тип борсола ине. Иртәгә умарталыҡҡа барып ҡарап килерһең әле, - Фәрит ағай хәстәрлекле ҡарашын уға төбәне. - Бынау ике дөңгә лә бәйләп китһәң, тамғалы ҡарағастарҙы күрерһең унда. Һәнәк тамғаһы. Барғаның бар ҙа инде. Улай бауыр баҫып эшләр эшең юҡтыр?

- Юҡ, ике ҡулым да буш.

- Үҙем иртәгә район үҙәгенә сығайым тим. Банк тирәһен ҡараштырайым, әҙерәк етмәй тора. Тик ат юҡ минең хәҙер, Шамилдың алашаһын егеп маташмаһаң.

**(Дауамы бар).**

АФАРИН!

**Режиссер Булат Йосоповтың "Беренсе Республика" тарихи нәфис фильмы экрандарға сыкты. 17 марттан уны Өфөнөң һәм республика ҡалаларының ҡайһы берҙәрендә күрергә мөмкин буласаҡ. "Беренсе Республика" һуңғы йылдарҙа төшөрөлгән картиналарҙың иң көтөп алынғаны, тиһәк тә хата булмаҫ. Ҙур мөмкинлектәр мәле тип иҫәпләнә тарихта фильмда һүрәтләнгән осор. Һәләтлеләр осоро, халкын ярата белгәндәр осоро…**



# БЕРЕНСЕЛӘР МӘЛЕ

Рәсәй тарихындағы килешеүҙәр нигеҙендә барлыҡҡа килгән һәм юридик йәһәттән беренсе совет автономиялы республикаһы булған Башҡортостандың сәскә атҡан мәле. Һәләтле, белемле башҡорт улдары һәм ҡыҙҙары фән, мәҙәниәт үҫешенә көсөн йәлләмәй. Фильм тап улар хаҡында. Дәрәсәрәге, уларҙың ошо дәүер һәм дәүләт биргән мөмкинлектәрҙе халыҡ мәнфәғәтендә ҡуллана белеүе тураһында. Ғәзиз Әлмөхәмәтов башланғысы менән ауылдарҙан йыйып алынған һәләтле йәштәр Мәскәү консерваторияһында белем алып ҡайтып, 1938 йылға опера театрының төп көстәрен тәшкил итә. Ғабдрахман Хәбибуллин, Хәбир Ғәлимов, Бануы Вәлиева, Зәйтүнә Илбаева, Шәһиҙә Вәлиәхмәтова һ.б шулар рәтенән. Хөсәйен Әхмәтов башта вокал класында шөғөлләнә, әммә уның композиторлыҡ һәләте асыҡланып, ошо йүнәлештә лә белем ала. Фильмда Ғәзиз Әлмөхәмәтов уларға: "Мин һеҙгә ышанам", - тип юҡҡа ғына әйтмәй. Ысынлап та, Мәскәү дәүләт консерваторияһының башҡорт студияһында, Ленинград хореография училищеһының башҡорт бүлегендә, Ваганов училищеһында, Башҡорт театр училищеһында белем алыусылар башҡорт милли мәҙәниәтенә нигеҙ һала. Кинола исемдәре яңғырап киткән Зәйтүнә Насретдинова, Тамара Хоҙайбирҙина һәм тағы ла әллә күпме шәхестәрҙең ижад шишмәһе башланғысында Ғәзиз Әлмөхәмәтов тора. М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрына нигеҙ һалыусы, уның директоры һәм художество етәксеһе булған Вәлиулла Мортазиндың милли театр һәм башҡорт фольклоры нигеҙендә уның репертуарын булдырыуы, театр өсөн артистар тәрбиәләүҙәге эшмәкәрлеген баһалап бөтөп буламы? Уның сағыруы буйынса Мәскәүҙә уҡып һәм театрҙа эшләп йөрөгән еренән Өфөгә ҡайтыусы Мәкәрим Мәһәҙиев иһә тарихҡа "милли театр реформаторы" булараҡ инеп ҡала. Яҙыусы, тел белгесе Ғабдулла Амантаевтың, яҙыусы Дауыт Юлтыйҙың, йәмәғәт эшмәкәре Ғөбәй Дәүләтшиндың хеҙмәт биографияһында ниндәй генә вазифалар юҡ. Был шәхестәр тураһында әллә күпме һөйләргә һәм, әлбиттә, һәр беренеһе тураһында айырым кино төшөрөргә мөмкин булыр ине.

Заманына күрә генә түгел, заманынан күпкә алда бара алырлыҡ сифаттарға һәм белемгә эйә ошо шәхестәрҙең демократик лозунгыларҙан дәртләнеп, үҙҙәре үк тыуҙырған революцияның, партияның, идеалдарының, хыялдарының үҙ баштарына етәсәгенә ышанмауы бөгөнгө тамашасыға аңлашылып та етмәҫ. Улар партияға, ошо идеяларына аҙаҡҡаса тоғро ҡала. Халҡына ла. Сирле көйө тотҡонлоҡ бәләләрен кисереп, ҡайтҡас, үҙ замандаштарының битарафлығына дусар ителгән Һәҙиә Дәүләтшина һуңынан, минең партиям ғына бар, ул мине ҡасан да булһа аңлаясаҡ, тип яҙа. Унан һуң, Дауыт Юлтыйҙың ҡыҙы Нинель Юлтыеваның хаттарында ла ата-әсәһен ошондай яҙмышҡа дусар иткән илгә ҡарата бер асыу ҙа юҡ.

Фильмдың бөгөнгө түгел, ә ошо шәхестәр күҙлегенән төшөрөлөүе уны шул тиклем яҡтылыҡҡа, өмөткә тулы итә. Ғәйепләрҙе эҙләү ҙә, кемгәлек ғәйеп ташлау ҙа юҡ унда, бары яҡты киләсәк кенә бар. Шулай уҡ фильмдың тамашасыла йәлләү тойғоһо уятырлыҡ деталдәргә ҡоролмауы уны юғары күтәрә. Юғиһә, шәхестәргә бәйле әллә күпме трагедияларҙы күрһәтергә мөмкин ине. Беҙ бында ҡапма-ҡаршылыҡлы осорҙо ошо геройҙар менән бергә йәшәйбеҙ генә. Шулай уҡ 1937 йылдың иң ҙур трагедияһы - балалар яҙмышына төшкән һынауҙар. Ғабдулла Амантаевтың ейәне, Башҡортостандың халыҡ артисы Рафаэль Амантаев, ошонда күрһәтелгән балалар өсөн рәхмәт һеҙгә, тип бушҡа әйтмәне. "Беренсе Республика"ла уларҙың яҙмышы тураһында ла бер аҙ мәғлүмәт бар.

Актерҙар эше тураһында әйткәндә, был картина милли сәнғәтте матур эштәр менән байытты. Рафиҡ Хәсәнов (Ғ. Әлмөхәмәтов), Рәмзил Сәләмәнов (Д. Юлтый), Руслан Хайсаров (В. Мортазин), Фәнил Толонғужин (Ғ. Амантаев), Артур Ҡунаҡбаев (М. Мәһәҙиев), Роберт Йылҡыбаев (Ҡ. Аҙнабаев) һ.б. - ошо шәхестәрҙең яҙмышын йәшәй алыуҙан тыш, уларҙың эске рухын күрһәтә алыуы менән һәләттәрен тағы бер тапҡыр раҫланы. Ә ҡатын-ҡыҙ образдары ниндәй! Башҡортостандың халыҡ артисы Рушана Бабичтың (З. Бикбулатова), Лилиә Исҡужинаның (Һ. Дәүләтшина), Зиләрә Юлтыеваның (М. Әлмөхәмәтова), Гөлназ Мөхәмәҙиеваның (Ф. Юлтыева) һәм, әлбиттә, Рената Крицкаяның Нинель Юлтыеваһы тураһында күп һөйләнәсәк әле. Тормош бер ҡасан да еңел булмаған. Тик заманына, иҫкән елдәргә ҡарамайынса, халҡыңды гел яратырға, уға хеҙмәт итә белергә кәрәк. Был фильм ошо турала ла.

**Ләйсән НАФИҠОВА.**

ТӘҮБӘ

# ҠОТОЛАЙЫҠ...

## иблис ҡотҡоһонан

### Дүртенсе һабаҡ - бик күп аҡланыуҙарҙан ҡотолоу

Психология фәнендә кешенең был һаҡланыу механизмы рационализация тип атала. Кеше һәр бер ҡылығына аҡланыу табырға тырыша. Үҙенең холҡон, ҡылыҡтарын яһалма рәүештә үҙе өсөн матур итеп күрһәтергә маташа. Һанай китһәң, эскән кешенең аҡланыуҙары бик күп. Эскелек ҡоллоғона бирелгән һайын, ул яңы аҡланыу табырға тырыша. Үҙе алдында, шунан ғаилә алдында, эшендә, туған-тыумасаһы, дуҫ-иштәре ҡаршыһында. Иң киң таралған аҡланыу, әлбиттә, "Бер мин генә эсмәйем".

Конформисбыҙ шул. Шулай тәрбиәләнгәнбеҙ, шулай тәрбиәләйбеҙ. Әлек бит айырым шәхес мәнфәғәтенә ҡарағанда, йәмғиәт мәнфәғәте алғараҡ ҡуйылды. Һәр ваҡыт "ура!" ҡысҡырып, күмәкләп, биш йыллыҡ пландарҙы үтәнек. Рәттән ситкә сығып ҡына ҡара - һин диссидент, йә булмаһа, һуңғы сиктә, психик ауырыу. Башҡалар артынан һарыҡ кеүек эйәреп йөрөп, конформистарға әйләнгәнебеҙҙе үҙебеҙ ҙә һиҙмәнек.

Рәттең нимә икәнен армияла хеҙмәт иткәндәр яҡшы белә. Унда шәхес өсөн урын юҡ. Бер маҡсат, бер йүнәлеш, бер ритм, бер тиҙлек. Ҡолағың, локатор кеүек, командирҙың бойороғон ишетеүгә генә көйләнгән. Эсә башлауҙың сәбәбе лә ана шул конформизмда бит. Шәхес булараҡ формалашып етмәгән үҫмер башҡаларҙан айырылмаҫ өсөн тота тәүге рюмкаһын.



Үткән быуаттың 1986 йылында Мәскәүҙә булдым. Әлеге шул етешһеҙлек. Яҡын-тирәлә булмағас, "Жигули"ға тәгәрмәстәрҙе баш ҡаланан алып ҡайтырға тура килде. Ҡыҙыл майҙан эргәһенән үткән сакта таксистан:

- Мавзолейҙа булғанығыҙ бармы? - тип һорай ҡуйҙым.

- Нинә, әллә мин мәйет күргәнем юҡмы? - тип яуапланы Мәскәү кешеһе.

Минең тиҫтерем, минең кеүек совет мәктәбен тамамлаған кеше. Белмәйем, алдынғы ҡарашлы таксист булдымы ул, әллә шул ваҡытта уҡ үҙәктә демократия еле көслөрәк иҫә башланымы икән? Ни тиһәң дә, конформизмдан ҡотолмайынса булмай яңыса йәшәргә теләүсегә. Һүҙ бында ағымға ҡаршы барыу тураһында бармай, үҙ фекереҥ булыу, үҙеңде шәхес булараҡ хөрмәт итеү тураһында бара. Был тарих сүплегенә дөйөм ағым менән бергә ағып китмәҫ өсөн кәрәк.

Аҡланыуҙарҙы дауам итәйек:

- мин ҡунаҡта ғына эсәм;

- беҙ түгел, әбейҙәр эсә, йөн иләгән аҡсаға;

- эсеүем эшемә зыян килтермәй, хатта...;

- дарыу өсөн генә эсәм;

- элек беҙҙең халыҡ аш һендереү өсөн әсегән ҡымыҙ, бал эскән, хәҙер ҡымыҙ булмағас, араҡыға көс төшә инде;

- эсһәм, еңел булып ҡала;

- һыныҡ яҙҙырам;

- үҙ нормамды беләм;

- эсеү аралашыуҙы еңеләйтә;

- тормош ауыр, шуға эсәм, эсһәм, онотолам;

- мине бер кем дә аңламай;

- башҡаларға ҡарағанда (башҡаларҙы, үҙеңдән түбән башҡаларҙы һәр саҡ табып була) мин әҙерәк эсәм бит;

- бер эскәндән, ни булыр тиһең;

- бөгөн һуңғы тапҡыр тотам;

- эсһәм дә, мин алкоголик түгел һ.б., һ.б.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Эсмәгән кешегә аҡланыу тигән был һаҡланыу механизмы бөтөнләй кәрәкмәй. Аҡланыу - көсһеҙҙәр эше. Эсеүҙе ташлағас, яйлап-яйлап ҡына күҙә турая, ҡараштар үткерләнә, фекерләү үҙгәрә. Үҙеңде шәхес итеп тоя башлайһың. Был донъяла үҙеңдең буш ҡыуыҡ түгел икәнеңде, башҡаларға файҙаң тейеүен аңлайһың. Тик ашығырға ярамай. Бер көндә, бер айҙа, хатта бер йылда ла күҙгә күренмәгән үҙгәрештәр булмауы ихтимал. Сабыр булырға, булғанына шөкөр итергә кәрәк.**

**Тормошта позитив фекерләү бар, шулай булғас, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, негатив фекерләү ҙә була шул инде. Аҡ булғас - ҡара, көн булғас - төн була, тигән кеүек.**

**Кеше уй-фекереһеҙ йәшәй алмай, ана шул фекерләү ҡеүәһенә ҡарап, тормошҡа ҡараш формалаша. Кеше булараҡ, шәхес булараҡ, үҙ баһаңды, үҙ ҡәҙереңде белеү өсөн позитив фекерләү зарур. Икенсе төрлә әйткәндә, тормошҡа айыҡ ҡараш менән ҡарарға, комплекстарҙан арынырға тырышырға кәрәк. Эсеүҙе ташлағас, ана шул мөмкинлектәр киңәйә.**

**Моратҙым ӘХМӘТОВ.**

**(Дауамы.**

**Башы 5-7,9-сы һандарҙа).**

✓ *Эшҡыуарға хас төп сифат - ныҡышмаллыҡ. Тәүге уңышһыҙлыҡтан һуң уҡ башлаған эшеңә ҡул һелтәп ҡуйырға ярамай. Миҫалға Сибай ҡалаһын алғанда ла, бөтә сауҙа нөктәләре ситтән килгәндәр ҡулында хәҙер.*



ИНТЕРНЕТТАН



# ВАҠЫТ АҒЫШЫ ТИҘӘЙҘЕМЕ?

■ Иллинойс университеты белгестәре асыҡлауынса, бургер, пицца кеүек сәләмәтлек өсөн зыянлы ризыҡтар йөрәк-ҡан тамырҙары системаһында үҙгәрештәргә килтерә. Ҡан тамырҙары һығылмалылығын юғалта. Ғалимдар ике төрлө тикшеренеү үткәргән. Уларҙың икеһе лә был ризыҡтарҙың зыянлы булыуын дәлилләгән. Тәүгеһе мәлендә бер төркөм ҡомаҡтар сәләмәт ризыҡ менән туҡланған, икенсе төркөм фастфуд ашаған. Икенсе төркөмдә ҡан тамырҙары тиҙ арала һығылмалылығын юғалтҡан. Шуныһы ла бар, күҙәнәк мембранаһын кире яҡҡа үҙгәртеү өсөн модалы бургерҙарҙы һирәк кенән ашау ҙа етә.

■ Ваҡытты тойоу субъектив характерҙа һәм шарттарға ҡарап, үҙгәреүе ихтимал. Мәҫәлән, кешегә күңелле икән, ваҡыт та тиҙ үтә. Эсең бошҡан мәлдәрҙә секундтарҙы һанап арыйһың. Ғалимдар билдәләүенсә, ваҡытты тойоу күтәү тойғоһо менән дә бәйле. Баш мейеһе хәҙер нимәләр буласаҡ тип күтә һәм бында "горизонт" тигән төшөнсә мөһим. Китапта, мәҫәлән, һәр һөйләмдең аҙағы "горизонт". Беҙ ошо горизонттарҙы нисек ҡабул итеүебеҙгә ҡарап, ваҡыт йә тиҙ үтәсәк, йә һуҙыласаҡ. Мауыҡып уҡыған саҡта мейе "ҙур картина"ны күҙаллай һәм яҡын "горизонт"ты ғына түгел, алыҫын да күрә. Кешегә күңелһеҙ икән, ул яҡын "горизонт"ты ғына күҙ уңында тота. Улар бер бөтөнгә берләшмәгәс, ваҡыт та түҙгеһеҙ яй үтә. Тиҙлек менән бәйле тағы механизм бар. Ниндәйҙер эш эшләгән мәлдә мейенең күҙәнәктәре бер-береһен әүҙемләштерә һәм улар үҙ-ара селтәр барлыҡҡа килтерә. Был селтәр ни тиклем тиҙерәк барлыҡҡа килһә, ваҡыт тиҙерәк үткән һымаҡ. Етмәһә, дофамин бүлеп сығарыусы нейрондар ваҡытты ҡабул итеү менән бәйле. Әгәр кеше күңел аса икән, был күҙәнәктәр әүҙемерәк һәм күберәк дофамин бүлеп сығара һәм мейегә ваҡыт тиҙерәк үткән кеүек. Әле генә булған хәтирәләрҙе кодҡа һалған нейрондар тығыҙыраҡ була. Шуға ла беҙҙең менән ҡасандыр булған ваҡиғаларҙы хәтерләгәндә улар оҙаҡ дауам иткән кеүек тойһо ҡала. Мәҫәлән, беҙ бала саҡта йәйге бер генә көн дә оҙаҡ һуҙылған кеүек.

■ Бауыр өсөн иң файҙалы йәшелсә - ул томат һәм унан яһалған ризыҡтар, тип белдерә Тафтс университеты ғалимдары. Томаттар антиоксидант - ликопинға бай. Был берләшмә ниндәйҙер сәбәп менән зарарланған ҡан тамырҙарына үҙ функцияларын тергеҙергә мөмкинлек бирә. Шундай эксперимент үткәрелә: ҡомаҡтарға ликопин өҫтәлгән порошок бирәләр. Шул уҡ ваҡытта, бауырҙың хроник сирҙәре үсешенә килтергән шарттар тыуҙырыла. Бәхетіһән, ликопинлы порошок бауырҙы май бөрөүҙән, бауыр яман шешенән һаҡлай икән, ул төрлө бактериаларҙың үсешенә сик ҡуя. Ҡыҙыҡ, әммә томат порошогы таҙа ликопинға ҡарағанда файҙалыраҡ булып сыҡҡан. Бәлки, томат составындағы минераль матдәләр, фенол берләшмәләре, күҙәнәклек ликопинды үҙләштереүгә ҡамасаулайҙыр. Әйткәндәй, ликопин гуава, ҡарбуз, грейпфрут, папайя һәм ҡыҙыл татлы бороста бар, әммә томаттарға ҡарағанда аҙыраҡ күләмдә.

■ Йоҡоноң оҙайлығы сәләмәтлек торошон билдәләй. Бында йоҡоноң сифаты мөһим. Яҡшы итеп йоҡлау баш мейеһенә төрлө "сүпсар"ҙан таҙарыныу өсөн кәрәк. Йоҡо яҡшыраҡ булған һайын, глимфатик система һәйбәтерәк эшләй. Альцгеймер ауырыуы тап ошо сүптәр йыйылыуҙан барлыҡҡа килә лә инде.

ЭШҠЫУАРЛЫҠ МӘКТӘБЕ

# ҮҘЕБЕҘ ЕТЕШТЕРГӘНДЕ...

## үҙебеҙ ҡулланып йәшәйек

**Сибай ҡалаһынан эшҡыуар Илшат ХӘСӘНОВ менән "Бөтәһе лә үҙ эшен аса аламы һәм ни өсөн баҙарҙа башҡорттар етештергән продукция һирәк?" тигән һорауға яуап эҙләнек.**

➔ **Һеҙ бик күптән шәхси эш асҡан кеше, ниндәй өлкәлә эшләйһегеҙ?**

- Ғүмер буйы тип әйтерлек мебель яһау эше менән шөғөлләнәм. 2005 йылда асып ебәргәйнем үҙ эшемде. Шунан бирле корпуслы мебель яһап һаттым, оҫта ҡуллы ирегеттәрҙе эш урыны менән тәьмин иттем. Йылдан-йыл халыҡтың иҡтисади хәле хөртәйә бара - кредитка батып бөттөләр, тулай алыу һәләте ныҡ кәмене. Тәүҙә кеше тамағын ҡайғырта, шунан аҡсаһын һалымға, коммуналь хеҙмәт өсөн түләүгә, балаларын уҡытыуға тыға. Мебель ҡайғыһы, әлбиттә, артҡы планға күсте, шуға был эшемде ябырға мәжбүр булдым. Әлеге көндә минең кеүек хәлдәге эшҡыуарҙар менән кооперативтарға ойошоу тураһында кәңәшләшеп, Сибай ҡалаһы һәм Баймаҡ районы территорияһында ҙур проект эшен тормошҡа ашырайыҡ тип дәртләнеп йөрөйбөҙ, йәғни этноагрокомплекс төҙөү хыялы менән янабыҙ, үҙебеҙҙең төбәккә хас кәсептәрҙе сағылдырған комплекс булдырмаҡсыбыҙ. Туристар ошондай турбаза эргәһендәге производство, умарталыҡ, һөт фермаһы, ит фермаһы, крәҫтиән фермерлыҡ хужалыҡтарында үҙ ҡулдары менән кәзә һауып, сыр һәм ҡорот эшләп, умартаны асып бал һалып алып, балыҡ тотоп ҡарап, күңеленә ятырҙай шөғөл менән булһа, ҡыҙыҡ буласаҡ бит. Киләсәктә был проектты тормошҡа ашыра алырбыҙ, тип уйлайым.

➔ **Ауыл ерендә эш юҡлыҡҡа зарланалар, быныһ менән килешәһегеҙме?**

- Юҡ, ниҙер эшләп ҡарарға ялҡауы килгән кеше генә шундай хәбәр таратыуы ихтимал. Эшләйем тигән кеше шөғөлөн таба. Хатта урманға сығып, миндек бәйләп, йә дарыу үләндәре йыйып һатып булһа ла аҡсалы булырға мөмкин. Ундайҙарҙы ла беләм, ҡайһы берәүҙәр шул юл менән һәйбәт аҡса эшләй. Ғөмүмән, эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнә башлаыҡ икән, балаларға ла ул эште өйрәтергә, быуындан-быуынға тапшырырлыҡ бизнес төҙөргә кәрәк. Көнбайыш Европала кеше ни өсөн матур йәшәй? Сөнки унда улы атаһы, олатаһы башҡарған бер үк эште дауам итә: сыр эшләй, икмәк бешерә, күндән әйбер тегә. Улар үҙ өлкәһендә шул тиклем оҫталар, быуындан-быуынға шул белемен тапшыра баралар. Ә беҙҙә ундай йола онотолған.

➔ **Беҙҙә, Европа кешеләре кеүек, атаһынан улына тапшырырҙай ниндәй кәсеп менән шөғөлләнергә мөмкин?**

- Донъябыҙ шулайға әйләнде, булған нәмә бер ҡулланып ташлауға ғына етә. Элек бит улай булманы, һауыт-һаба әсәһенән ҡыҙына ҡала, кейеме балаларына күсә ине. Бына шундай сифатлы әйберҙәр етештерергә кәрәк. Нимә булһа ла, ғаилә бизнесында беренсе урында сифат торорға тейеш. Мәҫәлән, ошо һеҙҙең бүлмәләге мебелдә алғанда ла, ул ДСПнан, опилка һәм елемдән эшләнгән, бер тапҡыр һыулалһа, ул эшлектән сыға. Уны ағастан ныҡлы итеп эшләргә була. Юҡһа, беҙ урмандағы ағасты киҫеп, бер һумға ситкә һатабыҙ ҙа, унан йөҙ һумлыҡ тауарға әйләндереп, килтереп үҙебеҙгә һаталар. Шул ағас-таштарҙы үҙебеҙ эшкәртһәк, исмаһам, мәнфәғәтен күрер инек. Шулай уҡ башҡа өлкәлә лә ата-бабаларыбыҙ тәжрибәһен, кәсептәрен иҫкә төшөрөп, уңышлы ғына эш ойошторорға була, тип иҫәпләйем, башын эшләткән кешегә аҡса аяҡ аҫтында. Башҡорт балаҫтары, милли кейем-һалым, милли аш-һыу, һауыт-һаба, эйәр-йүгән, малсылыҡ, ҡортсолоҡ булһынмы, ғаилә менән атҡарылрлыҡ әллә күпме шөғөл табырға була беҙҙең халыҡта. Ир-егеттәребеҙҙең шуны аңламауына, ҙур аҡса эҙләп, Себерҙә йөрөп интегеүҙәренә, кредит тотконлоғона батыуҙарына аптырайым.

➔ **Башҡорттар араһында эшҡыуарҙар һирәк булыуҙың сәбәбе ниҙә?**

- Ҡағыҙ эше күп бит, әллә күпме йүгереп йөрөргә кәрәк. Беҙҙең егеттәр кәрәкле ишектә бер тапҡыр шаҡыйҙар ҙа, тейешле ҡағыҙҙы ала алмаһалар, башҡаса был ишеккә яҡын да килмәйҙәр. Эшҡыуар кешегә ныҡыш булырға кәрәк.

➔ **Республикала шәхси эшҡыуарҙарға дәүләт тарафынан ярҙам бармы?**

- 2013 йылда Сибай ҡалаһындағы бизнес-инкубаторға барып, шундағы белгестәр менән кәңәшләшеп, документтарҙы дөрөҫ тултырырға өйрәнеп, 300 меңлек грант оттом. Был минең өсөн бик ҡыуаныслы һөҙөмтә булды, сөнки яңы эш ҡорамалдары һатып алыңды, күберәк отһам, үҙемдең цехымды ла төҙөй алыр инем. Сибайҙа бит ҡуртымға бина алыу ҡиммәт. Ошондай дәүләт ярҙамының тәрҙәре күп, бында ла ныҡышмаллыҡ күрһәтеү мөһим.

Ә шулай ҙа дәүләт ваҡ бизнес менән бигүк ҡыҙыҡһынмай, беҙҙә эре бизнес ҡына үҙен иркен тота. Иҫегеҙҙәлер, элек бәләкәй генә аҙыҡ-түлек магазиндары бик күп ине, бигерәк тә Сибайҙа улар бөтә биналарҙың беренсе ҡатында урынлашып бөткәйне. Берәүһендә һөт аҙыктары һәйбәт, икенсеһендә икмәк тәмле, өсөнсөһөнән сифатлы ит аҙыҡтары алырға була ине. Ә бөгөн ундай ларектар урынына "Пятерочка", "Магнит", "Монетка" кеүек ҙур сауҙа нөктәләре асылып бөттө. Улар һатып алыусыға сифатлы тауар тәҡдим итеүҙе хәстәрләмәй, осһоҙҙо һатып, күберәк килем алыуға өҫтөнлөк бирә.

➔ **Эшҡыуарлыҡ итеү өсөн башта аҡса туплarға кәрәк, тигәндәрен ишеткән бар. Кеҫәңдә тинең дә булмайынса эш асырға мөмкинме?**

- Кемдер аҡсаһы булмаһа, эш башлай алмай, кемгәләр ҡулы оҫта булыу ҙа етә. Аҡса - ул сүкеш, бысҡы, машина һымаҡ эш ҡоралы. Ләкин хәҙерге иҡтисад финанс ағына ауышҡан, ә етештереү онотолоп бара торған шөғөлгә әйләнә. Шуға ла ҡулында эш асырлыҡ аҡсаң булмай тороп, нимәгәләр тотоноп булмай, тип уйлайҙар. Хәҙер артыҡ ҙур аҡса һалмай ҙа ниндәй эш асып булыуын һанап тормайым, әммә йәштәрҙең интернет аша ла аҡса эшләүен беләбеҙ бит. Тимәк, мөмкинлегеңә ҡарап, әмәлен табырға мөмкин.

➔ **Эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнергә теләүселәргә ниндәй теләктәрегеҙҙе еткерер инегеҙ?**

- Эшҡыуарға хас төп сифат - ныҡышмаллыҡ. Тәүге уңышһыҙлыҡтан һуң уҡ башлаған эшеңә ҡул һелтәп ҡуйырға ярамай, моратыңа ирешкәнсе алға барыу кәрәк. Миҫалға Сибай ҡалаһын алғанда ла, бөтә сауҙа нөктәләре ситтән килгәндәр ҡулында хәҙер. Мебель етештереү өлкәһен дә ситтәр яулап алды, сөнки беҙҙекеләр эшләй беләһә лә, һата белмәй. Ҡайны саҡта улар ауылдағыларға алама мебелен алып килеп, аҡсаһын һуңынан түләрһегеҙ, тип ҡалдырып китә лә, күпмелер ваҡыттан һуң ғына аҡса артынан киләләр, хужалар түләр хәлдә булмаһа, уларҙың йылҡыһын, быҙауын булһа ла тейәп алып китәләр. Ә Сибайҙа уларҙың күпселәре ит менән һатыу итеп тора, сифатһыҙ мебелгә алмашҡан малды арзанға ғына биреп, бер-береһенең бизнесына ярҙам итәләр. Әлбиттә, беҙҙең былайтып үҙ халҡыбыҙҙы таларға намыҫыбыҙ етмәй. Ә башҡаларҙан башҡорт таланырға әҙер генә тора. Шуға, беҙҙең эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнгәндәр ҙә, ябай ҡулланыусылар ҙа берберенә ярҙам итеү тураһында уйлаһын ине. Башҡорт башҡорттан һатып алһын, үҙебеҙ етештергәнде үҙебеҙ ҡулланып йәшәйек, тимәксемен.



**ШУЛАЙ ИТЕП, Илшат Хәсәнов әйтмешләй, эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнеү бөтәһенең дә ҡулынан килә торған эш түгелдер, бәлки. Әңгәмәләшем әйтмешләй, дөрөҫ һатыу итә лә белергә кәрәк. Әммә һәр кемдең үҙ эшенең оҫтаһы булырға һәм тауарының юғары сифатлы булыуын ҡайғыртырға ғына ҡулынан киләлер бит...**

Сәриә ҒАРИПОВА
әңгәмәләште.

ЖУРНАЛИСТ ЯҘМАЛАРЫ

**Хәҙерге заман кешеһе, айырыуса йәштәр, электрон мәғлүмәт сараларын гәҙәти күренеш тип ҡабул итә. Бөтәһенең дә ҡулында гаджет, әйҙә, рәхәтләнеп интернет донъяһында йөҙ, телефондан һөйләш, социаль селтәрҙәргә ин, улар аша донъяның телә һә ниндәй мөйөшөндәге кеше менән бәйләнешкә ин. Радионы тыңлаусылар һирәгәйә, телевизорға текәлеп ултырыусылар ҙа кәмей, гәзит-журнал уҡыусылар хаҡында әйтеп тораһы ла түгел, улар айырыуса аҙая бара. Нишләйһең, заманы шулай, ә бит 50-60 йыл элек кенә беҙ ысын мәғәнәһендә телевидениеға табына инек. Иҫегеҙгә төшөрөгөҙ әле, айырыуса ауылдарҙағы тәүге телевизорҙарҙы бергә йыйылып, ятып тигәндәй ҡарай торғайныҡ бит. Кинофильмдар, театр тамашалары, концерттар, әҙәби тапшырыуҙар аша беҙ рухи аҙыҡ алдыҡ, телевидениеның тәрбиәүи көсө лә ҙур булды.**

# ТӘҮГЕ ҠАРЛУҒАСТАР,

## йәки 60 йыл элек Башҡортостан телевидениеһы ойошторолғаны тураһында

### Тәүге телеүҙәк

Башҡортостан (Өфө) телевидениеһы үҙенең тәүге тапшырыуын 1958 йылдың 31 декабрендә күрһәтә, дөрөҫөрәге, Мәскәүҙең Яңы йыл программаһын эфирға сығара (трансляциялай). Даими тапшырыуҙар 1959 йылдың 1 мартында, Башҡорт Автономиялы Совет Социалистик Республикаһының 40 йыллығына тура килтерелеп, күрһәтелә башлай. Нишләйһең - традиция, оҫондай иҫтәлекле ваҡиғаны ниндәйҙер ҙур сара менән билдәләргә тейеш булғандар ул ваҡытта. Был дата Башҡортостан телевидениеһының барлыҡҡа килгән көнө тип рәсми рәүештә ҡабул ителә. Ә ысынында, Башҡортостан (Өфө) телевидениеһының тарихы был көндән байтаҡҡа алдараҡ башланған.

1954 йылдың сентябрендә "Советская Башкирия" гәзитендә, Өфөлә БАССР ДОСААФ-ның һәүәҫкәр телевизион үҙәген төҙөү башланды, тигән ҙур булмаған хәбәр баҫыла. Ул ваҡытта был ваҡиға кешеләрҙә ҡыҙыҡһыныу уятмай, төҙөлә икән төҙөлә. Әммә радио яратыусы-конструкторҙарҙың тәҡдимен партияның ҡала Советы етәкселәре хуплай. Сөнки уларҙың кешеләре Мәскәүҙә ҙур чиновниктарҙың йортонда хәрәкәт итеүсе кешеләрҙе һынландырған йәшникте күреп ҡайтҡан була. Бер ниндәй ығы-зығыһыҙ, хатта именлек һаҡлау органдары менән дә һөйләшеп тормайынса, телеантеннаны "Башкирия" ҡунаҡханаһының түбәһенә ҡуйырға рөхсәт бирәләр.

Ҡала Советы 10 өр-яңы телевизор ҡайтарта, бер нисәһен телеүҙәктә ҡалдырһалар, ҡалғандарын төрлө ойошмаларға таратып бирәләр. Бер нисә айҙан республика гәзиттәре Өфөнөң Фрунзе урамында ҡеүәтле заманса телеүҙәк төҙөлә башлаясағы хаҡында хәбәр итә.

### "Иғтибар, Өфө күрһәтә!"

1956 йылда Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советы Өфөлә телеүҙәк төҙөү тураһында ҡарар ҡабул итә, был үтә лә яуаплы эш Леонид Львович Балабан етәкләгән 3-сө трест коллективына йөкмәтелә. Төҙөләүсе объект дирекцияһының етәксеһе итеп Эммануил Соломонович Штейнберг раҫлана. Бер үк ваҡытта Өфө-Салауат радиореле линияһын һәм Салауат ҡалаһында ҡеүәтле ретрансляция станцияһын төҙөү башлана, телеүҙәктә эшләйәсәк хеҙмәткәрҙәргә тәғәйенләнгән торлаҡ йорт һалына. Өфөгә илдең төрлө тарафтарынан инженер-техниктар саҡырыла. Тәүгеләре араһында Одессанан ирлеҡатынлы Василий һәм Клара Невинныйҙар була. Башҡа ҡалаларҙан Светлана Янборисова, Лидия Попова, Татьяна Бабиналар килә.

Радиокомитетты яңы ойошторолған телестудия менән ҡушалар һәм БАССР-ҙың Министрҙар Советы ҡарамағындағы радио һәм телевидение буйынса комитет булдырыла. Уның тәүге рәйесе итеп 1957 йылдың 10 декабрендә танылған журналист, оҙаҡ йылдар төрлө баҫмаларҙа, ТАСС-та эшләгән Ғарифулла Вәлиулла улы Ғәзәйеров тәғәйенләнә, телестудия директоры итеп элекке партия хеҙмәткәре, быға тиклем мәҙәниәт министры вазифаһын биләгән Ғәли Харис улы Ғүмәров раҫлана. Ижади коллективты туплау ауырлыҡтар менән бара, махсус белемле кадрҙар етешмәй. Шулай ҙа Ғ. Ғәзәйеров һәм Ғ. Ғүмәров тиҙ арала эшкә һәләтле коллектив булдыра, тәжрибәле белгестәрҙән тыш, яңы ғына юғары уҡыу йорттарын тамамлаған йәштәр килә. Етәкселектән 1-се һанлы бойороғона ярашлы, Ҡ. Ғәзелшин - режиссер, Э. Баязитов - рәссам, Л. Смирнов - микрофон операторы, А. Ахметченко - тапшырыуҙар контролеры, Р. Биккинин водитель итеп эшкә алына. Тәүге журналистар (улар телевидениела "редакторҙар" тип атала) араһында И. Хәкимова. Ш. Янбаев, Р. Сыртланов, И. Любимова, Д. Вахитова, Э. Давыдова, М. Ғиләжев һәм башҡалар була. Мәскәүҙән ГИТИС-ты тамамлап ҡайтҡан, бер аҙ театрҙа эшләп өлгөргән Ә. Абдразаҡов, Н. Тибеев, тәжрибәле режиссерҙар Р. Фәйзи (Фәйзуллин), Ю. Метелев, тауыш режиссеры В. Пищальников һ.б. эшкә килә. Ижади конкурста еңеп сыҡҡан Р. Кәримова диктор итеп алына.

Ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә Башҡортостан телевидениеһы СССР-ҙағы иң алдыңғы студиялар сафына баҫа, 1963 йылда Башҡортостан журналистарының эш программалары Үҙәк телевидение аша күрһәтелә. Яңы ҡорамалдар урынлаштырыу, күсмә телевизион станция һатып алыу арҡаһында 60-70-се йылдарҙа Мәскәү программаларын даими күрһәтеү мөмкинлеге тыуа, район-ҡалаларға сығып, тапшырыуҙар әҙерләү башлана, хеҙмәт алдынғылары тураһында очерктар төшөрөлә, концерттар һәм спектаклдәр ҡуйыла. 1976 йылдан Телеүҙәк Мәскәү программаларын төҫлө итеп күрһәтә башлай, ә 1985 йылдан бөтә тапшырыуҙар ҙа төҫлө итеп экранға сыға. Телевидениены халыҡ яратып ҡарай, журналистарҙың улар менән үҙ-ара бәйләнеше ныҡый бара. 1984 йылда I программаны республика халҡының - 92 проценты, ә II программаны 60 проценты ҡарай ала.

### "Берәү бөтәһе, бөтәһе берәү өсөн"

Мин телевидениеға 1986 йылда күстем. Радиола баш мөхәррир булып эшләп йөрөй инем. Рәйесебеҙ Тәлғәт Сәғитов телестудияға күсергә тәҡдим итте. Егерме йылдан ашыу Ижтимағи-сәйәси тапшырыуҙар редакцияһының баш мөхәррире йөгөн тартҡан маһир журналист, иҫ киткес мөләйем һәм кешелекле М. Ғиләжевты алыштырырға тейеш инем, ул "Китап" нәшриәтенә эшкә күскәйне. Радиола өс йылдан артығыраҡ баш мөхәррир булып эшләгән тәжрибәм бар, әммә телевидение бөтөнләй башҡа өлкә икәнен белә инем. Шулай ҙа ризалаштым, яңы ижади мөхиткә тартылдым, яңы кешеләр менән эшләргә теләк ҙур ине.

Тәжрибәле журналистар Ғ. Имаев. Ф. Белышев, Р. Стрижкова, З. Әүдийәрова, А. Вәлиева, Ә. Тимербулатова, И. Любимова, М. Сорокин, Н. Әхмәзиева, И. Рауилов, С. Мушкиналарҙан күп нәмәгә өйрәндем, уларҙың ярҙамын һәр саҡ тойҙом. Баш режиссерҙар Ә. Абдразаҡов, Ә. Нурмөхәмәтов, Р. Исмәғилевтәр, тауыш режиссерҙары Н. Дистанов, Ә. Кадиков, П. Абдулбанеева, операторҙар Р. Әмирханов, Л. Машков, Ф. Вәлиев, Р. Хәйруллин, А. Семенов - бөтәһен дә һанап сығырлыҡ түгел, эштең ауырлығын да, шатлығын да бергә кисерҙек. Башҡортостан телевидениеһы хеҙмәткәре тигән исемгә тап төшөрмәнек.

Телевидение - ул коллектив хеҙмәт, "Берәү - бөтәһе, бөтәһе берәү өсөн" тигән әйтем нәҡ тура килә ошо осраҡта. Тапшырыуҙы әҙерләп эфирға биргәнсе ысын мәғәнәһендә сират күперен үтергә тура килә. Журналист, режиссер, тауыш режиссеры, режиссер ярҙамсыһы, пленканы эшкәртеүсе, монтажсы, ҡороусы, яҡтыртыусы, аппаратсылар, сығарылыш булеге хеҙмәткәрҙәре, диктор... Ҡыҫҡаһы, тапшырыуҙы әҙерләп эфирға биреүҙә 10-лап кеше ҡатнаша, ошо сылбырҙың бер генә бүлеме өҙөлһә - бөтә башҡарылған хеҙмәт юҡҡа сыға.

Телевидениела эшләгән осорҙа ниндәй генә ваҡиғалар булманы, ҡайҙа ғына ташламаны ижад юлдары беҙҙе. Хәтеремдә, 1997 йылдың май айында Мәскәүҙә Башҡортостан мәҙәниәте көндәре уҙҙы, беҙ 30 кешенән торған ижади төркөмдө өс автомобилдә баш ҡалаға оҙаттыҡ, кемдер һуңғараҡ самолетта осто. Ике көндән бөтәһе лә иҫән-аман килеп етте, "Рәсәй" ҡунаҡханаһында тулөү ҡиммәт булғанлыҡтан, Телевидение һәм радио хеҙмәткәрҙәренең һөнәри оҫталығын күтәреү институтының дөйөм ятағында урынлаштыҡ. Телевидение халҡы сос, юғалып ҡалғандарҙан түгел бит ул. Юлда килгәндә егеттәр бер ҡапсыҡ бәрәңге, һуған һатып алғандар, иртән-кис ашарға үҙебеҙ бешерәбеҙ, кафе-ресторан эҙләп йөрөйһө түгел, ижади бригада эшен бөтөрөп, ҡасан ғына ҡайтһа ла, ҡайнар аш әҙер. Кис көнгә йомғаҡ яһайбыҙ, иртәгәһен хәстәрләйбеҙ, кемдер төшөрөлгән, магнит таҫмаһына яҙылған ваҡиғаларҙы барлап, тапшырыу әҙерләй, водителдәр машиналарын ҡараштыра, кемдер ҡаланы күрергә сығып китә. Иртән иртүк яртылаш әҙерләнгән материалды аэропортҡа алып китәбеҙ, Өфөлә самолетты беҙҙең хеҙмәткәрҙәр ҡаршы ала, видеотаҫмаларҙы монтажлап, кискә эфирға әҙер тапшырыу сығара. Бына ошондай осраҡта күренә лә инде коллективтың көсө! Берҙәм хеҙмәт, ауыр саҡта баҙап ҡалмау, дөйөм эш өсөн көслә яуаплылыҡ тойғоһо, һөнәри оҫтөнлөк арҡаһында беҙ ул саҡта үҙ бурысыбыҙҙы теүәл үтәнек, тип әйтә алам.

**Фәнил ҠОҘАҠАЕВ,**
**матбуғат ветераны, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре.**
**(Дауамы бар).**

СӘЛӘМӘТ БУЛ!



# ИЛЛЕ ЙӘШТӘН ҺУҢ...

Әйткәндәй, ҡыҙыҡ мәл. Кемдер үҙенең торошон "офоғо тарайыу" тип ҡабул итергә, кемдер нимә булғанын да төшөнмәҫкә мөмкин. Ғәҙәттә, был шулай аңлатыла: юлды аша сыҡҡанда унда йәки һулда машина бармы, юҡмы икәнлеген белеү өсөн кәүҙәгеҙҙе бороорға тура килә. Йәғни күҙегеҙ менән генә ҡарау етмәй, тотош кәүҙәгеҙ боролорға тейеш. Әгәр шундай күренештәр күҙәтелә икән, һеҙҙә глаукома үҫешә. Был осраҡта ярҙам итеү ҡатмарлыраҡ. Шуға күрә 40 йәштән һуң йыл һайын офтальмологта тикшерелеп торорға кәңәш итәбеҙ.

Тестың **етенсе** һорауы күҙ алдында ниндәйҙер таптар барлыҡҡа килеүе тураһында. Күреү һәләте тулыһынса түгел, ә өлөшләтә, күҙҙең бәләкәй генә участкаларында насарайып ала. Был осраҡта катарактаға шик тыуырға тейеш. Хәйер, таптар икенсе сир билдәләре булыуы ла ихтимал.

Тестың **һигеҙенсе** һорауы бик ҡыҙыҡлы. Кеше тәбиғи яҡтылыҡҡа, ҡояшҡа сыҡҡас яҡшыраҡ күрергә тейеш һымаҡ, әммә киреһенсә, ул бина эсендәгегә ҡарағанда насарыраҡ күрә. Был нимә тураһында һөйләй? Сағыу яҡтылыҡта беҙең күҙ ҡараһы бәләкәсәйә, ә катаракта ваҡытында яҫмыҡ тоноҡлана. Был тоноҡланыу, нигеҙҙә, үҙәктә туплана. Күҙ ҡараһы тарайғас, күреү киңлеге бәләкәсләнә, шуға күрә тап яҡтылыҡта кеше насар күрә башлай. Бинала күҙ ҡараһы ҙурая, күреү киңлеге киңәйә, күреү һәләте яҡшыра. Күҙ ҡараһын медикаментоз киңәйткәндә, катаракта сирле кеше лә яҡшыраҡ күрә.

Тестың **туғыҙынсы** һорауы - бик мөһим һорау һәм етди билдә. Күҙҙең пәрҙә менән ҡапланыуы тойғоһо, йәшен йәки туптар осоуы күҙҙең селтәрле шекәрәһе (сетчатка) эргәһе боҙолоуы тураһында һөйләй. Йә дистрофик сир, йә инде шекәрәнең ҡубыуы. Шекәрәнең ҡубыуы - бик хәүефле һәм тиҙ арала ярҙам талап итә. Дистрофик сирҙәр - хроник процесс, ул бик йыш яйлап ҡына бара. Бында консерватив һәм хирургик ысулдар күҙҙе формала тоторға ярҙам итә.

Күреүгә бәйле иң төп проблема - уның насарайыуы. Шуға күрә кеше һәр саҡ яҡшы күргән икән, тәүҙә береһен ҡаплап, һуңынан икенсеһен ҡаплап ҡарап, ике күҙенең күреү һәләтен сағыштыра ала. Әгәр айырма тойһағыҙ, был инде табипҡа барыу өсөн сәбәп булып тора. Әгәр бер күҙегеҙ насарыраҡ күрә башланы икән, был да тиҙ арала тикшерелеү кәрәклеген иҫкәртә. Бигерәк тә күреү һәләтенең ҡапыл насарайыуы хәүефле.

### Шекәрә борсоймо?

Шулай уҡ шекәрә проблемаларын, уның дистрофияһын асыҡлау өсөн тағы бер тест тәҡдим итәбеҙ. Бының өсөн шаҡмаҡ дәфтәр бите кәрәк. Йә булмаһа, аҡ ҡағыҙҙа 20 шаҡмаҡтан торған квадрат эшләгеҙ. Уның уртаһына ҙур ғына нөктә билдәләгеҙ. Әҙер һүрәт ҡулланһағыҙ ҙа мөмкин.

Әгәр күҙлек кейәһегеҙ икән, кейегеҙ. Бер күҙегеҙҙе ҡаплап, үҙәктәге нөктәгә ҡул һуҙымы арауығында ҡарағыҙ. Һуңынан нөктәнән күҙегеҙҙе алмайынса ҡағыҙҙы йөҙөгөҙгә 20-30 сантиметрғаса яҡын килтерегеҙ. Ҡағыҙҙа ниндәйҙер урында сеткала үҙгәреш күрһәгеҙ - ҡыйшайыу, һыҙыҡтарҙың өҙөклөгө, һыҙаттарҙың юҡҡа сығыуы, насар күренеүе - ошо урынды ҡағыҙҙа уҡ билдәләгеҙ. Тәжрибәне икенсе күҙегеҙ өсөн эшләгеҙ һәм патологик урындарҙы тағы ла билдәләгеҙ. Һөҙөмтәне табибығыҙға күрһәтергә мөмкин.

**С. КУЗИНА.**
**(Дауамы бар).**



### 18 МАРТА
### ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.20 "Сегодня 18 марта. День начинается". [6+]
9.55 "Модный приговор". [6+]
10.55 "Жить здорово!" [16+]
12.00 Новости.
12.15 "Время покажет". [16+]
14.00 "Наедине со всеми". [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
17.00 "Время покажет". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.25 "Время покажет". [16+]
18.50 На самом деле. [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Шифр". [16+]
23.30 "Большая игра". [12+]
0.30 "Познер". [16+]
1.30 Т/с "Убойная сила". [16+]
3.00 Новости.
3.05 Т/с "Убойная сила". [16+]
3.40 "Мужское / Женское". [16+]
4.30 Контрольная закупка. [6+]

### РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00 Вести.
11.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50 "60 минут". [12+]
14.00 Вести.
14.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.45 "Кто против?" [12+]
17.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
17.25 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
18.50 "60 минут". [12+]
20.00 Вести.
20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.00 Т/с "Годунов". [16+]
23.00 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.00 Т/с "Каменская". [16+]

### БСТ

**7.00 Профилактика на канале с 7.00 до 14.00.**
**14.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**14.45 Специальный репортаж. [12+]**
**15.00 Интервью. [12+]**
**15.15 Әлләсе... [6+]**
**16.00 Новости (на рус. яз.).**
**16.15 "Гора новостей".**
**16.30 Т/с "Любовь тракториста". [16+]**
**17.30 Новости (на рус. яз.).**
**17.45 Интервью. [12+]**
**18.00 Деловой Башкортостан. [12+]**
**18.15 Инцидент-репортаж. [12+]**
**18.30 Новости (на баш. яз.).**
**18.45 Хоккей. КХЛ. Плей-офф. 1/2 финала конференции "Восток".**
**21.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Вечерний телецентр.**
**22.45 Новости (на баш. яз.).**
**23.15 Колесо времени. [12+]**
**0.15 Х/ф "Дежавю". [12+]**
**2.30 Бәхетнамә. [12+]**
**3.15 Спектакль "Вечерняя трапеза". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз.).**

### 19 МАРТА
### ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.20 "Сегодня 19 марта. День начинается". [6+]
9.55 "Модный приговор". [6+]
10.55 "Жить здорово!" [16+]
12.00 Новости.
12.15 "Время покажет". [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
17.00 "Время покажет". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.25 "Время покажет". [16+]
18.50 На самом деле. [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Шифр". [16+]
23.30 "Большая игра". [12+]
0.30 "Вечерний Ургант". [16+]
1.00 Т/с "Убойная сила". [16+]
3.00 Новости.
3.05 "Мужское / Женское". [16+]
4.00 "Давай поженимся!" [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00 Вести.
11.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50 "60 минут". [12+]
14.00 Вести.
14.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.45 "Кто против?" [12+]
17.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
17.25 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
18.50 "60 минут". [12+]
20.00 Вести.
20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.00 Т/с "Годунов". [16+]
23.00 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.00 Т/с "Каменская". [16+]

### БСТ

**7.00 Сәләм. [12+]**
**9.00 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм. [12+]**
**10.00 Т/с "Любовь тракториста". [16+]**
**11.00 Новости (на рус. яз.).**
**11.15 "100 имен Башкортостана". [12+]**
**11.45 Дорожный патруль. [16+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 Дорога к храму. [0+]**
**15.00 Интервью. [12+]**
**15.15 Вопрос+Ответ=Портрет. [6+]**
**16.00 Новости (на рус. яз.).**
**16.15 "Гора новостей".**
**16.30 Т/с "Любовь тракториста". [16+]**
**17.15 Точка зрения ЛДПР. [12+]**
**17.30 Новости (на рус. яз.).**
**17.45 Интервью. [12+]**
**18.00 С мотором... [12+]**
**18.15 Инцидент-репортаж. [12+]**
**18.30 Новости (на баш. яз.).**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 Сәнгелдәк. [0+]**
**20.00 Новости (на рус. яз.).**
**20.15 Криминальный спектр. [16+]**
**20.30 Интервью. [12+]**
**20.45 Деловой Башкортостан. [12+]**
**21.00 Уфимское "Времечко".**
**21.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Вечерний телецентр.**
**22.45 Новости (на баш. яз.).**
**23.15 Кустәнәс. [12+]**
**23.45 Современник. [12+]**
**0.00 Х/ф "Агенты КГБ тоже влюбляются". [12+]**
**2.00 Бәхетнамә. [12+]**
**2.45 Спектакль "Моя звезда". [12+]**
**4.30 Колесо времени. [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз.).**

### 20 МАРТА
### СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.20 "Сегодня 20 марта. День начинается". [6+]
9.55 "Модный приговор". [6+]
10.55 "Жить здорово!" [16+]
12.00 Новости.
12.15 "Время покажет". [16+]
14.25 "Давай поженимся!" [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
15.30 Чемпионат мира по фигурному катанию. Женщины. Короткая программа. Прямой эфир из Японии.
17.00 "Время покажет". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.25 "Время покажет". [16+]
18.50 На самом деле. [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Шифр". [16+]
23.30 "Большая игра". [12+]
0.30 "Вечерний Ургант". [16+]
1.00 Т/с "Убойная сила". [16+]
3.00 Новости.
3.05 "Мужское / Женское". [16+]
3.55 "Давай поженимся!" [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00 Вести.
11.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50 "60 минут". [12+]
14.00 Вести.
14.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.45 "Кто против?" [12+]
17.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
17.25 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
18.50 "60 минут". [12+]
20.00 Вести.
20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.00 Т/с "Годунов". [16+]
23.00 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.00 Т/с "Каменская". [16+]

### БСТ

**7.00 Сәләм. [12+]**
**9.00 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм. [12+]**
**10.00 Т/с "Любовь тракториста". [16+]**
**11.00 Новости (на рус. яз.).**
**11.15 "100 имен Башкортостана". [12+]**
**11.45 Криминальный спектр. [16+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 "Аль-Фатиха". [12+]**
**15.00 Интервью. [12+]**
**15.15 Бала-сага. [6+]**
**16.00 Новости (на рус. яз.).**
**16.15 "Гора новостей".**
**16.30 Т/с "Любовь тракториста". [16+]**
**17.30 Новости (на рус. яз.).**
**17.45 Интервью. [12+]**
**18.00 "Бай". [12+]**
**18.30 Новости (на баш. яз.).**
**18.45 Хоккей. КХЛ. Плей-офф. 1/2 финала конференции "Восток".**
**21.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Вечерний телецентр.**
**22.45 Новости (на баш. яз.).**
**23.15 "Бай". [12+]**
**23.45 Замандаш. [6+]**
**0.00 Х/ф "Дама с попугаем". [12+]**
**2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**3.00 Спектакль "Суд матери". [12+]**
**4.45 "Весело живем". [12+]**
**5.00 "100 имен Башкортостана". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз.).**

### 21 МАРТА
### ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.20 "Сегодня 21 марта. День начинается". [6+]
9.55 "Модный приговор". [6+]
10.55 "Жить здорово!" [16+]
12.00 Новости.
12.15 "Время покажет". [16+]
13.30 "Наедине со всеми". [16+]
14.30 "Давай поженимся!" [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.25 "Давай поженимся!" [16+]
15.35 "Мужское / Женское". [16+]
17.25 "Время покажет". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.25 "Время покажет". [16+]
18.50 На самом деле. [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Шифр". [16+]
23.30 "Большая игра". [12+]
0.30 "Вечерний Ургант". [16+]
1.00 Т/с "Убойная сила". [16+]
3.00 Новости.
3.05 "Мужское / Женское". [16+]
3.55 "Давай поженимся!" [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00 Вести.
11.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50 "60 минут". [12+]
14.00 Вести.
14.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.45 "Кто против?" [12+]
17.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
17.25 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
18.50 "60 минут". [12+]
20.00 Вести.
20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.00 Т/с "Годунов". [16+]
23.00 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.00 Т/с "Каменская". [16+]

### БСТ

**7.00 Сәләм. [12+]**
**9.00 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм. [12+]**
**10.00 Т/с "Любовь тракториста". [16+]**
**11.00 Новости (на рус. яз.).**
**11.15 "100 имен Башкортостана". [12+]**
**11.45 Дорожный патруль. [16+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 Автограф. [12+]**
**15.00 Интервью. [12+]**
**15.15 Бирешмә. Профи. [6+]**
**16.00 Новости (на рус. яз.).**
**16.15 "Гора новостей".**
**16.30 Т/с "Любовь тракториста". [16+]**
**17.30 Новости (на рус. яз.).**
**17.45 Интервью. [12+]**
**18.00 Деловой Башкортостан. [12+]**
**18.15 Специальный репортаж. [12+]**
**18.30 Новости (на баш. яз.).**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 Сәнгелдәк. [0+]**
**20.00 Новости (на рус. яз.).**
**20.15 Криминальный спектр. [16+]**
**20.30 Интервью. [12+]**
**20.45 С мотором... [12+]**
**21.00 Уфимское "Времечко".**
**21.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Республика Live. [12+]**
**22.45 Новости (на баш. яз.).**
**23.15 Бала-сага. [6+]**
**0.00 Х/ф "Вот такая музыка". [12+]**
**2.00 Бәхетнамә. [12+]**
**3.00 Спектакль "Ушло мое белое лето". [12+]**
**5.00 Башкорттар. [6+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз.).**

### 22 МАРТА
### ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.20 "Сегодня 22 марта. День начинается". [6+]
9.55 "Модный приговор". [6+]
10.55 "Жить здорово!" [16+]
12.00 Новости.
12.20 "Время покажет". [16+]
14.50 "Мужское / Женское". [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 "Мужское / Женское". [16+]
16.00 Чемпионат мира по фигурному катанию. Женщины. Произвольная программа. Прямой эфир из Японии.
17.30 "Время покажет". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.25 "Время покажет". [16+]
18.50 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.55 "Поле чудес". [16+]
21.00 Время.
21.30 "Голос. Дети". Новый сезон. [0+]
23.20 "Вечерний Ургант". [16+]
0.15 Премьера. "U2: Концерт в Лондоне". [12+]
1.20 Х/ф "Большой переполох в маленьком Китае". [12+]
3.10 "Модный приговор". [6+]
4.10 "Мужское / Женское". [16+]
5.00 "Давай поженимся!" [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00 Вести.
11.25 Местное время. Вести-Приволжского федерального округа.
11.45 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50 "60 минут". [12+]
14.00 Вести.
14.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.45 "Кто против?" [12+]
17.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
17.25 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
18.50 "60 минут". [12+]
20.00 Вести.
20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.00 "Юморина". [16+]
0.00 "Выход в люди". [12+]
1.20 Х/ф "Мать и Мачеха". [12+]

### БСТ

**7.00 Сәләм. [12+]**
**9.00 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм. [12+]**
**10.00 Д/ф "Расцвет великих империй". [12+]**
**11.00 Новости (на рус. яз.).**
**11.15 "100 имен Башкортостана". [12+]**
**11.45 Криминальный спектр. [16+]**
**12.00 "Йома". [0+]**
**12.30 Башкорттар. [6+]**
**13.00 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Автограф. [12+]**
**14.00 "Весело живем". [12+]**
**14.15 "Красная кнопка". [16+]**
**15.00 Интервью. [12+]**
**15.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**16.00 Новости (на рус. яз.).**
**16.15 "Гора новостей".**
**16.30 "Медицинская правда". [12+]**
**17.00 Д/ф "Моя планета Башкортостан". [12+]**
**17.30 Новости (на рус. яз.).**
**17.45 Интервью. [12+]**
**18.00 "Йома". [0+]**
**18.30 Новости (на баш. яз.).**
**19.00 Республика Live. [12+]**
**19.45 Сәнгелдәк. [0+]**
**20.00 Новости (на рус. яз.).**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**20.30 Интервью. [12+]**
**20.45 Инцидент-репортаж. [12+]**
**21.00 Башкорттар. [6+]**
**21.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Вечерний телецентр.**
**22.45 Новости (на баш. яз.).**
**23.15 Караоке по-башкирски. [12+]**
**0.00 Х/ф "Во бору брусника". [16+]**
**3.15 Спектакль "Между небом и землей". [12+]**
**5.15 Д/ф "Млечный путь". [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз.).**

### 23 МАРТА
### СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Новости.
6.10 Х/ф "Мой ласковый и нежный зверь". [12+]
8.10 "Играй, гармонь любимая!" [12+]
8.55 Умницы и умники. [12+]
9.45 "Слово пастыря". [0+]
10.00 Новости.
10.15 "Идеальный ремонт". [6+]
11.25 Премьера. "Живая жизнь". [12+]
12.00 Новости с субтитрами.
12.10 Премьера. "Живая жизнь". [12+]
14.35 Чемпионат мира по фигурному катанию. Танцы. Произвольная программа. [0+]
16.25 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым. [12+]
18.00 "Сегодня вечером". [16+]
21.00 Время.
21.20 Премьера. Большой концерт в Государственном Кремлевском дворце. К 70-летию Валерия Леонтьева. [12+]
23.45 Х/ф "Двое в городе". [12+]
1.40 Х/ф "Сумасшедшее сердце". [16+]
3.45 "Модный приговор". [6+]
4.40 "Мужское / Женское". [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 "Утро России. Суббота".
8.40 Местное время. Суббота. [12+]
9.20 "Пятеро на одного".
10.10 Сто к одному.
11.00 Вести.
11.20 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.40 Х/ф "Отогрей моё сердце". [12+]
13.50 Х/ф "Расплата". [12+]
17.30 "Привет, Андрей!" [12+]
20.00 Вести в субботу.
20.45 "Ну-ка, все вместе!" [12+]
22.50 Х/ф "Беглянка". [12+]
3.05 "Выход в люди". [12+]

### БСТ

**7.00 "С праздником, Республика!" [12+]**
**8.00 "Башкортостан - 100 лет!"**
**11.00 "Песни народа в душе моей". [0+]**
**11.30 "Башкортостан - 100 лет!"**
**12.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.00 "Дарю песню". [12+]**
**14.15 Неизвестный Башкортостан. [12+]**
**14.30 "100 имен Башкортостана". [12+]**
**15.00 Торжественное собрание и праздничный концерт, посвященный Дню Республики.**
**16.30 "100 имен Башкортостана". [12+]**
**17.00 "Башкортостан - 100 лет!"**
**18.30 Новости (на баш. яз.).**
**19.00 Үткән гүмер. [12+]**
**19.30 Сәнгелдәк. [0+]**
**19.45 Х/ф "Бабич". [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Д/ф "Первая Республика". [12+]**
**22.45 Итоги недели (на баш. яз.).**
**23.30 "Музыка ветра". [12+]**
**1.15 Х/ф "Мерседес" уходит от погони". [12+]**
**2.30 Итоги недели (на баш. яз.).**
**3.15 Спектакль "И день, и век". [12+]**
**5.00 Х/ф "Мерседес" уходит от погони". [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз.).**

### 24 МАРТА
### ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.50 Х/ф "Курьер". [12+]
6.00 Новости.
6.10 Х/ф "Курьер". [12+]
7.45 "Часовой". [12+]
8.15 "Здоровье". [16+]
9.20 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
10.00 Новости.
10.10 Премьера. "Жизнь других". [12+]
11.00 Т/с Премьера. "Отверженные". [16+]
15.00 Премьера. "Главная роль". [12+]
16.35 "Три аккорда". [16+]
18.25 Премьера сезона. "Русский керлинг". [12+]
19.30 "Лучше всех!" [0+]
21.00 "Толстой. Воскресенье".
22.30 "Что? Где? Когда?" Весенняя серия игр. [16+]
23.40 Х/ф Премьера. "Он и она". [18+]
2.00 Х/ф "Огненные колесницы".
4.20 Контрольная закупка. [6+]

### РОССИЯ 1

4.35 Т/с "Сваты". [12+]
6.35 "Сам себе режиссёр".
7.30 "Смехопанорама" Евгения Петросяна.
8.00 Утренняя почта.
8.40 Местное время. Воскресенье.
9.20 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
10.10 Сто к одному.
11.00 Вести.
11.20 Смеяться разрешается.
14.00 "Далёкие близкие" с Борисом Корчевниковым. [12+]
15.30 Х/ф "Боль чужой потери". [12+]
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 "Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
1.30 "Далёкие близкие" с Борисом Корчевниковым. [12+]
3.05 Т/с "Гражданин начальник". [16+]

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 "Йома". [0+]**
**8.45 Ҡурай даны. [12+]**
**9.00 "Бай". [12+]**
**9.30 Кустәнәс. [12+]**
**10.00 "Физра". [6+]**
**10.15 "Перекличка". [6+]**
**10.30 МузКәрәҙ. [0+]**
**10.45 Байтус. [6+]**
**11.00 Гора новостей. [6+]**
**11.15 Бирешмә. Профи. [6+]**
**11.55 Первый турнир Терра Башкирия по конному спорту в честь 100-летия Республики Башкортостан**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**16.00 Дорога к храму. [0+]**
**16.30 Историческая среда. [12+]**
**17.00 Д/ф "Мустай Карим. Творец. Мудрец. Боец". [12+]**
**18.00 Полезные новости. [12+]**
**18.15 "Как "Уфанет" создает "Весенний бал?" [12+]**
**19.00 Лидеры региона. [12+]**
**19.30 Әлләсе... [6+]**
**20.15 "Теге өсәү!" (12+) [12+]**
**20.45 Караоке по-башкирски. [12+]**
**21.30 Итоги недели (на рус. яз.).**
**22.15 Специальный репортаж. [12+]**
**22.30 "Красная кнопка". [16+]**
**23.15 "Байык-2019". [12+]**
**0.15 Х/ф "Цыганка Аза". [16+]**
**2.00 Спектакль "Страна Айгуль". [12+]**
**4.15 Полезные новости. [12+]**
**4.30 Историческая среда. [12+]**
**5.00 Үткән гүмер. [12+]**
**6.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**6.45 Специальный репортаж. [12+]**

✓ *Бөтә кешеләр ҙә күп төрлө эш эшләй ала... Тик әгәр ул эшкә хәҙер үк тотонорға тура килмәһә.*

*(Роберт Бенчли).*



БАШ ЭШЛӘТМӘК

# БАШҠОРТОСТАН МӨХТӘРИӘТЕ СОСТАВЫ




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**10-сы һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Клара. Ҡаҙылыҡ. Нөгөш. Торна. Химия. Флорида. Инемури. Тырма. Нинель. Ялт. Оло. Аҡъяр. Урал. Малай. Наза. Ырыҡта. Шәүрә. Самауыр. Малахит.

**Вертикаль буйынса:** Иҫәнбикә. Третьяков. Уҡытыусы. Ҡуян. Рәссам. Афина. Көҙән. Орлоҡ. Тамара. Герцеговина. Уҡы. Алҡыш. Рәт. Хат. Алмаш. Ылаҡ. Майя. Яза. Рәйсә.

***Кантондар исемлеге 1918 йылдың сентябренә ҡарата мәғлүмәткә ярашлы алынды.**

ҠЫҪҠАСА



# ҺЫУ ТАШАМЫ, ЮҠМЫ?

✓ **Фараздарға ярашлы, Башҡортостанда ташҡын кимәле уртаса күп йыллыҡ күрһәткестәрҙән 10-15 процентҡа түбәнерәк буласаҡ. Өфөлә, Стәрлетамаҡта һәм Бөрөлә ҙур һыу көтөлмәй. Ләкин далалағы һыу ятҡылыҡтары хәүеф тыуҙырыуы мөмкин.** Башҡортостандың гидрометеорология һәм тирә-яҡ мөхитте күҙәтеү идаралығы етәксеһе Вилора Горохольская әйтеүенсә, йылғаларҙа боҙҙоң ҡалынлығы норманан 5-30 сантиметрға кәмерәк. Мартта уртаса температура уртаса күп йыллыҡ күрһәткестәрҙән 2-3 градусҡа юғарыраҡ була. Рәсәй Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығының Башҡортостан буйынса баш идаралығы етәксеһе Марат Латипов һүҙҙәренсә, республикала һигеҙ йылғала хәүеф тураһында алдан иҫкәртергә мөмкинлек биргән 14 автоматик гидропост ҡуйыу күҙаллана. Ағиҙел һәм Өфө йылғалары буйынса аныҡ фараз 25 марттан һуң билдәле була. Урал йылғаһы бассейнында йылғаларҙың 6-11 апрелдә норманан ике-өс көнгә иртәрәк асылыуы көтөлә.

✓ **Янғынды иҫкәртеүсе автоном ҡорамал ут сығыуын иртә стадияла, йәғни төтөн еҫе тойолоу менән көслө тауыш аша белдерә.** Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте ҡарарына ярашлы, был ҡорамалды ауыр социаль хәл-торошта булыусы категория: аҙ тәьмин ителгән күп балалы ғаиләләр, 2018 йылдан башлап, балаһы тыуған ғаиләләр бушлай алырға хоҡуҡлы. Баш ҡалала уларҙы Революцион урамы, 98/2а, Октябрь проспекты, 4/1, Киров урамы, 34, Рыльский урамы, 2/1, Менделеев урамы, 137, корп. 4, Мушников урамы, 17, Чесноковка ауылы, Мәктәп урамы, 4а адрестары буйынса алырға мөмкин. Ғаризаны (347) 298-11-47, 8-903-31-11-147 телефондары аша бирергә йәки Башҡортостан Республикаһының Ғәҙәттән тыш хәлдәр буйынса дәүләт комитетының рәсми сайтындағы "Граждандар мөрәжәғәте" бүлегендә, "Хәүефһеҙ мөхит" порталында, шулай уҡ gkchs.bashkortostan.ru/hotline сайтында ҡалдырырға була.

✓ **7 мартта лицензияһыҙ ҡалған Роскомснаббанктың физик берәмектәргә - 18 миллиард һум, шәхси эшҡыуарҙарға һәм ойошмаларға 4 миллиард һум бурысы бар.** Был хаҡта Башҡортостан Хөкүмәтендәге оператив кәңәшмәлә республиканың Милли банкы рәйесе Марат Кашапов хәбәр итте. Уның һүҙҙәренсә, банк вкладтарҙы страховкалау системаһында ҡатнаша, закон буйынса 1,4 миллион һумға тиклемге аҡсаны иң тәүҙә физик шәхестәргә һәм шәхси эшҡыуарҙарға ҡайтарырға тейеш. Вкладтарҙы страховкалау агентлығы аҡсаны ҡайтарыу өсөн банк-агенттарҙы билдәләй. Алдан хәбәр ителгәнсә, түләүҙәр 21 марттан да һуңға ҡалмайынса башланырға тейеш. "Физик берәмектәр алдындағы бурыстың күбеһе тап страховка суммаһына эләгә", - тине Кашапов.

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1440 һижри йыл.*

| Март (Рәжәб) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалка | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ахшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 18 (11) дүшәмбе | 5:56 | 7:26 | 13:30 | 17:53 | 19:23 | 20:53 |
| 19 (12) шишәмбе | 5:54 | 7:24 | 13:30 | 17:55 | 19:25 | 20:55 |
| 20 (13) шаршамбы | 5:51 | 7:21 | 13:30 | 17:57 | 19:27 | 20:57 |
| 21 (14) кесе йома | 5:49 | 7:19 | 13:30 | 17:59 | 19:29 | 20:59 |
| 22 (15) йома | 5:46 | 7:16 | 13:30 | 18:00 | 19:30 | 21:00 |
| 23 (16) шәмбе | 5:44 | 7:14 | 13:30 | 18:02 | 19:32 | 21:02 |
| 24 (17) йәкшәмбе | 5:41 | 7:11 | 13:30 | 18:04 | 19:34 | 21:04 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**16 март "Антигона"** (Ж. Ануй), драма 12+

**17 март "Хыялый"** (С. Әбүзәр), лирик комедия 12+

**19 март "Хыялға ҡаршы"** (А. Ишбулдина, А. Баймөхәмәтовтың "Ҡалдырма, әсәй!" повесы буйынса) 12+

**20 март "Диңгеҙ. Утрау. Хазина"** (Д. Сәлимйәнов), пираттар мажараһы. Башлана 10.00 0+

**20 март "Мин - Марат"** (У. Ғәлиев), драма 16+

**22 март "Урал батыр".** Үлемһеҙлек тураһында ҡобайыр. Башҡорт халыҡ эпосы буйынса 12+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**16-17 март "Почему весна красна?"** (В. Щербакова). 16.00 0+

**16 март "Буратино"** (А. Толстой). 12.00, 14.00 0+

**17 март "Красная шапочка"** (Ш. Перро). 12.00, 14.00 0+

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**21-22 март "Тылсымлы тирмән"** (М. Кәрим), әкиәт. Башлана 11.00 0+

**21 март "Ғәйфи ағай, өйлән давай!"** (Г. Зәйнәшева), комедия 16+

**22 март "Мөхәббәт һәм нәфрәт"** (З. Биишева әҫәре буйынса), музыкаль риүәйәт 12+

## Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**21 март "Беҙ яҡшыраҡ булдырабыҙ!"** Минзифа Иҫҡужина һәм "Далан" төркөмө концерты

СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҠТАРЫ

# БАЙРАМДЫ ҠАРШЫЛАП

**Башҡортостандың 100 йыллығын республиканың һәр ойошмаһында байрам итәсәктәр. Был турала журналистар менән осрашыуҙа Башҡортостан Республикаһы Башлығының ижтимағи-сәйәси үҫеше буйынса идаралыҡ начальнигы Урал Килсенбаев белдерҙе. Һәр белем усағы, учреждениеның үҙ планына ярашлы үткәргән бөтөн саралары ла ошо юбилейға бағышланасаҡ.**

Мәҙәниәт министры Әминә Шафиҡова әйтеүенсә, Мәскәүҙә Федерация Советында Башҡортостан Республикаһын презентациялау 12-13 мартта булып үтте. Баш ҡалала ла был датаға бәйле саралар башланды. 17 мартта Булат Йософовтың "Беренсе Республика" тарихи фильмы премьераһы үтәсәк. 23 мартта "Башҡортостан" дәүләт концерт залында тантаналы сара була. "Бөйөк йөҙ йыл" тип аталған был концертта яҡташтарыбыҙ Асҡар Абдразаҡов, Алһыу Сафина, "Голос. Дети" телешоу финалистары, Роберт Юлдашев, Милли симфоник оркестр, Халыҡ уйын ҡоралдары милли оркестры, Дәүләт академия хор капеллаһы, "Мираҫ" фольклор ансамбле, Сибай филармонияһы артистары ҡатнашасаҡ. 23-30 майҙа Өфөлә үтәсәк "Туғанлыҡ" төрки телле театрҙар фестивале лә 100 йыллыҡҡа арналасаҡ. Был саранан һуң июндә "Евразия йөрәге" халыҡ-ара сәнғәт фестиваленә лә яҡташтар саҡырылған. Илдар Абдразаҡов, Юрий Шатунов, Земфира, Алһыу Сафина, шулай уҡ Надежда Бабкинаның Йыр театры уның биҙәгенә әүерелер тип көтөлә. Июнь аҙағында тағы ла бер мөһим сара - Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы була, Торатау буйында Урал һабантуйы уҙғарыу ҙа планға ингән.

Урал Килсенбаев билдәләүенсә, ҙур сығымдар талап иткән байрам саралары ойоштороу күҙалланмай, улар өсөн айырым бюджет та ҡаралмаған. 100 йыллыҡҡа 100 объект төҙөлә, уларҙың бер өлөшө быйыл тапшырыласаҡ.

# КӨЛДӨРӨҮ - БӨЙӨК ҺӘЛӘТ

**Хыянаттан да түбәнерәк ҡылыҡ юҡ, тиһәк тә, үкенескә, бөгөнгө заманда был ят күренеш түгел. Хатта ғаиләләге хыянатты ғәҙәти күренеш тип ҡабул итеүселәр ҙә арта килә. Әгәр ҙә хыянат ғаиләләге үҙ-ара мөнәсәбәттәргә яңыса ҡарарға мөмкинлек бирһә, ул саҡта уны нисек атарға? Әллә яңы һөйөүгә башланғыс бирһә? М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театрының ошо көндәрҙә тамашасы хөкөмөнә тәҡдим иткән "Килә яуа, килә яуа" (З. Хәким) тип аталған яңы спектакле ошо турала.**

Береһенә лә сер түгел, был театр комедия уйнай белә. Башҡортостандың халыҡ артисы Нәғим Нурғәлин, Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Венер Камалов, һуңғы йылдарҙа киноларҙа ла, театрҙа ла берҙәй уңышлы эшләгән Рәмзил Сәлмәнов, бер ролдән дә ҡурҡмаған һәм һәр ваҡытта яңыса балҡыш алған Аида Күлбаева, шулай уҡ йәштәр Ләйсән Миңлеғәлиева, Лилиә Исҡужина, Дания Ғөбәйҙуллина - режиссер, Башҡортостандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре Рөстәм Хәкимов тарафынан бик уңышлы һайланып алған актерҙар үҙҙәре үк был комедияның ярты бәхете. Венер Камалов өсөн махсус яҙылған яңы йырҙар ҙа (композитор Ришат Сәғитов) уға үҙенсәлекле кәйеф өҫтәй. Ҡыҙыҡлы сюжет, үҙе лә аңламаҫтан ваҡиғалар уртаһында ҡалған сантехник Шәйхиҙең (Н. Нурғәлин), Рәшиттең (Р. Сәлмәнов) тап үҙебеҙсә итеп һөйләшеүе, башҡорт юморын урынлы ҡулланыуы уны ғәжәйеп көлкөлө һәм, иң мөһиме, халыҡсан итә. Үҙеңдең, таныштарыңдың ҡылыҡ-ҡыланыштарына ситтән ҡарап ултырған кеүек тояһың үҙеңде. Әммә спектакль барышында ҡайһы бер геройҙарҙан арыйһың. Мәҫәлән, һөйәркә Зәйнәб (Дания Ғөбәйҙуллина) сикһеҙ күп кеүек тойола, уның сәхнәлә тамашасыны геройының тышҡы ҡылыҡтары менән көлдөрөргә тырышыуы аҙаҡҡа табан ялҡыта. Ул үҙгәрмәй ҙә, үҫеш тә кисермәй, бер нәмә эҙләмәй ҙә кеүек тойола, шуға образ булараҡ ҡыҙыҡлы түгел. Кешене көлдөрөү ул бөйөк һәләт, ә йәш актерҙарға ҡарап өйрәнеү өсөн өлгөләр был театрҙа, шөкөр, күп.

Комедия - ул йәшерен трагедия, тиҙәр. Мин-минлек хисен еңеп, ниһайәт, бер-береһен ишетергә, бер-береһенең ҡәҙерен аңларға өйрәнгән геройҙарға ҡарап, шуға ғына төшөнәһең - спектаклдең жанры ниндәй булыуға ҡарамаҫтан, бер нәмә генә үҙгәрешһеҙ ҡала - кешенең тойғолары. Сәнғәттә лә, тормошта ла.

# МӘСКӘҮҘӘРГӘ - БАЙРАМ

**Мәскәүҙең халыҡ-ара Музыка йортонда Башҡортостан Республикаһы ойошторолоуҙың 100 йыллығына бағышланған байрам концерты булып үтте. Башҡортостанда тыуып үҫкәндәр, республика, уның иҡтисади ҡеүәте һәм бай мәҙәниәте менән ҡыҙыҡһынғандар йыйылды унда.**



Йыйылыусылар алдында Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров сығыш яһаны. "Республикабыҙҙың 100 йыллығы - тарихи ваҡиға. Рәсәй Федерацияһы Президенты үҙенең указы менән быны раҫланы, шуға күрә республикабыҙҙың икенсе 100 йыллығына яҡшы кәйеф менән аяҡ баҫабыҙ. Башҡортостан Республикаһы - Рәсәй Федерацияһының терәк төбәге. Был - көслө иҡтисад, бик көслө кешелек потенциалы, хеҙмәт һөйөүсән, интеллектуаль яҡтан үҫешкән, юғары белемле халыҡ", - тип билдәләне Радий Фәрит улы.

Гала-концертта Башҡортостанда тыуып үҫкән сәнғәт оҫталары сығыш яһаны. Сәхнәлә Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында Өфөнөң Черниковка биҫтәһе тыуған төйәгенә әүерелгән күренекле скрипкасы һәм дирижёр, СССР-ҙың халыҡ артисы, Башҡортостандың халыҡ артисы Владимир Спиваков етәкселегендәге Рәсәй Милли филармония оркестры уйнаны. Концерт программаһына республиканың билдәле йыр мәктәбе тәрбиәләнеүселәре - Башҡортостандың һәм Татарстандың халыҡ артисы, ике тапҡыр "Грэмми" премияһын алған Илдар Абдразаҡовтың; Башҡортостандың халыҡ артисы, Мария театры солисы Асҡар Абдразаҡовтың; Башҡорт дәүләт опера һәм балет театры солисы, "Алтын битлек" милли театр премияһы лауреаты Дилара Иҙрисованың һәм башҡаларҙың сығыштары инде. Башҡортостандың халыҡ артисы, танылған виртуоз ҡурайсы Роберт Юлдашев, "Сыңрау торна" көйөн заманса аранжировкала уйнап, дәррәү алҡыштарға күмелде. Ҡурайсының Асҡар Абдразаҡов менән берлектәге номерын - "Уралым" йырын да тамашасылар йылы ҡабул итте.

# ИР-ЕГЕТТӘР ЙЫРЛАЙ

**"Ир-егеттәр нимә тураһында йырлай?" I республика ирҙәр вокал коллективтары конкурсы еңеүселәре билдәләнде. Сара Башҡортостандың 100 йыллығына бағышланды.**

Ирҙәр хорын һәм ансамблдә йырлау йолаһын һаҡлау һәм тергеҙеү маҡсатын ҡуйған бәйгегә республиканың төрлө төбәктәренән 32 коллектив килгәйне. Иң йәш ҡатнашыусыға 6 йәш булһа, иң өлкәненә 79 йәш ине. Гала-концертта боронғо халыҡ, патриотик йырҙар ҙа, замансалары ла яңғыраны. Уның финалында күмәкләп "Любэ" төркөмөнөң "Только мы с конем" һәм "Ватага" ансамбле репертуарынан йырҙар башҡарылды. Гран-при Октябрьский музыка колледжының "Аҡ тамыр" вокаль ансамбленә тапшырылды. Өфө тармаҡ технологиялары колледжы студенттарының "Встреча" вокаль ансамбле 1-се урынды алды һәм "Конкурс асышы" номинацияһы еңеүсеһе булды. 1-се урынға шулай уҡ Мәсетле һәм Саҡмағош райондары ансамблдәре лайыҡ булды. Бәйге сиктәрендә оҫталыҡ дәрестәре уҙғарылды, конкурста ҡатнашыусылар Өфө районы Авдон ҡасабаһы мәҙәниәт йортонда концерт биреп тә өлгөрҙө.

## АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ЭТ ДОҒАҺЫ ҠАБУЛ БУЛҺА...

## күктән һөйәк яуыр ине

Үгеҙгә үҫкән мөгөҙ ишәккә үҫһә, йыҡмаған затты ҡалдырмаҫ ине.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Бөтә кешеләр ҙә күп төрлө эш эшләй ала... Тик әгәр ул эшкә хәҙер үк тотонорға тура килмәһә.

**(Роберт Бенчли).**

Әгәр ҙә ҡатының шаяртыуыңа көлә икән, был ике нимәне аңлата ала: йә шаяртыуың ҡыҙыҡ, йә ҡатының шәп.

**(Тристан Бернар).**

Бер кешегә ҡарағанда, бер төркөм кешене алдауы еңелерәк.

**(Кароль Бунш).**

Хәҙер бөтә нәмә лә элеккесә түгел. Минең хәтерем айырыуса.

**(Эшли Брильянт).**

Ғүмер шулай ҡоролған: ҡайһы берҙә ныҡ яратҡан кешеләрҙең ерләнеүендә һәм бик тә күрә алмаған кешеләрҙең юбилейҙарында булырға тура килә.

**(Веслав Брудзинский).**

Әгәр ҙә икәү асыуҙа айырылышһа, тимәк, уларҙың мөнәсәбәттәре ныҡ көслө булған.

**(Поль Валери).**

Хәл-ваҡиға менән көрәшеүсе уның ҡолона әүерелә.

**(Сенека).**

Иҫтәлектәрең күберәк булған һайын, хыялдарға урын әҙерәк ҡала бара.

**(Януш Васильковский).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер кеше теге донъяға күскән. Ғүмерендә бик күп яуызлыҡтар башҡарғанға күрә, ул тамуҡ ҡапҡаһы янына эләккән. Унда уны Фәрештә ҡаршы алған һәм шулай тигән:**

**- Ожмахҡа эләгеү өсөн, һиңә үҙ ғүмереңдә эшләгән бер генә изгелегеңде иҫкә төшөрөү ҙә еткән. Яҡшы ғына уйлап ал.**

**Кеше бер ваҡыт урмандан китеп барғанын, үрмәксене күреп, уны тапамаҫҡа итеп кенә ипләп үтеүен иҫенә төшөргән. Фәрештәнең йөҙөндә йылмайыу күренгән һәм шундуҡ күктән Ожмахҡа алып китер үрмәксе ауы төшкән. Уның эргәһендә торған ҡалған гонаһлылар ҙа теге кеше артынан менә башлағандар. Ләкин кеше, быны күреп, үрмәксе ауы йыртылыр тип ҡурҡып, ҡалғандарҙы ҡыуа, йыға башлаған. Шул ваҡыт ау ысынлап та йыртылып, ул кире Тамуҡҡа эләккән.**

**- Ҡалай ҡыҙғаныс! - тигән Фәрештә. - Үҙең өсөн генә борсолоуың ғүмереңдәге берҙән-бер башҡарылған изгелегеңде лә яманлыҡҡа әйләндерҙе".**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
"Башҡортостан нәшриәте" дәүләт унитар предприятиеһы типографияһында баҫылды (450079, БР, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13)

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 15 март 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4077
Заказ - 210